ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Ҡиске Өфө

6-12 август (мурағай) 2022

№31 (1021)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Туристик үҙәк буласаҡ!**



5

**Электр самокаттары.**

Күңел асыуы, әллә хәрәкәт итеү сараһымы?



6

**Юлда үҙен тота белгәндәр...**

йәмғиәттә лә үҙен тоторға өйрәнә



8-9

**Ябай ауыл малайы**



11

**ТВ-программа** 14

*Мөхтәрәм уҡыусыбыҙ! Шулай итеп, гәзит-журналдарға яҙылыуҙың икенсе миҙгеле башланды: 2023 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 718 һум 98 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# АТҺЫҘ КЕШЕ - ЗАТҺЫҘ КЕШЕ,

## йәғни "Башҡорт аты" фестивале ошо хәҡиҡәтте иҫкә төшөрҙө

**Тәүҙә 1997 йылда баҫылып сыҡҡан "Башҡортостан: Ҡыҫҡаса энциклопедия" сығанағындағы ошо мәғлүмәткә мөрәжәғәт итәйек: "Башҡорт аты сығышы менән дала һәм урман яғы тоҡомдарына ҡарай. Ҡырҡыу континенталь климат шарттарында йыл әйләнәһенә көтөүлектә йөрөү хәлендә барлыҡҡа килгән. Башы ҙур, маңлайы киң, муйыны йыуан, ҡыҫҡа, мундаһы түбән, арҡаһы яҫы, тура, арт һаны бер аҙ һалыңҡы... Башҡорт аты XVII-XVIII быуаттарҙа киң таралған булған. Өфө, Ырымбур губерналарында үрсетелгән. Пермь, Ҡаҙан һәм Һамар губерналарында осраштырған, Себерҙең почта хеҙмәтендә ҡулланылған. Башҡорт тройкалары ла киң билдәле булған. Улар менән (юлда ял иттермәй һәм ашатмай) 8 сәғәттә 120-140 километр юл үткәндәр. Башҡорт ғәскәре ойошторолғанда башҡорт аты ҡулланылған. Рәсәй алып барған бөтөн һуғыштарҙа урыҫ армияһы башҡорт аты менән тулыландырылған. Башҡорт аты 1812 йылғы Ватан һуғышында юғары баһа алған. Был һуғышта башҡорт һыбайлылары Парижға тиклем һуғыша-һуғыша барып еткән һәм кире әйләнеп ҡайтҡан... Хәрби белгестәр башҡорт атын ҡыйыулығы һәм тәүәккәллеге, тырышлығы һәм идара итеүгә еңеллеге, хужаһына ышаныусанлығы, шулай уҡ оҙаҡ ваҡыт шәп сабып һәм йылдам юрғалап барыуға һәләтлелеге (ә был һыбайлыға мәргән атырға һәм ҡылыс менән оҫта эш итергә мөмкинлек бирә) кеүек сифаттары өсөн юғары баһалағандар. Башҡорттар бындай йөрөшкә сыҙамлы аттарҙы махсус тәрбиәләгәндәр... Башҡортостандың 21 тоҡомсолоҡ заводында башҡорт аты менән тоҡомсолоҡ эше алып барыла һ.б."**



(Дауамы 12-13-сө биттәрҙә).

*БАШ ҠАЛАМ*

# БАЛАЛАРҒА...

## бер ҡыуаныс булды



**Йәйге каникулдарҙа балаларҙы мотлаҡ баш ҡалаға алып килергә тырышабыҙ. Быйыл да Өфөгә килеп, баш ҡаланы ҡарап, парктарында йөрөп, күңел булып ҡайттыҡ. Нимә генә тимә, Өфө йылдан-йыл үҫә, матурая. Бөгөнгө яҙмамда күҙгә эләккән үҙгәрештәр тураһында бәйән иткем килә.**

Өфөләге иң яратҡан урыныбыҙ - Якутов исемендәге парк. Йөҙйәшәр ағастары, матур күле, балалар өсөн күп төрлө уйнау нөктәләре булыуы менән һәр кемдең күңелен арбай был парк. Был килгәндә күлде ылымыҡтарҙан таҙартыу эшен башлауҙарын күреп ҡыуандым, элек тонйорап, бысраҡ булып ятҡан күл дә таҙарып ҡалған берүк. Шулай уҡ парктағы канализация люктарын төрлө һүрәт менән биҙәүҙәре лә урынлы һәм матур, сөнки бында балалар күп йөрөй һәм һоро төҫтәге ҡапҡастар урынына сағыу түңәрәктәр ятыуы күңелдәрҙе күтәрә.

(Дауамы 2-се биттә).

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# РУЛЬ АРТЫНДАҒЫ ИҪЕРЕКТӘР...

## яҙаһын алмай ҡотола



**Уттай ҡыҙыу йәй уртаһы күп кешегә тәбиғәт ҡосағында ял, ҡояшлы көндәр, ҡосаҡ-ҡосаҡ гөлләмә, емеш-еләген бүләк итеп, елберҙәп үтеп тә китте. Үтһен әйҙә, үткән эштән төш яҡшы, ти. Үкенескә, ҡайһы берәүҙәргә был матур айҙың ләззәтен күрергә, тормош шатлыҡтарына ҡыуанырға насип булманы... Ә бит уларҙың күбеһе йәш кешеләр, араларында бер гонаһһыҙ балаҡайҙар бар ине...**

(Дауамы 2-се биттә).

12+

БАШ ҠАЛАМ

# БАЛАЛАРҒА...

## бер ҡыуаныс булды

(Башы 1-се биттә).

Паркка килеүен килһәк, Өфө балалар тимер юлына һуғылмайынса ҡайтмайбыҙ. Унда йәйге практика үтеп йөрөүсе егет һәм ҡыҙҙар әйтеүенсә, быйыл балалар тимер юлы үҙенең 69-сы миҙгелен билдәләй икән. Ошо йылдар эсендә күпме бала һәм шулай уҡ ололар ҙа бәләкәй магистралдең пассажирҙары булған. Таҙа вагондар, мөләйем вагон ҡараусылары, поезд тәҙрәһенән асылған парк күренештәре - барыһы ла ялдың матур булыуына үҙ өлөшөн индерә.

Быйыл, ниһайәт, Ағиҙел буйлап пароходта сәйәхәт итергә форсат сыҡты. Әллә нисә йыл өфөләр һәм ҡала ҡунаҡтары йылғанан ҡалаға ҡарап һоҡланыу мөмкинлегенән мәхрүм ине, пароходсылыҡты аяҡҡа баҫтырып, иллә шәп эшләгәндәр. Әйтеүе генә анһат "пароходтар йөрөй башлаған", тип, ә уның артында күпме көс түгелгәнен, бихисап кешенең эше ятҡанын уйлап та бирмәйбеҙ.

Күҙәтеү тәгәрмәстәренә (колесо обозрения) ултырып, Өфөгә юғарынан ҡарап, уның гүзәллегенә һоҡландыҡ. Әйтергә кәрәк, бында хаҡтар ҙа тешләшмәй, ә күпме тәьсораттар бүләк итә.

Яңы асылған Ҡашҡаҙан паркын да барып күрҙек, ләкин күлендә һыу инергә ҡыймаҡыҡ, ҡомонда ғына ҡыҙынып яттыҡ. Ҡомо ифрат шәп, әлбиттә, сит ил курорттарындағы кеүек: таҙа, аяҡҡа шул тиклем йомшаҡ, балаларға уйнарға ҡулайлы. Ә парк үҙе бөтә яҡлап та уҙғарған, рәхәтләнеп ғаилә менән ял итергә бөтә унайлыҡтар булдырылған.

Һуңғы йылдарҙа Өфөлә генә түгел, республикаsucc башҡа ҡалаларында ла парктарҙы төҙөкләндереүгә ҙур иғтибар бүленгәнен һәр кем күреп-белеп тора. Бик яҡшы күренеш был, сөнки ҡала кешеһе тәбиғәттән алыҫ һәм уның өсөн тәбиғәтте нәҡ ошондай парктар көүҙәләндерә лә инде. Мәҫәлән, Өфөләге Урмансылар паркы ни тиклем ҙур һәм матур, балалар майҙансығы ла бар, спорт ярыуысылар өсөн дә махсус урындар булдырылған, тәбиғәттә шешлек ҡыҙҙырырға әүәҫтәргә иһә ҙур аҡлан бирелгән. Әллә күпме төрлө ағастары үҫкән, хайуандары ла булған был парк Өфөнең ғорурлығы ул. Уны мотлаҡ һаҡларға, ағастарын ҡырмаҫҡа һәм туҙҙырмаҫҡа кәрәк.

Өфөлә матур һәм иғтибарға лайыҡ урындар бик күп. Шул аҡ тотош кварталды алып торған "Арт-квадрат" майҙансығын ғына алайыҡ, бөтә йәштәгеләр өсөн дә ял итерлек матур ер.

Беҙ, ғәҙәттә, ауылдан электричка менән киләбеҙ һәм шуның менән үк ҡайтабыҙ, шуға күрә ҡаланың "тимер ҡапҡаһы" - тимер юл вокзалы тураһында бер-ике һүҙ әйткем килә. Мин студент саҡтағы вокзал менән сағыштырып та булмай. Әлекке тынсыу, ҡараңғы, унайлыҡтары булмаған тимер юлы вокзалы урынында хәҙер заманса, таҙа, яҡты, бөтә уңайлыҡтары булған, балалар өсөн махсус уйнау урыны ҡаралған, хатта бизнес-залы булған бина тора. Вокзал алды ла күркәмләнгән, уйналы эскәмйәләр ҡуйылған, сәскәләр хуш еҫ таратып ултыра, вокзалдан сыҡҡан һәр кем юл аша урынлаштырылған скульптуралар ансамблен күрә, ғөмүмән алғанда, уҙғарештәр тик яҡшы яҡҡа ғына.

Дөйөмләп әйткәндә, Өфөбеҙ дан ҡала! Баш ҡалабыҙ артабан да үҫһен һәм матурайһын.

**Әлфирә СЫНБУЛАТОВА.**
**Белорет районы.**

БЫНАҒАЙЫШ!

# РУЛЬ АРТЫНДАҒЫ ИҪЕРЕКТӘР...

## яҙаһын алмай ҡотола



(Башы 1-се биттә).

Июлдең ахырғы ике аҙнаһы, әйтерһең дә, юлаусыға юлдар ябылды; машинаға атланғандың, гүйә, күҙҙәре бәйләнде; ниәтләп сыҡҡан сәфәрҙәре һуңғыһы булып, күптәр ҡазаға юлыҡты. Нимә булды был? Әллә асмандарҙан юл күрһәтеүсе йондоҙҙарҙың йүнәлеше буталдымы? Әллә йыһан түрендә хаос ҡуптымы? Юҡ, күк йөҙө таҙа һәм саф, йондоҙҙар ҙа үҙ тәртибен белә, Ер ҙә үҙ күсәрендә әйләнә. Бөтөн бәлә - аяҡ аҫтыбыҙҙа, арабыҙҙа. Әҙәм балаһының тәртипһеҙлеге, белекһеҙлеге, яуапһыҙлығы, битарафлығы булып йәнәшәбеҙҙән... атламай, күҙ әйәрмәҫ тиҙлектә елдерә, саба, бәрә, тапата. Бына шундай иманһыҙҙан алыҫыраҡ йөрөтһә ине Хоҙай барсабыҙҙы; хәяһыҙҙы, тупһыҙҙы, эскесене юлыбыҙға сығарып, ҡазаға сәбәп итә күрмәһен ине!

...Үҙәк өҙгөс хәбәрҙәрҙең тәүгеһе йәшен тиҙлегеләй 18 июлдә таралды, Баҡалынан алып башҡа алыҫ тарафтарға. "Аһ!" итте эсендә йәне булған бөтә гәм - егермеһе лә әле тулмаған был дүрт ҡыҙ баланың машинанан тапалып йән биреүен ишетеп, белгәне-белмәгәне лә берҙәй үк тетрәнде. Атаәсәләре, яҡындарына Хоҙай ярҙам бирһен. Был ҡыҙсыҡтарҙың сәскәгә бөрөләнгән генә ғүмерҙәрен өҙөүсе - эсеп алып, ҡыҙмаса хәлдә машина ҡыуыусы 23 йәшлек егет. Уның да башланып ҡына торған йәш ғүмере рәшәткә артында дауам итәсәктер, моғайын. Әммә "алыҫ булмаған" был урындарҙан енәйәтселәрҙе йыш ҡына "өлгөлө тәртиптәре" өсөн сығарып та ебәрәләр, шулай итеп, йәмғиәтебеҙҙә рецидивистар үрсетелә. Был егеттең яҙмышы нисек булыр, әммә республи-

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# МИЛЛӘТ КИЛӘСӘГЕ...

## ишле балалар



**Интернет селтәрҙәрендә Европа халыҡтарының киләсәген сағылдырған статистика мәғлүмәттәре менән танышып, хайран ҡалырлыҡ. Алдынғы мәҙәниәтле, иҡтисади йәһәттән ныҡ үҫешкән булһалар ҙа, яҡын киләсәктә тыуымдың кәмеүе арҡаһында бөтөнләйә менән милләт булараҡ йәшәүҙән туҡтауҙары ихтимал. Ирекһеҙҙән, "кеше ауырлыҡҡа түҙә, рәхәтлеккә түҙә алмай", тигән әйтем иҫкә төшә.**

Милләт юҡҡа сыҡмаһын өсөн һәр ғаиләгә суммар тыуым коэффициенты мотлаҡ 2,5 бала булып, тыуым 2,11-гә төшһә, ул юҡҡа сығасаҡ икән. Хәҙерге ваҡытта Францияла төп халыҡтың суммар тыуым коэффициенты - 1,8, ә ошо уҡ илдә йәшәгән ғәрәптәрҙә ул 8,1 бала. Һөҙөмтәлә был илдә бик күп сиркәүҙәр, мәктәптәр ябыла, йә мәсеттәргә үҙгәртеп ҡорола. Англияла төп халыҡҡа суммар тыуым коэффициенты - 1,6, Грецияла - 1,3, Италияла - 1,2, Испанияла 1,1 бала тура килә.

Европа берләшмәһенә ингән 31 илдә урындағы халыҡтың суммар тыуым коэффициенты 1,38-гә етһә, Голландияла әлеге ваҡытта уҡ 50 процент балалар ғәрәп милләтенән һәм был һан мосолмандар файҙаһына артыуы дауам итә. Шуға ла үрҙә миҫал итеп килтерелгән илдәрҙәге төп халыҡтарҙың һаны 20-30-50 миллионлап булһа ла, киләсәктәре хәүефле икәнен күрәбеҙ.

Ә 1,5 миллион самаһы ғына булған милләтебеҙҙең киләсәген уйлаһаң, бигерәк борсолдора. Тарихҡа күҙ һалһаҡ, ниндәй генә ауыр, ҡыйралышлы замандар булмаһын, тыуым юғары булыуы арҡаһында ғына һаҡланып ҡалғанбыҙ. Ҡалғанбыҙ ғына түгел, ниндәй ғәйрәтле лә халыҡ булғанбыҙ. 1917 йылға тиклем аҫабалыҡ хоҡуғын ҡулынан ысҡындырмаған ата-бабаларыбыҙ. Былдай хоҡуҡ урыҫ дворяндарында ғына булған.

Шуға күрә лә бөгөн башҡорт ғаиләләрендәге ишле балалар һәр кемдең шәхси эше генә түгел, ә милләт әһәмиәтендәге мәсьәлә икәнен аңларға кәрәк. Балаларыбыҙҙы ата-бабаларыбыҙ рухын һеңдереп, заманса фекерләргә, яңыса хужалыҡ алып барыу асылдарын өйрәтеп үҫтереү - уныһы тағы бер мөһим мәсьәлә.

**Р. БАСИРОВ,**
**мәғариф һәм хеҙмәт ветераны.**
**Ғафури районы Һабай ауылы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының 4 августҡа мәғлүмәттәре буйынса, республикала коронавирус инфекцияһын йоҡтороуҙың 91 осрағы теркәлгән. Әлеге ваҡытта 135 пациент стационарҙа дауалана, уларҙың 79-ы - 60 йәштән өлкән. 21 пациент ауыр хәлдә, өсәүһе үпкәне яһалма елләтеү аппараты ярҙамында тын алырға мәжбүр. 452 кеше, шул иҫәптән оло йәштәге 131 сирле амбулатор шарттарҙа дауалана. Тәүлек эсендә 12 дауахананан тыш пневмония осрағы теркәлгән. Бер тәүлектә Башҡортостанда 10755 кеше прививка яһатҡан.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров М.Шайморатов исемендәге башҡорт мотоуҡсылар батальоны яугирҙары әҙерлек үткән урынға барҙы. "Беҙҙең яугирҙар - күп быуаттар буйына тыуған ерен һаҡлаған, һуғышта еңгән яугирҙарҙың вариҫтары. Хәҙер ҙә шулай булыр тип ышанам. Афарин, егеттәр, ҡуйылған бурыстарҙы үтәйһәр. Командирҙар уларҙы маҡтай, был бик мөһим", - тип яҙҙы Башҡортостан Башлығы социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. Республика ошо батальонды һәм Александр Доставалов исемендәге батальонды кейем-һалым, аҙыҡ-түлек, медикаменттар менән тәьмин итте, тип билдәләне ул.

✓Рәсәй Президенты указы менән Башҡортостанда тыуып үҫкән ике егеткә - Өфөнән Максим Серафимовҡа һәм Әбйәлил районынан Тамерлан Илһамовҡа махсус операция барышында күрһәткән батырлығы өсөн үлгәндән һуң Рәсәй Геройы исеме бирелде. Шулай уҡ тағы дүрт яҡташыбыҙ үлгәндән һуң Батырлыҡ орденына лайыҡ булды. Улар араһында - Өфөнән Альберт Аллаголов, Владимир Кельдин, Сибайҙан Егор Ефимов, Ҡырмыҫҡалы районынан Марсель Ҡорманалин.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә Благовещенды 2021 йыл йомғаҡтары буйынса Рәсәйҙең иң яҡшы моноҡалалары рейтингында лидер булыуы менән ҡотланы. Республика етәксеһе әйтеүенсә, эксперттар Благовещенда эшҡыуарлыҡтың әүҙемләшеүен билдәләй. Бынан тыш, һорау алыу һөҙөмтәләре халыҡтың муниципалитет етәкселегенә ышаныуын күрһәтте.

✓ ***Әлеге фажиғә булған аҙнаның ике ял көнөндә генә лә автоинспекторҙар эскән килеш машина йөрөтөүсе 258 кешене туҡтатҡан! Ә юл һағы ҡулына эләкмәгәндәре күпмелер!***



ка Башлығы әйтмешләй, ул язанан ҡотолоп ҡалырға тейеш түгел. Ҡылығына күрә - язаһы. Һәр хәлдә, был ысынлап та шулай булырға тейеш.

Тик ни өсөн һуң эскән килеш рулгә ултырыусылар һаны кәмемәй? Республика Хөкүмәтенең 18 июль ултырышында яңғыраған бер мәғлүмәт башҡа һыймай: әлеге фажиғә булған аҙнаның ике ял көнөндә генә лә автоинспекторҙар эскән килеш машина йөрөтөүсе 258 кешене туҡтатҡан! Ә юл һағы ҡулына эләкмәгәндәре күпмелер! Эләккәндәре лә, иманым камил, еңелсә ҡурҡыу менән ҡотолғандыр, бәлки. Эскән водителдәр һанының һис тә кәмемәүе шундай уйға килтерә. Ҡабатлап тотолғанын көтмәй, тәүге осраҡта уҡ бындай иманһыҙҙарға ҡарата ҡәтғи саралар күрелһә, аңлы рәүештә бындай енәйәткә йөрьәт итеүселәр кәмер ине барыбер. Бөгөн уларҙы штраф менән генә айбындырыу, күрәһең, мөмкин түгел икән, стандарт булмаған юлдар менән көрәшеүҙе законлаштырыу кәрәктер, бәлки. Мәҫәлән, машиналарын бөтөнләйгә булмағанда ла бер нисә ай йә йылға тартып алыу, моғайын да, аңына килтерер ине "һыу мейеләрҙе", сөнки хәҙер кеше машинаһыҙ - тереғул, бер ҡайҙа ла йөрөй алмай, йәйәү йөрөүҙе күҙ алдына ла килтермәй. Бына замана! Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров эсеп тотолған водителдәр араһында муниципаль һәм дәүләт хеҙмәткәрҙәре булған хәлдә, ундайҙарҙы эштәренән ҡыуыу кәрәк, тигән фекер әйтте. Дөрөҫ фекер, әгәр ҙә ул ҡыҙыулыҡ ҡатыш асыу менән генә әйтелмәгән булһа инде...

Һуңғы көндәрҙә республикала үлемесле юл-транспорт фажиғәләренең күбәйеп китеү сәбәптәре бихисап һәм төрлө. Социаль селтәрҙәрҙә ҡайһы берәүҙәр юлдарҙың насар хәлдә булыуы, күрһәткестәр һәм башҡа юл билдәләренең булмауы тураһында яҙа, ләкин бөтөн сәбәптәрҙән дә иң хәүефлеһе - иҫерек водителдәр. Икенсенән, юлдарҙа ЮХХДИ постарының булмауы. Ғәжәп, һуңғы йылдарҙа улар ҡайҙалыр зым-зыя юҡ булдылар түгелме? Элек ҡыуаҡ арттарынан уйламағанда килеп сығып, юл-хәрәкәт тәртибен боҙоусыларға ҡаршы "үҙҙәренсәрәк" булһа ла көрәшә инеләр. Әйҙә, көрәшһендәр ине әле лә, ни тиһәң дә, водителдәр яттан локацияһын белеп бөткән камералар ғына тере һаҡты алыштыра алмай, күрәһең. Үҙәктән алыҫҡараҡ киткән һайын, видеокамералар ҙа һирәгәйә. Водителдәрҙең тағы бер гонаһы - руль артында килеш юл буйына телефондан һөйләшеп барыуҙары. Был шулай уҡ уларҙың иғтибарын тарҡатыусы сәбәптер. Мәҫәлән, алты кешенең үлеменә килтергән Кушнаренко - Өфө маршруты водителен дә шаһиттар тиҙлек ҡағиҙәһен боҙоуҙа, телефондан һөйләшеүҙә, микроавтобуста баҫып барыусы артыҡ пассажирҙар алыуҙа ғәйепләйҙәр.

Әйткәндәй, хәрәкәт айырыуса тығыҙ булған тап иртәнге сәғәттәрҙә трассала авария хәленә сәбәпсе булған юл эштәре алып барылыу ҙа аңлашылып бөтмәй. Ҡайһы бер водителдәрҙең юл-хәрәкәт ҡағиҙәләрен белеп еткермәүе, тәжрибәһеҙлек факттары ла күп. Мәҫәлән, Өфө ҡалаһының Аврора менән С. Перовская урамдары киҫелешендә 38 йәшлек ҡатынды 5 йәшлек улы менән бергә бәреп үлтергән "автоледи" тәүҙә, үҙе аңлатыуынса, артҡы урындағы балаһын ашатыу сәбәпле иғтибарын тарҡата һәм газ менән тормоз педалдәрен бутай. Берәй нәмә аңланығыҙмы, йәмәғәт? Урам уртаһынан китеп барғанда, рулдә килеш, өҫтәүенә, бала ашатыу өсөн нисә күҙ һәм нисә ҡул кәрәк икән? Эйе, был юҫыкта руль артындағы ҡатын-ҡыҙҙың бер юлы күлдәк алыштырып, көҙгөгә ҡарап, күҙҡаш, ирен буяу һәләттәре хаҡындағы лаҡаптарҙың көләмәс кенә түгеллегенә ышанырға ла тура килә...

Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы: июлдең 18-енән 31-нә тиклемге ике аҙналағы автоһәләкәттәрҙә 21 кеше һәләк була, йәрәхәт алып, дауаханала ятыусылар бихисап. Ғәҙәттән тыш бындай юл-транспорт фажиғәләре республиканың тейешле ведомстволары иғтибары үҙәгендә, тип хәбәр итә "Башинформ". БР Эске эштәр министрлығы, прокуратура, тәфтиш комитеты хәлде контролдә тота, ә БР прокуроры И.Пантюшин республиканың автомәктәптәрендә водителәрҙе уҡытыу , пассажирҙар ташыусы ойошмаларға бирелеүсе лицензияларҙың законлылығын тикшерергә ҡушҡан.

Ә бына иҫерек водителдәргә ҡарата ниндәй тамырынан яңыса көрәш саралары күрелер? Сөнки ошоға тиклемге закондар бер ниндәй һөҙөмтә бирмәй. Беҙҙә закон сығарыусылар, нишләптер, ҡәтғи саралар күреүҙән тартына. Ә бына Японияла, мәҫәлән, эсеп рулгә ултырған водитель машина йөрөтөү хоҡуғынан мәңгелеккә мәхрүм ителә, Көньяҡ Корееяла ундай ғәйеп өсөн 15 йыл төрмә янай, үлемгә сәбәпсе водитель хатта ки ғүмерлеккә хөкөм ителеүе лә бар. Беҙҙә иһә бындай хәлдәрҙән аҡса түләп ҡотолалар. Ә бит кешелекле закон енәйәтсене түгел, ә меңәрләгән ғәйепһеҙ граждандарҙы - башбаштаҡлыҡтың потенциаль ҡорбандарын ярларға тейеш түгелме ни?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ХУПЛАЙЫМ!*

# АЙЫҠ АУЫЛ ӨЛГӨҺӨ...

## башҡаларға ла йоҡһон ине

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың Көйөргәҙе районы Яҡут ауылында алкоголь һатыуҙы тыйыу тураһында законға ҡул ҡуйыуы һәм уның 19 июлдә үҙ көсөнә инеүе хаҡында яңылыҡ республикала ярайһы ҙур яңғыраш алды. Парламент бындай ҡанунды тәүгә, дөрөҫөрәге, эксперимент рәүешендә ҡабул итте. "Был экспериментҡа беҙ ошо сараның һөҙөмтәлелеген һәм маҡсатҡа ярашлылығын аңлау өсөн барабыҙ", - тине БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев.**




Закон беренсегә ҡабул ителһә лә, был хаҡта һүҙ быға тиклем дә булды. Улай ғына ла түгел, ошондай уҡ тәҡдим менән беҙ ҙә, Күгәрсен районы Ялсы ауыл советы биләмәһе халҡы, сыҡҡайныҡ. Билдәле булыуынса, Башҡортостан Республикаһында алкоголле продукция етештереү һәм уның әйләнеше өлкәһендәге эшмәкәрлекте көйләү хаҡындағы ҡануниәткә индерелгән үҙгәрештәргә ярашлы, һәр ауыл үҙенең территорияһында иҫерткес эсемлек һатыу-һатмауҙы хәл итеү хоҡуғына эйә. 2014 йылда беҙҙең биләмәләге Һапаш ауылы "Айыҡ ауыл" республика конкурсында ҡатнашҡайны. Йәмәғәтселәр "Айыҡ ауыл" исемен йөрөткән биләмәлә йәшәгән кешеләр сәләмәт йәшәү рәүешен һайларға, айыҡ тормош алып барырға тейеш, тигән фекергә килде һәм үрҙә атап кителгән законға ярашлы, Башҡортостанда тәү башлап тораҡ пунктта алкоголле эсемлек һатыуҙы тыйыу хаҡында Дәүләт Йыйылышы депутаттарына мөрәжәғәт иттек.

Уның өсөн иң тәүҙә ауыл халҡы менән йыйылыш үткәрҙек. Һорау алыу ойошторорға ла була ине. Дөйөм бер ҡарарға килеп, 2016 йылда Ҡоролтайға сыҡтыҡ. Тәү башлап йөрөүселәргә һәр ваҡыт ҡараш төрлөсә була: беҙгә "Ваҡытынан алда мөрәжәғәт иттегеҙ" тигән яуап бирҙеләр.

Яҡут ауылында алкоголле эсемлек һатыу тыйылыуы тураһында закон ҡабул ителеүенә, әлбиттә, ҡыуандыҡ. Граждандарҙың ауылда алкоголь һатыуҙы тыйырға хоҡуғы бар, уны файҙаланып ҡарарға теләүҙәре бик яҡшы. Нимә килеп сығыр - күҙ күрер. Пилот проекты уңышлы килеп сыҡһа, уны башҡа тораҡ пункттар ҙа күтәреп алыр ине, тип уйлайым.

Айыҡ тип танылған ауылдарҙа ла спиртлы эсемлектәр һатыуҙы һәм эсеүҙе дауам итәләр, тигән фекерҙәр ишетергә тура килә. Әммә был беҙҙең райондың "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашҡан тораҡ пункттарына ҡағылмай, тип уйлайым. Сөнки беҙҙә эскелек ҡырҡа кәмене. Ауыл халҡы донъя көтөргә, аҡса эшләргә, йорт-ҡураһын бөтәйтергә тырыша. Хәҙер хатта ауыл тирәһендә һирәк-һаяҡ бер генә кеше эсһә лә, бөтә ауыл эскән кеүек тойола. Сөнки ул ят күренеш һымаҡ. Туй тантаналарын, тыуған көндәрен, өмә, һуғым аштарын өҫтәлгә араҡы ултыртмай үткәргән кешеләр ҙә ғәҙәтигә әйләнә бара.

Дин дә үҙенекен итә. Беҙҙең ауыл советы биләмәһендә өс мәсет бар: Һапашта, Хоҙайбирҙелә, Ялсыла. Ғибәҙәт йорттарының булыуы бик яҡшы тип уйлайым. Дини йолалар кешене фәҡәт яҡшылыҡҡа, тәүфиҡҡа, тәртипкә, әҙәпкә әйҙәләй, сабырлыҡҡа өйрәтә, араҡы эсеү, тәмәке тартыу кеүек зыянлы ғәҙәттәрҙән арындыра.

Ауылдарҙа алкоголь һатыуҙы тыйыу үҙенең ыңғай һөҙөмтәһен бирмәй ҡалмаҫ, тип уйлайым. Шуға күрә был яңылыҡты ҡыуанып ҡабул иттем. Ул эселгән араҡының, һыраның күләмен генә түгел, ә эскелектән, быға бәйле ауырыуҙарҙан вафат булыусылар һанын да кәметергә, дөйөм демография хәлен яҡшыртырға ла булышлыҡ итер, тип өмөтләнәм.

Әлбиттә, эсәм тигән кешене закон менән генә тыйып булмай. Халыҡты сәләмәт тормошҡа йәлеп итеү, уларҙың буш ваҡытын файҙалы итеп ойоштороу кәрәк. Был йәһәттән спорт менән шөғөлләнеү өсөн шарттар булдырыу, мәҙәни саралар, ауыл байрамдары үткәреү мөһим. Бына шул ваҡытта алкоголгә ҡаршы көрәш үҙенең ыңғай һөҙөмтәһен бирәсәк.

**Ирек ЮДАЕВ,**
**Ялсы ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы.**
**Күгәрсен районы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала "Сәләмәтлек поездары" йөрөүе тураһында иҫкә төшөрҙө. Акция дауам итә, унда 26 мобиль комплекс һәм 156 белгес эшләй. "Хәтерегеҙгә төшөрәм, тикшерелеү - бушлай. Белгестәргә яҙылырға кәрәкмәй - сират буйынса ҡабул итәләр. Иң мөһиме, үҙегеҙ менән паспорт һәм мотлаҡ медицина страховкаһы полисын алырға онотмағыҙ. Барығыҙға ла һаулыҡ! Үҙегеҙҙе һаҡлағыҙ!", - тип яҙҙы Радий Хәбиров Telegram-каналда. 2022 йылдың башынан Башҡортостандың алыҫ райондарында йәшәгән 54 000-гә яҡын кеше "Сәләмәтлек поездары"нда тикшереү үткән.

✓Мәләүез һөт эшкәртеү предприятиеһы тәүгә үҙ продукцияһын экспортҡа сығарҙы. Унда киптерелгән һөт Ҡытай Халыҡ Республикаһына оҙатылды. Россельхознадзорҙың Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы белгестәре автомобиль транспорты менән Ҡытайға оҙатыр алдынан бөтә партияны тикшереп сыҡты. "Продукцияға 5D формаһындағы халыҡ-ара ветеринария сертификаты һәм Ҡытай Халыҡ Республикаһына оҙатыу өсөн сертификат бирелгән", - тип белдерҙеләр Ветеринария һәм фитосанитария күҙәтеүе буйынса федераль хеҙмәттә.

✓Башҡортостандан Иранға аҙна һайын самолеттар оса башлай, тип хәбәр иттеләр Федераль һауа транспорты агентлығының матбуғат хеҙмәтенән. Ике илдең авиация властары ошо хаҡта һөйләшеп килеште. Өфөнән самолет маршруттарынан тыш, Тегеран, Мешхед, Исфахан, Решт һәм Ислам республикаһының башҡа ҡалалары аэропорттарына Мәскәүҙән, Санкт-Петербургтан, Әстрхандан, Татарстандан һәм Сочиҙан осорға мөмкин.

✓Федераль һауа транспорты агентлығы илдең көньяғына һәм үҙәк өлөшөнә осоштарҙы ваҡытлыса сикләү режимын 11 августҡа тиклем оҙайтты. Был хаҡта мәғлүмәт ведомствоның рәсми сайтында баҫылған. Һүҙ Анапа, Белгород, Брянск, Воронеж, Геленджик, Краснодар, Курск, Липецк, Дондағы Ростов, Симферополь һәм Элиста аэропорттары хаҡында бара. "Авиакомпанияларға Сочи, Волгоград, Минераль Һыуҙар, Ставрополь һәм Мәскәү аша альтернатив маршруттар тәҡдим ителә. Башҡа аэропорттар ғәҙәттәгесә эшләй", - тип тиелә белдереүҙә.

*✓ Властар чиновниктарҙың сығымдарын ҡәтғи контролләмәксе. Был иҫәпкә мәктәп директорҙары ла, баш табиптар ҙа, балалар баҡсалары мөдирҙәре лә инә. Яңылыҡ 200 меңдән ашыу кешегә ҡағыласаҡ.*



*ҠЫҪҠАСА*

# ТАҒЫ ҠАЙТА...

**Сентябргә коронавирустың әүҙемләшеүе көтөлә. Был хаҡта Хөкүмәт кәңәшмәһендә Роспотребнадзорҙың Башҡортостан идаралығы етәксеһе Анна Казак белдерҙе.** Ләкин республика халҡының яңы тулҡынға әҙерләнеү һәм вакцина яһатыу өсөн ваҡыты бар, тип билдәләне ул. Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин белдереүенсә, бөгөнгә республикала коронавирус инфекцияһына бәйле хәл тотороҡло ғына. 1 августа мәғлүмәттәр буйынса, 108 пациент - стационарҙа, 363-ө амбулатор шарттарҙа дауалана. Республикала инфекцияның таралыу коэффициенты 1,3 тәшкил итә. Һуңғы ете көндә үҫеш - 26 процент. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығына 29 августа вакцинация һәм ревакцинация барышы тураһында мәғлүмәт бирергә ҡушты.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә Өфө - Раевка маршруты буйынса "Ҡарлуғас" тиҙ йөрөшлө поезд маршрутының асылыуы тураһында хәбәр итте.** "Статистика буйынса, был халыҡ араһында популяр йүнәлештәрҙең береһе булып тора. Юлға 1 сәғәт 40 минут ваҡыт китә. Димдә, Шишмәлә, Шиңгәккүлдә һәм Дәүләкәндә туҡтай. Өфөнән иртәнге сәғәт 10-сы 4 минутта, ә Раевканан киске 6-сы 3 минутта юлға сыға (урындағы ваҡыт). Составта биш вагон", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Тиҙҙән республиканың көнсығышына "Орлан" поезының яңы маршруты асыла, тип тә өҫтәне ул. Бынан тыш, 2022 йылдың декабренә ҡәҙәр бөтә йүнәлештәр буйынса Башҡортостанда икенсе пар электричка йөрөй башлай.

✓ **Башҡортостан Хөкүмәте республиканың рәсми туристик маршруты статусын билдәләү һәм уны файҙаланыу тәртибен раҫланы.** Хөкүмәт ҡарарында билдәләнеүенсә, туристик маршрутҡа рәсми статус туроператорҙарҙан, туристик клубтарҙан, мәҙәниәт учреждениеларынан, мәғариф ойошмаларынан һәм туризм өлкәһендәге берләшмәләрҙән, муниципалитеттарҙың урындағы үҙидара органдарынан һәм башҡаларҙан килгән тейешле ғаризаны ҡарағандан һуң бирелә. Ғаризаны Башҡортостандың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм министрлығына тапшырырға кәрәк. Ғариза яҙыусыға критерийҙар иҫәбендә - республика биләмәһендә бер йылдан ашыу эшмәкәрлек алып барыу; туристик маршрутты Рәсәйҙең һәм сит илдәрҙең киң мәғлүмәт сараларында, социаль селтәрҙәрҙә, рейтингтарҙа күрһәтеү.

✓ **Киләсәктә беҙ дәүләт түрәләренең бер һум сығымы тураһында ла белеп торасаҡбыҙ. Сөнки Рәсәйҙең Хеҙмәт һәм социаль яҡлау министрлығы коррупцияға ҡаршы ҡануниәткә үҙгәрештәр индерергә ниәтләй.** Властар чиновниктарҙың сығымдарын ҡәтғи контролләмәксе. Был иҫәпкә мәктәп директорҙары ла, баш табиптар ҙа, балалар баҡсалары мөдирҙәре лә инә. Дәүләт учреждениелары етәкселәре хатта алған кредиттары һәм уға түләүҙәр тураһында хәбәр итергә тейеш буласаҡ. Шулай уҡ етәкселәрҙең тормош юлдаштарының, балиғ булмаған балаларының сығымдары ла билдәле булырға тейеш. Закон проекты махсус комиссия тарафынан хупланған. Яңылыҡ 200 меңдән ашыу кешегә ҡағыласаҡ. Рәсәйҙең статистика хеҙмәтенән белдереүҙәренсә, беҙҙең илдә шул сама дәүләт һәм муниципаль учреждение бар икән (2022 йылдың 1 апреленә ҡарата).

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ДАНЛЫ ХУЖАЛЫҠТА

**Мәләүез районы буйлап эш сәфәре барышында Радий Хәбиров "Салауат исемендәге колхоз" ауыл хужалығы етештереү кооперативы баҫыуҙарында булды. Хужалыҡ етәксеһе Рәмис Иманғолов һүҙҙәренсә, быйыл гектарынан 45 центнер уңыш көтөлә.**



2020-2021 йылдарҙа ауыл хужалығы предприятиеһы өҫтөнлөклөләр исемлегенә ингән инвестиция проектын тормошҡа ашырған. Инвестициялар күләме - 156,1 миллион һум. Был аҡсаға ауыл хужалығы етештереү кооперативында 210 гектарға һуғарыу системаһы төҙөлөп, файҙаланыуға тапшырылған, юғары етештереүсәнле техника (автоматик пилот системаһы булған трактор, тәрән йомшартҡыс, сәсеү комплексы), 198 баш голштин-фриз тоҡомло башмаҡ һатып алынған. Үткән аҙнала "Инвестиция сәғәте"ндә хужалыҡтың 1200 башҡа иҫәпләнгән роботлаштырылған комплекс төҙөү буйынса тағы бер проекты хупланды. Инвестиция проекты сиктәрендә Ергән ауылы янында роботлаштырылған һауыу системаһы булған каркаслы һыйыр аҙбарҙары, һөт һаҡлау һәм бүлеү өсөн блок, шулай уҡ ярҙамсы ҡоролмалар ҡуйыу планлаштырыла. Тәүлегенә 50 тонна һөт етештереүсәнлеккә эйә яңы комплекс 2024 йылда сафҡа индерелә һәм 42 эш урыны булдырырға мөмкинлек бирә. Уны төҙөү өсөн майҙансыҡ һайланған, кәрәкле ҡорамалдар исемлеге билдәләнгән һәм монтаж ойошмалары менән һөйләшеүҙәр башланған. Йәмғеһе 1,2 миллиард һум аҡса һалынған. "Инвестиция сәғәте"ндә проектҡа өҫтөнлөклө статусы бирелде. Дәүләт ярҙамы саралары сифатында инвесторға тоҡомло мал һәм ауыл хужалығы техникаһы һатып алыуға сығымдарҙың бер өлөшө ҡайтарыла. Хужалыҡ етәксеһе һүҙҙәренсә, проект эштәре бер айҙан башлана.

Радий Хәбиров аграрийҙарға мул уңыш һәм аяҙ көндәр теләп, быйыл республикала яҡынса 4 миллион тонна ашлыҡ йыйып алырға өмөтләнеүҙәрен әйтте.

# ИРАН ИЛСЕҺЕ КИЛДЕ



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Иран Ислам Республикаһының Рәсәй Федерацияһындағы Ғәҙәттән тыш хәлдәр һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Казем Джалали менән осрашты.**

Әңгәмәлә Ҡалмыҡстан Башлығы Бату Хасиков та ҡатнашты. Яҡтар хеҙмәттәшлекте киңәйтеү һәм берлектәге проекттарҙы ғәмәлгә ашырыу мәсьәләләрен, шул иҫәптән Ҡалмыҡстан ҡатнашлығында Каспий диңгеҙендә транспорт-логистик хаб булдырыуҙы тикшерҙе. "21 апрелдә Мәскәүҙә һеҙҙең һәм Ирандың фән һәм технологиялар буйынса вице-президенты Саттари әфәнде менән осраштыҡ, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Рәсәй төбәктәренең Иран менән фәнни-техник һәм сауҙа-иҡтисади хеҙмәттәшлек итеүгә ҡыҙыҡһыныуы ҙур. Киләһе көҙ бизнес-миссиябыҙҙы Тегеранға йүнәлтергә ниәтләйбеҙ. Рәсәй һәм Иран халҡы именлегенә дуҫлашыу, ике яҡлы мөнәсәбәттәрҙе үҫтереү өсөн иң яҡшы ваҡыт етте тип иҫәпләйем".

Иран Ислам Республикаһының Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Башҡортостан етәкселегенә осрашыуҙы ойоштторған өсөн рәхмәт белдерҙе. "Беҙ Рәсәй төбәктәренә йөрөйбөҙ, Ҡалмыҡстанға барып ҡайттыҡ, даими рәүештә Мәскәүҙә осрашыуҙар үткәрәбеҙ. Бында, Башҡортостанда, изге күңелле, алсаҡ һәм ҡунаҡсыл халыҡ йәшәй, - тине Казем Джалали. - Рәсәй һәм Иран араһындағы мөнәсәбәттәр тауар әйләнешен үҫтереүҙең яңы фазаһына инә. Беҙҙең делегация Башҡортостандың бер нисә агросәнәғәт һәм ағас эшкәртеү предприятиеларына барырға йыйына. Һеҙҙең республика менән сауҙа мөнәсәбәттәренең ҡеүәте бөтмәгән, ә беҙҙең осрашыу ике яҡлы бәйләнештәрҙе уңышлы үҫтереү өсөн стимул булып торор тип ышанам".

# СОЦИАЛЬ ЙҮНӘЛЕШТӘ...



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәм Рәсәйҙең финанс министры урынбаҫары Алексей Лавров Рәсәй Финанс министрлығы семинар-кәңәшмәһенең пленар сессияһында ҡатнашты. Уның темаһы - социаль өлкәлә дәүләт заказын үтәү буйынса пилот проекттары менән идара итеү. Семинарға илдең финанс системаһы һәм социаль өлкәһенең 250-нән ашыу эксперты - федераль министрлыҡтар һәм ведомстволар, төбәк власы органдары вәкилдәре, шулай уҡ коммерцияға ҡарамаған ойошмалар һәм үҫеш институттары белгестәре йыйылды.**

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров эшҡыуарлыҡҡа бюджет финанслауы нигеҙендә хеҙмәттәр күрһәтеү хоҡуғы өсөн дәүләт учреждениелары менән уңышлы конкурентлыҡ итергә мөмкинлек биргән социаль заказ механизмдарын индереүҙең көнүҙәклеген билдәләне. "Дәүләт, һис шикһеҙ, мөһим социаль мәсьәләләрҙе хәл итә. Әммә дәүләт учреждениелары хеҙмәткәрҙәренең эше тығыҙ булыуы сәбәпле, халыҡ социаль хеҙмәттәргә ҡытлыҡ кисерә. Шуға, социаль заказ - граждандыҡ йәмғиәте институттарын һәм бизнесты дәүләттең мөһим бурыстарын үтәүгә йәлеп итеү идеяһы барлыҡҡа килде, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Башҡортостан өс йүнәлеш буйынса социаль заказ индереүҙең пилот проектына әүҙем ҡушылды. Өйҙә социаль хеҙмәтләндереү, спорттың айырым төрҙәре буйынса башланғыс спорт әҙерлеге, мәктәп йәшендәге балалар сәйәхәт итә алһын өсөн шарттар булдырыу".

Семинарҙа ҡатнашыусылар власть органдары эшен һанлаштырыу, социаль хеҙмәттәрҙең сифатын күтәреү, шулай уҡ дәүләт заказы механизмдарын файҙаланыу йүнәлештәрен үҫтереү мәсьәләләрен тикшерҙе. Пленар сессиянан һуң үткән осрашыуҙа Радий Хәбиров һәм Алексей Лавров республикала социаль әһәмиәтле проекттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн федераль финанслауҙы йәлеп итеүҙе, бюджет аҡсаһын файҙаланыуҙың һөҙөмтәлелеген арттырыуҙы тикшерҙе.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев Рәсәй төбәктәре баш ҡалалары мэрҙары милли рейтингының беренсе төркөмөнә инде. 2022 йылдың июнь-июль айҙары йомғаҡтары буйынса ул 88-се урында. "Рейтинг" мәғлүмәт коммуникациялары үҙәгенең Рәсәй Федерацияһы хөкүмәте ҡарамағындағы Финанс университеты менән берлектә үткәргән тикшереүендә Мәскәү һәм Ленинград өлкәләренән тыш, ил субъекттарының барлыҡ баш ҡалалары етәкселәре бар.

✓Өфөлә биатлон буйынса Башҡортостан Республикаһы чемпионаты үтте. Ярыштарҙа Өфөнән, Октябрьскийҙан, Стәрлетамаҡтан, Ишембайҙан, Белореттан 30-ҙан ашыу спортсы ҡатнашты. Чемпионат йомғаҡтары буйынса почет пьедесталында - Өфө спортсылары. Ир-егеттәр араһында Дмитрий Коротков иң яҡшы һөҙөмтә күрһәтте, икенсе урында - Родион Травников, өсөнсөлә - Данил Матерков. Ҡатын-ҡыҙҙар араһында "алтын" Карина Бахтинала. Вера Румянцева менән Анна Кунаева көмөш һәм бронза миҙалдар яуланы.

✓"Терра Башҡортостан" ат-спорт турнирының 30 июлдә булырға тейешле алтынсы этабы 14 августа күсерелде. Был турала республиканың Ауыл хужалығы министрлығы хәбәр итте. Ярыштарҙың финал көнө әлегә үҙгәрешһеҙ ҡала - ул 10 сентябрҙә үткәрелә. Ауыл хужалығы министрлығында билдәләүҙәренсә, яңы миҙгелдә башҡорт тоҡомло 200 ат , улар араһынан 68 сапҡыр сирекфиналға үткән.

✓Өфөлә "Менделеев" торлаҡ комплексының 70 алданған өлөшсөһө күптән көткән фатир асҡыстарын алды, тип хәбәр иттеләр баш ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтенән. Ошо проблемалы комплекс төҙөлөшө 10 йылдан ашыу элегерәк башланғайны. Күмәк көс менән Е, Ж һәм 5Л секциялары билдәләнгән ваҡыттан алдараҡ файҙаланыуға тапшырылды.

✓Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министрлығында дарыуҙарға хаҡтың үҙгәрмәүен, "Күпселек медицина ойошмалары алдан ҡул ҡуйылған йыллыҡ контракттар буйынса кәрәкле күләмдә медикаменттар һатып алған. Дарыуҙарға ҡытлыҡ юҡ", - тип билдәләнеләр. Башҡортостан Башлығы йәшәү өсөн мөһим медицина препараттары менән тәьмин итеүҙе контролдә тоторға ҡушты.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ *Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, текстарҙағы һәм алтаҡталарҙағы хаталар күплегенең сәбәбе реклама агентлыҡтарында башҡорт телен белеүселәр булмауына бәйле.*



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ТУРИСТИК ҮҘӘК БУЛАСАҠ!



**Ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмә ҡыуаныслы яңылыҡтан башланды: Ростуризмдың туристик үҙәктәр булдырыу буйынса проекттар конкурсында еңеүсе 31 ҡала араһында Өфө лә бар! Башҡортостандың баш ҡалаһы 215 миллион һумлыҡ субсидияға эйә булған.**

- Был беҙҙең барыбыҙ өсөн дә ҙур уныш, - тип билдәләне Ратмир Рәфил улы. - Республика һәм ҡала бюджетын ғына түгел, даими рәүештә федераль финанслауҙы ылыҡтырып торорға кәрәк. Беҙ был проектты финанслауҙы планлаштырғайныҡ инде, ә был аҡсаларҙы йыраҡ территорияларҙа урынлашҡан райондарға бүлеп бирергә мөмкин буласаҡ.

Туристик үҙәктәр булдырыу буйынса Бөтә Рәсәй проекттар конкурсы беренсе тапҡыр уҙғарыла һәм унда 85 ҡала ҡатнаша. Өфө берҙәм дизайн-код, туристик навигация булдырыуға һәм башҡа сараларға аҡса аласаҡ. Баш ҡаланың бизнес-шерифы Дамир Ғәлиуллин белдереүенсә, конкурста ҡатнашыуҙан алда туристик үҙәк сиктәрен, уның функцияларын һәм территорияны төҙөкләндереү буйынса халыҡ фекере йыйылған. Тәҡдимдәрҙе иҫәпкә алып, 97 гектар майҙанда үсеш нөктәләре билдәләнгән. Проектты тормошҡа ашырыу барышында туристар ағымын, уларҙың баш ҡалала булыу ваҡытын һәм аҡса сығымдарын арттырыу күҙаллана. Бының өсөн объекттар ылыҡтырып торорға һәм туристар өсөн уңайлы булырға тейеш. Саралар иһә өс төп блок буйынса тупланған: туристик навигация, йәрминкә зоналарын булдырыу, күҙәтеү майҙандарын йыһазлау, туристик-мәғлүмәт үҙәктәре, бәләкәй архитектура формалары, именлек һәм экология. Әйткәндәй, йәрминкә урындарында декоратив ситән менән уратып алынған кейеҙ тирмәләр урынлаштырыласаҡ. Уларҙың бишеһе Өфө амфитеатрында урын алһа, өсөһө круиз суднолары туҡтаған урында торасаҡ. Был проекттың дөйөм хаҡы 713 миллион һум. Биш йыл эсендә күҙалланған иҡтисади һөҙөмтәгә өлгәшенергә, йәғни яңы эшҡыуарлыҡ, яңы эш урындары булдырылыуға, ойошмаларҙың килеменә, төрлө кимәлдәге бюджеттарға һалым һәм фестиваль программалары һаны артырға тейеш.

Быйыл Өфөлә туристарҙы иң ылыҡтырған урын Салауат Юлаев һәйкәле булһа, быйыл көҙгөһөн асыласаҡ 112-се Башҡорт кавалерия (16-сы гвардия) дивизияһының легендар командиры Миңлеғәли Шайморатов һәйкәле лә туристарҙың мәккәһенә әүерелеренә өмөт ҙур. Әлеге ваҡытта бында төҙөлөш-монтаж эштәре әүҙем алып барыла. Барельеф моделдәре ҡойолоп бөткән, улар йыйыла. Шулай уҡ һәйкәлдең балсыҡ моделе эшләнгән. Колоннада композициялары бронзанан ҡойола. Һәйкәлдең тирә-яғы төҙөкләндерелә.

Кәңәшмәгә сығарылған төп темаларҙың береһе булып ҡала юлдарындағы авариялар һәм юл-транспорт ваҡиғаларын профилактикалау мәсьәләһе торҙо. Йыл башынан алып Өфөлә 834 ДТП теркәлгән, уларҙа 32 кеше үлгән, 1031-е төрлө кимәлдә йәрәхәт алған. Юл-транспорт ваҡиғаларының 34 процентында йәйәүлеләр тапалған, 16 кеше һәләк булған, 276-һы төрлө йәрәхәт алған. 221 процент осраҡта йәйәүлеләрҙең юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуы, аныҡлап әйткәндә, рөхсәт ителмәгән ерҙә юлды аша сығыуы һәләкәткә сәбәпсе булған. Ете айҙа юл-транспорт ваҡиғаһында 105 балиғ булмаған граждан зыян күргән, 1 бала һәләк булған. Балалар ҡатнашлығындағы һәләкәттәрҙең 76 процентын күберәк өлөшөндә ололар ғәйепле.

Ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев баш ҡалала йәйәүлеләр өсөн имен мөхит ойоштороу кимәле насар, тип белдерҙе һәм быны һәләкәткә тиңләне. Яңы уҡыу йылы башланыуға барлыҡ мәктәптәр һәм балалар баҡсалары эргәһенә ҡоймалар ҡуйылып, балалар айырымланған тротуарҙан йөрөргә тейешлеген белдерҙе.

Тағы ла иғтибарға лайыҡ тема: ул да булһа йыллыҡ селтәрҙәрендә алып барылған ремонт. Оператив кәңәшмәлә асыҡланыуынса, ремонт эштәре август һуңына тиклем тамамланырға тейеш. Йәй әле генә башланған һымаҡ ине, инде яңы йылытыу миҙгеле лә яҡынлаша...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# АЛТАҠТАЛАР НИҢӘ ХАТАЛЫ?




**Ошо көндәрҙә "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законды бойомға ашырыу буйынса баш ҡала комиссияһының сираттағы ултырышы видеоконференция рәүешендә уҙғарылды. Өфө хакимиәте башлығы урынбаҫары Гөлләриә Ялсыҡаева етәкселегендә үткән эшлекле һөйләшеү барышында эштәргә йомғаҡ яһалды.**

Йыл башынан алтаҡталар биҙәлеше проекттары буйынса комиссияға 1,2 меңдән ашыу ғариза килгән, 1144 эскизға ризалыҡ бирелгән. Предприятие, учреждение һәм ойошмаларҙан 1,5 меңгә яҡын мөрәжәғәт ҡаралған, шуларҙың 300-ҙән ашыуы кире ҡайтарылған. Бынан тыш, алтаҡталар һәм юл күрһәткестәрендәге хаталар тураһында киң мәғлүмәт саралары һәм ҡала халҡынан килгән хәбәрҙәр буйынса ла эш алып барылыуы билдәләнде.

Комиссияның сираттағы ултырышына әҙерлек барышында сауҙа һәм хеҙмәттәр күрһәтеү нөктәләре, физик культура һәм спорт учреждениеларының визуаль мәғлүмәттәре йөрөп тикшерелгән. Белгестәр шунда уҡ методик ярҙам күрһәтеп, аңлатыу эштәре алып барған. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, текстарҙағы һәм алтаҡталарҙағы хаталар күплегенең сәбәбе реклама агентлыҡтарында башҡорт телен белеүселәр булмауына бәйле. Алтаҡталарҙа республиканың дәүләт телдәрендәге яҙыуҙар урындары менән алмашҡан осраҡтар ҙа йыш күҙәтелә. Шулай уҡ биҙәлеш талаптарын боҙған, башҡортса яҙыуҙарҙа оҡшаш хәрефтәрҙе бутап ҡулланыу кеүек етешһеҙлектәр күп.

Комиссия тарафынан баш ҡала урамдарындағы 700 тирәһе объект тикшерелгән. Урамдарҙың дөйөм күренеше, урам атамалары яҙылған күрһәткестәр һәм йәмәғәт транспорты туҡталҡалары биҙәлеше лә баһаланған. Шулай уҡ урынлаштырылған мәғлүмәттәрҙең дизайн проекттары килешелгәнлеге тураһында таныҡлыҡтары булыу-булмауы ла тикшерелгән.

Барлыҡ табылған хаталар тураһындағы мәғлүмәттәр ҡала районларының комиссия һәм терминология төркөмдәренә артабан эште дауам итеү өсөн таратылаҡ. Баш ҡала райондары етәкселегенә "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законды ғәмәлгә ашырыуҙы даими контролдә тоторға ҡушылды.

*ҮӘТ ӘЙ!*

# ЕНӘЙӘТСЕЛЕК КӘМЕЙ, ТЕЙМЕ...

**Уҙған аҙнала ҡала хакимиәтендә енәйәтселек менән көрәш һәм хоҡуҡ боҙоуҙарҙы профилактикалау буйынса ведомство-ара комиссия ултырышы үтте. Уның эшендә һоҡуҡ һаҡлау органдары, ҡала Йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәге, муниципалитеттың структура бүлексәләре вәкилдәре ҡатнашты.**

Ултырышта йылдың тәүге яртыһына йомғаҡ яһалды, йәйге осорҙа балиғ булмағандар араһында хоҡуҡ боҙоуҙарҙы профилактикалау һәм уларҙы эшкә урынлаштырыу, шулай уҡ асарбаҡтарҙы социаль адаптациялау мәсьәләләре ҡаралды.

Алты айҙа баш ҡалала йәмәғәт урындарында ҡылынған енәйәттәрҙең, шул иҫәптән ауыр һәм бик ауыр енәйәттәрҙең, урлашыуҙың, талауҙарҙың, мутлашыуҙың, наркоенәйәттәрҙең 3,3 процентҡа кәмеүе, уларҙы асыҡлау осраҡтарының артыуы күҙәтелә. Йәмәғәт тәртибен һаҡлаған рәсми ойошмалар менән бер рәттән, "Хоҡуҡ һағы" халыҡ дружинаһы вәкилдәре лә ҡалала тәртип һәм именлек тәьмин итә. Бөгөн Өфөлә 2372 дружинник бар, улар ҡатнашлығында 200 административ хоҡуҡ боҙоу асыҡланған. Ҡалала 2300 видеокамера аша тәртип торошон күҙәтеп торған "Хәүефһеҙ ҡала" аппарат-программа комплексы эшләй. Уның ярҙамында ярты йылда 12 енәйәт асыҡланған, 44 енәйәт фашланған.

Асарбаҡтарға ярҙам итеү үҙәгендә 306 кеше хеҙмәтләндерелгән, уларға документтарын тергеҙеүҙә, халыҡты социаль хеҙмәтләндереү стационар учреждениеһына ҡуйыуҙа, пенсия тәғәйенләүҙә, медицина-социаль экспертиза үтеүҙә, инвалидлыҡ алыуҙа һ.б. ярҙам күрһәтелгән.

"Үҙәк" коммерцияға ҡарамаған социаль ярҙам ойошмаһы иректән мәхрүм ителеү урындарынан сығыусыларға һәм йортһоҙҙарға ярҙам күрһәткән - 21 мең аш-һыу комплекты, 7 мең кейем-һалым таратылған, 41 кеше эшкә урынлаштырылған.

Хоҡуҡ боҙоуҙарҙы профилактикалауҙың һөҙөмтәле сараларының береһе булып йәйге каникулдар ваҡытында уҡыусыларҙың ялын ойоштороу тора. Өфөлә йәйгеһен 272 ял учреждениеһы эшләй. Көндөҙгө ял үҙәктәрендә 14 мең уҡыусы, шул иҫәптән - 2 мең ауыр тормош шарттарында ҡалған, 82 - социаль хәүеф төркөмөндә булып, иҫәптә торған бала ял итә. Шулай уҡ хеҙмәт һәм ял лагерҙарында был категорияға ҡараусылар 720 (60). Йәйгеһен эшләргә теләүсе 4543 бала эшкә урынлаштырылған, шул иҫәптән 850 бала - ауыр тормош шарттарында ҡалған ғаиләләрҙән, социаль хәүеф төркөмөндә иҫәптә торған 320 үҫмер.

Комиссия ултырышы йомғаҡтары буйынса, иҫкәрмәләр һәм тәҡдимдәрҙе иҫәпкә алып, мотлаҡ башҡарылырға тейешле саралар билдәләнгән протокол раҫланды.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Сиҡан

❖ Сиҡан, эренле яраларҙан халыҡ дауаһында юшан (вероника лекарственная) үләненең үҫемлек майындағы төнәтмәһен ҡулланырға тәҡдим ителә. Уны әҙерләү өсөн 50 грамм яңы йыйылған үләнгә 50 мл көнбағыш майы ҡойорға һәм йылы урында 2 аҙна төнәтергә. Ваҡыты-ваҡыты менән һелкетеп, болғатып торорға. Шунан һөҙөп алырға. Төнәтмәне эренләгән яраға һөртергә.

### Үҙәк көйһә

❖ Был осраҡта гөлйемеш һәм шәкәр ярҙам итә. Бешкән гөлйемеште орлоғо менән бергә иҙеп, етәрлек шәкәр өҫтәп бутарға. Был ҡатышманы туҡланыу ваҡытына ҡарамай, көнөнә бер тапҡыр 1 ҡалаҡ ашарға. Үҙәк көйөүе 15 минуттан үтә. Ҡышҡыһын да был файҙалы ризыҡты ҡулланыу өсөн гөлйемеште һыуыҡтыҡсҡа туңдырырға һалырға, кәрәк саҡта иретеп дауаны эшләп ашарға була.

### Панкреатит

❖ Был ауырыуҙан цикорий тамырынан төнәтмә һөҙөмтәле дауалай. 2 балғалаҡ ваҡланған цикорий тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 5 минут ҡайнатырға. Һыуынғансы төнәтеп һөҙөргә. Көн дауамында уртлап эсеп бөтөргә. Дауаланыу оҙайлығы - 21 көн, шунан 1 аҙнаға туҡтап тороп, кире ҡабатларға.

### Ҡарағат

❖ Ҡара ҡарағат ботаҡтарынан эшләнгән дауа нервы системаһын нығыта. Бер ҡалаҡ ваҡланған ҡарағат ботағына 1 стакан һыу ҡойоп, талғын утта 1-2 минут ҡайнатырға, шунан 30-40 минут төнәтеп һөҙөргә. Төнәтмәне ашарҙан алда көнөнә 3-4 тапҡыр йылы көйөнсә яртышар стакан эсергә.

### Крыжовник

❖ Яңы крыжовник емеше һәм шунан әҙерләнгән һуттан торған шифалы диета боҙолған алмашыныу процестарын яйға һалырға һәм быға бәйле 6-8 килограмм ауырлыҡты ташларға ярҙам итә. Әммә емеште диабет, ашҡаҙан, бөйөр яҙваһы булғанда ҡулланырға ярамай.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Арыҫланғәли Солтанов Ясная Полянаға Л.Н. Толстойҙың хәлен белергә барғанда уға ҡымыҙ ижауын бүләк итә. Бер быуат үтеүгә ҡарамаҫтан, был бүләк яҙыусының йорт-музейында бөгөнгәсә һаҡланып ҡалған.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Башҡорт далаларына килеп, Һамар губернаһының Быҙаулыҡ өйәҙендә Таналыҡ йылғаһы буйында оҙаҡ ҡына йәшәгән яҙыусы Л.Н. Толстойҙың ғаиләһе лә ҡымыҙ менән һыйлау йолаһынан бик тәьҫоратлана. Уның ҡыҙы Т.Л. Толстая 70-се йылдарҙа (XIX) бер килгәндәрендә Мөхәмәтшах исемле оло ғына башҡортҡа көн һайын ҡымыҙ эсергә йөрөүҙәре, хужа күн һауыттағы ҡымыҙҙы болғатып, "карел ҡайынынан яһалған ижау менән шундай уҡ йәйпәк туҫтаҡҡа ҡоя һәм баш эйеп ҡунағына һона" тип иҫләй. Һуңыраҡ, 90-сы йылдарҙа, башҡорт мәғрифәтсе ғалимы Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың дуҫы, Өфө кешеһе Арыҫланғәли Солтанов Ясная Полянаға Л.Н. Толстойҙың хәлен белергә барғанда уға ҡымыҙ ижауын бүләк итә. Бер быуат үтеүгә ҡарамаҫтан, был бүләк яҙыусының йорт-музейында бөгөнгәсә һаҡланып ҡалған.

Башҡорт ижауҙары бик зауыҡлы сәнғәт һөнәренең бер сағылышы. Уларҙы яһау - ағасты декоратив эшкәртеүҙә айырым тармаҡ.

Ижауҙы ҡайындан, һирәк осраҡта сағандан һырлағандар. Ағас олононоң тамырға күскән аҫҡы өлөшө ҡулланылған. Әммә иң матур изделиелар оронан - русса "капо-корень" - килеп сыҡҡан. Бик тығыҙ үҙенсәлекле фактуралы материал нәфис скульптуралы һырларға ярҙам иткән; ул ныҡлы, еңел һәм тәбиғи биҙәктәре өсөн юғары баһаланған.

Семәрле ижауҙар ҡайын күп үҫкән төбәктәрҙә киң етештерелгән. Был территорияға Урал буйы, Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш таулы райондары һәм Урал аръяғы (Баймаҡ һәм Әбйәлил районларының көнбайыш таулы өлөшө, шулай уҡ Силәбе һәм Ҡурған өлкәләренең башҡорттар йәшәгән яғы) ингән. Ҡайһы берҙә көньяҡ-көнбайыштағы - Дим йылғаһы буйындағы ағас оҫталары ла ижау эшенә тотонған. Халыҡ ижадының был төрө, ҡатмарлы булыуына ҡарамаҫтан, биҙәкле тәпәндәр эшләнгән территорияны ялмап алған. Урыны-урыны менән (Еҙемдә, Урал тауҙарында Ағиҙел йылғаһы бөгөлдәрендә, Йылайыр яҫы таулығында) сәнғәт производствоһының ике төрө лә бергә йәшәгән. Әммә шул осраҡта ла йүкәнән һырлы тәпәндәрҙе һәм ҡайын ижауҙарҙы бер үк кешеләр һирәк эшләгән. Ижау эшәләүсе оҫталар иң бәләкәй ҙурлыҡтағы йоморо йышҡы йәки ураҡҡа оҡшаш йышҡылар, төрлө бысаҡ ҡулланған һәм уларҙың өңгөстәр йыйылмалары булған. Ағасты еүеш сағында соҡоғандар. Ул тиҙ генә кипкән һәм эш барышында ваҡыты-ваҡыты менән әҙерләмәне ҡайнар һыуға тығып алғандар. Әҙер әйберҙе ерек ҡабығының ҡуйы төнәтмәһендә төҫ ингәнсе тотҡандар һәм ярылмаһын өсөн май һеңдергәндәр. Сувенирға тәғәйенләнгән ижауҙарҙы лаклағандар.



*"Өйрәк" ижау. Т.К. Сурина фотоһы*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

**Һуңғы йылдарҙа Өфөлә электр самокаттары күбәйҙе. 2020 йылдың йәйендә улар һирәгерәк осраһа, 2021 йылда ҡаланың бөтә районында тиерлек уны һәр теләгән кеше, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, балалар ҙа алыу мөмкинлегенә эйә ине. Былтыр улар ҡатнашлығында авария күп булды. Сөнки самокатта йөрөү өсөн юлда ла, тротуарҙа ла урын ҡаралмаған. Тиҙлеккә бәйле тыйыуҙар һәм сикләүҙәр тураһында мәсьәләне йәмәғәтселек, депутаттар, ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре әле булһа күтәрә, әммә һаман хәл ителмәгән. Шуныһы ҡыуаныслы - быйыл электр самокатына бәйле фажиғәләр аҙыраҡ.**
**Әйткәндәй, Өфөлә бер нисә кикшеринг сервисы бар. Бер йылда уларҙың бер нисәһе ябылды, ҡайһы берҙәре эшен дауам итә, мәҫәлән, Whoosh. "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы был компаниянан бер йылда электр самокаттары менән булған хәл-торошто, уны хәүефһеҙ ҡулланыу алымдарын, ҡуртымға биреүҙең өҫтөнлөгөн һәм етешһеҙлеген асыҡланы.**

# ЭЛЕКТР САМОКАТТАРЫ.

## Күңел асыумы, әллә хәрәкәт итеү сараһымы?



**Ҡала юлдары һәм тротуарҙар электр самокаттарының хәүефһеҙ хәрәкәт итеүен тәьмин итәме?**

- Рәсәйҙең башҡа ҡалаларындағы кеүек үк, Өфөлә лә велоинфраструктураны өҫтәмә рәүештә үҫтереү кәрәк. Был самокаттарҙы хәүефһеҙ файҙаланырға ла булышлыҡ итәсәк. Шуны ла билдәләп үтеү мөһим: башҡа ҡалаларҙан айырмалы, Өфөләге велосипед юлдары ял урындарында ғына түгел. Былтыр Өфө халҡы 3,5 миллион километр юл үткән, уның 88 проценты транспорт сараһы булараҡ ҡулланылған. Транспорт булараҡ ҡулланыу тип "А" нөктәһенән "В" нөктәһенә тиклем үткән һәм уның оҙонлоғо 3-5 километрҙан артмаған осраҡта әйтәләр. Йәғни гражданин электросамокатты эшкә, уҡырға барыу йәки ниндәй ҙә булһа йомошто үтәү өсөн ҡуртымға ала.

**Өфөлә ниндәй урамдарҙа самокатта йөрөүселәр күп?**

- Беҙҙең самокаттарҙа Совет районында күберәк йөрөйҙәр.

**Миллионлы башҡа ҡалалар менән сағыштырғанда Өфөлә ҡуртымға бирелгән самокаттар һаны етәме?**

- Был миҙгелдә беҙҙең самокаттар флоты Өфөлә яҡынса 1500 берәмек. Һамарҙа, Төмәндә - 2000-шәр, Екатеринбургта - 5000.

**2021, 2020 йылдар менән сағыштырғанда электр самокаттары ҡатнашлығындағы юл транспорты ваҡиғалары статистикаһы ниндәй?**

- Быға тиклемге кеүек үк, бындай ваҡиғалар самокатта йөрөүҙең дөйөм һанына яҡынса 0,01 процент тура килә. Велоинфраструктураны өҫтәмә рәүештә үҫтереү күңелһеҙ осраҡтар һанын кәметәсәк.

**Электр самокаттарының хәүефһеҙлеге өсөн нимә эшләнә: техник яҡтан хеҙмәтләндереләме, уларҙың төҙөклөгөн кем тикшерә?**

- Ҡалала тәүлек әйләнәһенә сервис командалары эшләй, улар парковкалағы тәртипте, электр самокаттарының техник торошон күҙәтә. Кәрәк булһа, уларҙы ремонтҡа сервис үҙәгенә алып баралар. Миҙгел башланыр алдынан бөтә самокат комплекслы техник хеҙмәтләндереү үтте: йөрөтөү элементтары яңыртылды, яңы шиналар, грипсылар ҡуйылды, буялды, йәбештерелде.

Ҡалала яй йөрөү зонаһы системаһы эшләүен дауам итә. Сервистың бөтә самокаттары тиҙлеге сәғәтенә 25 километрға тиклем сикләнгән. Мәжит Ғафури исемендәге, "Ҡашҡаҙан", Иван Якутов исемендәге парктар кеүек йәйәүлеләр күп йөрөгән урындарҙа сәғәтенә 15 километрҙан да арттырып булмай. Николай Гастелло исемендәге паркта Whoosh самокаттарында йөрөү тыйылған.

**Балиғ булмағандар самокат ала аламы?**

- Ҡуртымға балиғ йәштәгеләр генә ала ала. Был ҡағиҙәләрҙең үтәлешен мөмкин булған бөтә ысулдар менән күҙәтәбеҙ: сервис командалар ҡалалағы тәртип боҙоуҙарҙы теркәй, ярҙам хеҙмәте социаль селтәрҙәрҙәге публикацияларҙы, башҡа файҙаланыусыларҙың мөрәжәғәтен тикшерә.

Тәжрибәнән күренеүенсә, күп осраҡта ата-әсәләр балиғ булмаған балалары өсөн үҙҙәре ҡуртымға ала. Был ҡағиҙәләрҙе боҙоу икәнлеген тағы бер тапҡыр иҫегеҙгә төшөрәбеҙ. Уның өсөн штраф һәм аккаунтты блокка ҡуйыу ҡаралған.

**Электр самокаттары менән идара итеүгә арналған иҫкәртеү саралары ҡалала үткәреләме?**

- ЮХХДИ бүлеге менән берлектә йөрөтөргә өйрәтеү мәктәбе астыҡ. 17-нән 19 июнгә тиклем "Торатау" Конгресс-холы алдындағы майҙансыҡта теләгән һәр кеше бушлай йөрөргә өйрәнә алды. Ҡағиҙәләр менән сервис белгестәре таныштырҙы. Курс үтеүселәр белемен тест ярҙамында нығытты. Тест тапшырыусылар ташламаға промокод алды.

***Теманы дауам итеп, Өфөнөң дәүләт автоинспекцияһы хәүеф һәм юл хәрәкәте ҡағиҙәләре хаҡында шулай ти:*** Рәсәй Эске эштәр министрлығының ЮХХДИ идаралығы Өфө буйынса бүлексәһе начальнигы Альбина Кадикова "Башинформ" агентлығына хәбәр итеүенсә, электр самокаты ҡатнашлығында быйыл 5 авария булған. "Балаларҙың идара итеүе бик хәүефле. Ошондай ваҡиға Нуғай ҡасабаһында апрель уртаһында булды. 11 йәшлек малай самокат менән идара итә алмай, Mazda CX-7 автомобиленә бәрелде һәм төрлө йәрәхәт алды. Балалар юл торошон объектив баһалай белмәй, шуға күрә ҙур тиҙлек йыйған бындай төр транспорт сараһы менән йөрөү бәхетһеҙлеккә килтерергә мөмкин", - ти Альбина Кадикова.

Юл транспорты ваҡиғаларын иҫкәртеү өсөн йәйге каникул алдынан баш ҡаланың дәүләт инспекцияһы пропаганда буйынса бүлексәһе хеҙмәткәрҙәре мәктәптәрҙә "Хәүефһеҙлек дәрестәре" үткәрҙе. ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре педагогтар һәм йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәге белгестәре менән берлектә "ике тәгәрмәсле" транспорт менән йөрөргә яратыусылар һәм уларҙың ата-әсәләренә электросамокат менән идара иткәндә юридик яуаплылыҡ һәм иҫкәртеү саралары тураһында аңлатыу эше үткәрҙе. Шулай ҙа самокат менән файҙаланыусыларҙың күбеһе, әлбиттә, ябай ғына юл хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен дә онотҡан ололар. Машина йөрөгән юлға сығып, улар йәрәхәт ала. Мәҫәлән, 25 апрелдә 18 йәшлек егет йәйәүлеләр үтә торған урындан электросамокатта үтеп барған һәм аварияға осраған.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Электр самокатын юғары хәүеф сығанағы тип таныуҙары, уларға номер ҡуйыуҙары, йәш буйынса сикләү һәм уның менән идара итеүгә хоҡуҡтың махсус категорияһын индереүҙәре ихтимал. Был тәҡдимдәр Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Кеше хоҡуҡтары буйынса советта эшкәртелә, тиҙҙән уларҙы Хөкүмәткә ебәрәсәктәр. Был хаҡта күптән түгел Совет ағзаһы Кирилл Кабанов "Известия"ға хәбәр итте. Дәүләт Думаһында башланғысты закон кимәлендә хупларға әҙерҙәр. "Контроль һәм юл билдәләре системаһы юҡ, юл хәрәкәтендә ҡатнашыусының статусы билдәләнмәгән. Йәнәһе лә, тиҙлеге сикле, әммә бөтәһе лә елеүен дауам итә. Быны беҙ һуңғы ваҡиғаларҙан да күрәбеҙ, уларҙа балалар ҙа, өлкәндәр ҙә зыян күрә. Юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен үтәмәйҙәр, ЮХХДИ контролдә тота алмай, сөнки һәр тыҡрыҡҡа хеҙмәткәр ҡуйып булмай. Камеранан да боҙоусыларҙы күҙәтеп бөтөп булмай", - ти "Известия".**

**Ксения КАЛИНИНА.**

✓ *Тораларҙа Уралдағы иң тәүге балсыҡ һауыттарҙың ярсыҡтары табылған. Улар ярым йомортҡа формаһында, осло төплө булып, тыш яҡтан ҡатмарлы ғына орнамент менән биҙәлгән.*



ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Беренсе бүлек. Таш быуаты.



"Аҡбуҙат" эпосында Шүлгән батша кешеләргә зыян итеүсе барса яуыз көстәрҙе кәүҙәләндерә. Эпостың төп геройы Һәүбән күлдә һунар иткән саҡта алтын өйрәкте атып яралай, уныһы кеше тауышы менән һөйләшә башлай:

*"Егет, атҡан һунарың*
*Өйрәк түгел, белһәң һин,*
*Күлдә йөҙөп уйнаған,*
*Данлы Шүлгән батшаның*
*Йәндәй күргән ҡыҙы мин.*
*Ай егетем, егетем,*
*Мине күлдән алма һин,*
*Төйәгемдән айырып,*
*Күлгә ҡайғы һалма һин!*
*Ни һораһаң, бирәйем,*
*Изге теләк теләйем,*
*Өйөр-өйөр мал тиһәң,*
*Барын һиңә бирәйем"*, -

тигән һүҙҙәрҙе әйтеп, Һәүбәнгә ялбарған, ти.

Шүлгән батшаның ҡыҙы Һәүбәнгә күлдән киткән мәлдә артына әйләнеп ҡарамаҫҡа ҡуша:

*"Егет, мине ебәр ҙә*
*Бер ҡарамай алға кит!*
*Бөтә төҫтән өйәрләп*
*Йылҡы сығыр, шуны көт!*
*Һауымы еткән һыйырҙар*
*Мөзөлдәп сығыр быҙауһыҙ,*
*Алпанлап баҫыр ҡуйҙары*
*Мөңрәп сығыр ҡуҙыһыҙ;*
*Күл шаулатып, күл ярып,*
*Ерҙә дауыл ҡуптарып,*
*Аҡбуҙ сығыр - мал ҡото,*
*Бөтә малдан һуң ҡалып, -*
*Сабыр итеп шуны көт.*
*Маңлайынан һыйпаһаң,*
*Телгә килеп һөйләр ул,*
*Ни теләһәң, барын да*
*Һис ҡарыуһыҙ эшләр ул".*

Һәүбән өйрәк-ҡыҙҙың әйткәнен тыңлап, уны ирекка ебәрә лә, артына боролоп ҡарамайынса ғына, күлдән ситкә табан китә. Бер аҙ барыуға ул күп аттар кешнәүен, һыйырҙар мөңрәүен, һарыҡтар баҡырыуын ишетә. Кинәт көслө ел сыға, дауыл ҡуба. Һәүбәнгә алға атлау ауырлаша бара. Ул, ахыры, түҙә алмайынса, артҡа боролоп ҡарай. Ҡараһа, үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмай: бөтөн даланы мал көтөүҙәре ҡаплап алған, ә һыуҙан һаман аттар, һыйырҙар һәм һарыҡтар сығып килә икән.

Шулай итеп, хәҙерге башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады һәм боронғо сәнғәте аша мең йыллыҡтар бәйләнеше күҙаллана.

#### Урта таш быуаты (мезолит)

Был осорҙа Уралда климат үҙгәреп, элеккегә ҡарағанда байтаҡҡа йылына бирә. Төньяҡ һәм Урта Уралды, Европа һәм Азияның төньяҡ киңлектәрен шуға тиклем ҡаплап ятҡан боҙ ҡатламдары иреп бөтә, бында бик күп күлдәр, ҡуйы үләнле болондар һәм урмандар хасил була. Хайуандар донъяһы ла үҙгәреш кисерә: һалҡын климатҡа яраҡлашҡан мамонттар, ҡуйы йөнлө носорогтар боҙло төньяҡҡа табан китә, йәиһә үлеп бөтә. Улар урынын ҡуян, болан, мышы һәм башҡа йәнлектәр ала. Уларға инде элеккесә һунар итеп булмай, уҡ-һаҙаҡ кеүек һунар ҡоралдарына өҫтөнлөк бирелә. Кешеләр балыҡ тотор өсөн һөйәктән гарпун яһарға өйрәнә. Таш эшкәртеү техникаһы ла үҙгәрә. Ауыр ҡул киҫкестәре, элекке осло башлы таш ҡорамалдар урынына саҡматаштан йоҡа ғына итеп телеп алынып, бысаҡ кеүек еңел, трапеция, өс мөйөшлө, сегмент формаһындағы пластиналар ҡулланыла башлай. Уларҙың үткер ҡырҙары бысаҡ рәүешендә файҙаланыла. Бындай ҡоралдар элегерәк, б.э. тиклем 40-12 мең йыл элегерәк тә ҡулланылған, әммә улар таштан яһалған төп эш ҡоралына әүерелә. Ошондай ҡомартҡылары булған торалар Көньяҡ Уралдың бөтөн территорияһында табылды, был бында йәшәгән халыҡ һанының күпкә артыуы менән бәйле. Улар иҫәбендә бик яҡшы өйрәнелгән Романовка һәм Илмырҙа (Өфө янында), Сөн (Баҡалы районында), Йәнгел, Яҡтыкүл, Морат (Әбйәлил районында) һәм башҡа боронғо кеше торлаҡтарын атап китергә була.

Был торалар өсөн ҡәләм формаһындағы оҙон ҡырлы нуклеустар - саҡматаш ҡалдыҡтары айырыуса характерлы булып тора, уларҙан бысаҡ формаһындағы йоҡа пластиналар китеп алынған.

Ошо тораларҙың саҡматаш ҡорамалдары шул тиклем бай һәм күп төрлө, был археологтарға Ағиҙел йылғаһы бассейнындағы һәм Урал аръяғы райондарындағы мезолит ҡомартҡыларының ике ҙур үҙаллы төркөмө булыуы хаҡында һығымта эшләргә дәлил булып тора (Урал аръяғында - Йәнгел һәм Илмырҙа археологик мәҙәниәттәре).

Һөйәк ҡалдыҡтарын, тупраҡ-геология шарттарын заманса радиоуглерод һәм башҡа лабораторияларҙа тикшереү нигеҙендә ошо мәҙәниәттәрҙең йәшәү ваҡыты билдәләнә. Был б.э. тиклем X-VI мең йыллыҡтарға тура килә. Тарих фәнендә Көньяҡ Уралда һәм уға йәнәш булған райондарҙа (Көньяҡ Себер, Волга буйы, Ҡаҙағстан) көн иткән ҡәбиләләрҙең тарихын һәм мәҙәниәтен өйрәнеү хәҙерге фин-уғыр халыҡтарының боронғо ата-бабаларының килеп сығышы һәм донъя буйлап таралыуы проблемаһы менән бәйле. Улар иҫәбендә венгрҙар, эстондар, финдар (карелдар), мариҙар, мордвалар, удмурттар, комиҙар, манси һәм ханттар бар, хәҙер улар бер-береһенән меңәр саҡрым алыҫлыҡта йәшәй. Ошо халыҡтарҙың телдәре оҡшаш булыуы уларҙың яҡын ҡәүемдәр икәнлеген аңлата, уларҙың боронғо ата-бабалары фин-уғыр телендә аралашып, бер территорияла йәшәгән.

Геологик һәм археологик тикшеренеүҙәр Балтик диңгеҙе буйында көн итеүсе эстон һәм финдарҙың был ерҙәрҙә мезолит осоронан да иртәрәк йәшәмәүен аныҡ билдәләне. Артабанғы осорҙарҙың бай археологик материалдары (неолит, бронза быуаты) күп һанлы ҡәүемдәрҙең бер территориянан икенсеһенә күсеп китеүе хаҡында аныҡ мәғлүмәт бирә, әммә был боронғо фин-уғыр халыҡтарына ҡағылмай.

Логик фекерләү ғалимдарға боронғо этник фин-уғыр телле ҡәүемдәр берлегенең тәүҙә Көньяҡ Уралда һәм уға йәнәш райондарҙа формалашыуы, һәм бынан күсеп киткән кешеләрҙең Көнсығыш Европаның төньяғындағы, шул иҫәптән Көнсығыш Балтик буйының һәм Скандинавияның буш ятҡан ерҙәрҙе үҙләштереүе хаҡында һығымта яһау мөмкинлеген бирә. Артабанғы мең йыллыҡтарҙа айырым йәшәгән халыҡ төркөмдәренең телдәрендә айырмалыҡтар хасил була, шулай итеп фин, эстон һәм уларға ҡәрҙәш булған башҡа халыҡтарҙың телдәре формалаша.

#### Неолит осоро

Урал-Волга буйында һәм Көньяҡ Себерҙә неолит осоро б.э. тиклем VI-V быуаттарға тура килә, тип иҫәпләнә. Ошо дәүер датаһы яңыраҡ Төньяҡ Каспий һәм Урта Волга территорияһындағы 30 торала табылған материалдарҙы радиоуглерод анализы ысулы менән тикшергәндә бик яҡшы раҫланды.

Б.э. тиклем VIII-VI мең йыллыҡтарҙа Азияның көньяҡ райондары халыҡтары (бигерәк тә Алғы һәм Урта Азияла) тарихындағы етди үҙгәрештәр ошо ваҡыттағы йәшәйеш шарттарының ҡырҡа алышыныуына килтерә. Бындай үҙгәрештәр, ер эшкәртеүгә һәм малсылыҡҡа күсеү айҡанлы, кешеләрҙең байтаҡ ҙур коллективтарын оҙайлы ваҡытҡа аҙыҡ-түлек запастары менән тәьмин итеү мөмкинлеген булдыра. Ошо төбәктәрҙә ер эшкәртеү һәм малсылыҡ менән шөғөлләнеү керамика ҡуллана башлау (балсыҡ һауыт-һаба), төҙөлөш материалы сифатында кирбес яһау, йөн тетеү һәм туҡыма етештереү, баҡыр металлургияһы башланғыстары менән тап килә. Тормош шарттары яҡшырыуының туранан-тура һөҙөмтәһе булараҡ, халыҡ һанының тиҙ үҫә барыуы күҙәтелә.

Әммә Себерҙә һәм Көнсығыш Европала йәшәүсе ҡәүемдәр тормошона әле һаналып киткән яңылыҡтар бары тик б.э. тиклем VI-V быуаттарҙа ғына үтеп инә. Көньяҡ Уралда ер эшкәртеүҙең һәм малсылыҡтың таралыуы йылға һәм күл буйҙарында дүрт мөйөшлө өйҙәрҙең - усаҡтары иҙәндә булған яртылаш ер өйлө ултыраҡ тораҡтарҙың күпләп барлыҡҡа килеүе менән бәйле. Ҡомартҡы табылдыҡтарынан (мәҫәлән, Муллалыла, Дәүләкән районы) күп кенә хайуан һөйәктәрен, шул иҫәптән ат, һыйыр һәм ваҡ мөгөҙлө йорт хайуандарыныҡын атап үтергә була. Көньяҡ Уралда ҡырағай кәзә һәм һарыҡтарҙың бер ҡасан да булмауын фән ышаныслы рәүештә раҫланы, шуға күрә был ер эшкәртеү һәм малсылыҡ менән шөғөлләнеүҙең бында көньяҡ тарафтарынан килгән кешеләр аша үтеп инеүенә дәлил була ала. Тораларҙа ҡырағай йәнлек (мышы, төньяҡ боланы, айыу һ.б.), шулай уҡ балыҡ һөйәктәре табылған. Тимәк, был дәүерҙә традицион хужалыҡ итеү (һунар итеү, балыҡсылыҡ) формалары ла үҙ әһәмиәтен юғалтмаған.

Тораларҙа Уралдағы иң тәүге балсыҡ һауыттарҙың ярсыҡтары табылған. Улар ярым йомортҡа формаһында, осло төплө булып, тыш яҡтан ҡатмарлы ғына орнамент менән биҙәлгән. Балсыҡ һауыт яһай башлау неолит дәүере кешеһененең бик әһәмиәтле ҡаҙаныштарының береһе була. Балсыҡтан яһалған һауыт утта бешерелгән аҙыҡҡа күсеү мөмкинлеген бирә, ә был, үҙ сиратында, кешенең һаулығын, уның нервы системаһын нығытыу өсөн файҙалы була.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Шайморатовсылар - Чернигов-Припять операцияһында

Танк полкына "1 Май" совхозы, Ивашковка ауылы йүнәлешендә һөжүм башларға бойорола. Танкыларҙа - бер рота автоматчиктар десанты, улар артынан 60-сы һәм 62-се атлы полк яугирҙары ҡуҙғала. Дошмандың маскировкалап ҡуйылған үҙйөрөшлө "фердинанд" һәм башҡа орудиелары көслө ут аса. Алышта полк командиры Джиоев ҡаты яралана, әммә атака туҡталып ҡалмай. Полк "1 Май" совхозынан һәм Дубрава утарынан дошманды ҡыҫырыҡлап сығара. Уның 5 "фердинанд" һәм 4 ҡәҙимге орудиеһы сафтан сығарыла, 50-нән ашыу һалдаты үлтерелә һәм яралана, 26-һы әсиргә алына. Әммә немецтар ҡаршылыҡ күрһәтеүен дауам итә, уларҙың пехота полкы һәм танкылары контратакаға күтәрелә. Беҙҙең артиллеристар дошманды көслө утҡа тота. Ут взводы командиры, гв. сержанты А.И. Иванов дошмандың 5 пулемет расчетын юҡ итә, ә элегерәк тә мәргәнлеге менән дан ҡаҙанған артиллерист, гв. өлкән сержанты Ғәбит Әхмәров үҙенең орудиеһынан үҙйөрөшлө "фердинанд"ты һәм ике немец танкыһын ҡыйрата. Дошман атакалары кире ҡағыла. А.И. Иванов Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ булһа, Башҡортостандың Федоровка районы Иҫке Сытырман ауылында тыуып үҫкән батыр башҡорт егете Ғ.А. Әхмәровҡа ошо яуҙарҙа күрһәткән батырлығы өсөн Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.

16-сы гв. дивизияһы командование ҡуйған хәрби бурысты теүәл үтәй, башҡа частарға Снов йылғаһы аша сығыу урындары тәьмин ителә. Ивашковка һәм Выхвостово ауылдарына 58-се һәм 62-се полк атлылары һыбай килеш төнгө налет яһай, дошмандың пехота полкы штабы ҡыйратыла, 2 радиостанцияһы, 4 автомашинаһы, 5 мотоциклы, 27 аты ҡулға төшөрөлә.

Комдив Г.А. Белов үҙенең "Путь мужества и славы" исемле китабында Чернигов ҡалаһы һәм Чернигов өлкәһе өсөн барған алыштар һөҙөмтәһе хаҡында ошондай мәғлүмәт килтерә: дошмандың 1,8 мең һалдаты һәм офицеры юҡ ителә, 1360 һалдаты һәм 340 офицеры әсиргә алына, 24 танкыһы, 22 минометы, 37 бронемашинаһы, 2 самолеты юҡ ителә. 1,5 мең винтовка, 38 пулемет, 7 орудие, 6 келәт, 1300 снаряд, бик күп граната һәм патрондар трофейға алына.

16-сы гв. атлы дивизияһы яугирҙарының Чернигов ҡалаһы янындағы алыштарҙа күрһәткән батырлыҡтары совет командованиеһының юғары баһаһына лайыҡ була. Йөҙәрләгән боецҡа хөкүмәт наградалары тапшырыла. Быны генерал-майор М.М. Шайморатов дивизияһының һынмаҫ рухына тоғро ҡалған төрлө милләт вәкилдәренең башҡорт яугирлығын дауам итеүе, тип аңларға кәрәк.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

**✓ *Руль артындағы иҫерек - ул енәйәтсе. Әле икенсе тапҡыр эскән көйө руль артына ултырып эләгеүсене ике йылға тиклем төрмәгә ултыртыу ҡарала. Ул закон өс йыл самаһы элек сыҡты.***

# ЮЛДА ҮҘЕН ТОТА БЕЛГӘНДӘР...

## йәмғиәттә лә үҙен тоторға өйрәнә

**Беҙ уны һәр ваҡыт кешеләргә мөләйем мөнәсәбәтле, үҙ туған телендә йылмайып өндәшкән, баш ҡалабыҙҙа үҙ автомәктәбе булған, Башҡортостан телевидениеһында, "Юлдаш" радиоһында башҡорт телендәге тапшырыуҙарҙың алыштырғыһыҙ эксперты Хәлим Ғайса улы тип беләбеҙ. Шуныһы ғәжәп: уның балалары ла аталарына эйәреп шул уҡ автомәктәп аша үтеп, оло тормош юлына сыҡҡан, шәхескә әүерелгән. Ҡунағыбыҙ - Өфөләге бер нисә автомәктәп директоры Хәлим Ғайса улы ӘЙҮПОВ.**

**Хәлим Ғайса улы, бала сағығыҙ тураһында һөйләп үтегеҙ әле: атай йортондағы иң бәхетле мәлдәрегеҙҙе иҫкә төшөрөгөҙ.**

- Мин Архангель районының Оҙонлар ауылында тыуып үҫтем. Тыуған ауылым тауҙар, урмандар уратыуында, тәбиғәттең хоҙур төбәгендә урынлашҡан. Атайым леспромхозда эшләне. Ғаиләбеҙҙә алты бала булдыҡ, мин берҙән-бер малай, өс апай, ике һеңлекәш. Ғаиләне ҡарар өсөн атайыбыҙ төп эшенән тыш кистәрен йортобоҙ ихатаһында септә һуға торғайны. Беҙ ҙә уға ярҙам иттек. Иртәнсәк 4-5-тәрҙә тағы ла эшенә китә. Инәйәбеҙ (беҙҙә әсәйҙе инәй тиҙәр) миңә 12 йәш тулғанда баҡыйлыҡҡа күсте.

Мәктәптә уҡыған саҡтар иң иҫтә ҡалған йылдарым булыр. Йәй ауылыбыҙҙан 24 саҡрымда ятҡан район үҙәгенә, Архангелгә "ҡыҙыл аш" ашарға һәм китап магазинына йөрөй торғайныҡ. Борщты беҙ "ҡыҙыл аш" тип атаныҡ.

**Атайығыҙ һеҙгә ниндәй тормош һабағы бирҙе?**

- Атайым мин әрмелә саҡта вафат булды. Әрмегә китер алдынан уның менән Инйәр буйында һөйләшеп ултырҙыҡ. Миңә шул саҡ атайым: "Законды боҙорға тырышма, улым, ғәҙел бул", - тине. Йылға ташҡан ваҡыт ине. Иртә таңдан катер килеп беҙҙе алып китте. Атайым менән шунда ғүмерлеккә хушлаштым. Баҡыйлыҡҡа күскәс, һуңғы юлға оҙатырға ғына ҡайта алдым.

**Әрменән һуң артабанғы тормош юлығыҙ нисек дауам итте?**

- Апайҙарым ҡырҙа, һеңлекәштәрем ауылда ине әле. Уларҙы урынлаштырғас, мине ауылда бер нәмә лә тотманы. Шуға Өфөгә барып, химия заводына аппаратсы булып эшкә урынлаштым. Әрмегә тиклем 12-се училищела нефь һәм газ вышкалары монтажсыһына уҡығайным. Яр Саллы, Балаково ҡалаларында, Красноярск крайында ла эшләп алдым. Аҙаҡ кире Өфөгә ҡайтып, өйләнеп, фатир алдым. Хәҙер инде 1972 йылдан алып Өфөлә йәшәйем.

**Хәҙерге шөғөлөгөҙ - автомәктәп системаһына нисек килеп юлыҡтығыҙ?**

- Химия заводында эшләгәндә училищела водителгә уҡығайным. 90-сы йылдар башында ДОСААФ системаһына инеп киттем дә, автомәктәптә инструктор булып эш башланым. Бер аҙҙан өлкән инструктор, автомәктәп директоры урынбаҫары булып эшләнем. Шунда тәжрибә туплап, 2006 йылда үҙемдең автомәктәпте асып ебәрҙем. Тәүҙә бер мәктәбебеҙ бар ине, аҙаҡ икенсе улым техникум тамамлағас, уны үҙ янparam эшкә алдым һәм тағы ла бер мәктәп астыҡ. 2011 йылда береһен һатып, Чесноковкала, Благовещен ҡалаһында ике автомәктәбебеҙ барлыҡҡа килде.

**Балаларығыҙ барыһы ла юғары белемле, үҙегеҙ юғары белем алып өлгөрмәгәнһегеҙ. Юғары белем мотлаҡ кәрәк тип иҫәпләйһегеҙме?**

- Юғары белем беҙ үҫкәндә лә кәрәк ине. Әммә минең тормош шулай киткәс, атай-әсәй булмағас, үҙ йүнемдә үҙемә күрергә тура килде. Миңә бер кем дә бер нәмә лә килтереп бирмәне, ярҙам итерлек кешем булманы. Йөк машинаһында водитель булып эшләгән саҡта ла кистәрен ҡатыным менән балалар баҡсаларын йыйыштырып, йыуып йөрөнөк, ҡарауылсы ла булдым.

**Балаларығыҙға ниндәй тәрбиә бирергә тырыштығыҙ? Уңышлы ғаилә башлығы булыуығыҙҙың сере нимәлә?**

- Иң тәүҙә мин уларҙы эскелектән, тәмәке тартыуҙан аралай алдым. Икенсенән, балаларымды өйҙә эшһеҙ ятҡырырға тырышманым. Баҡсала эш бөтһә, тышта ултырған машинаны сығып булһа ла йыуа торғайнылар. Ялҡаулыҡ күберәк буш ваҡыт, тик ултырыу менән бәйле. Шуға күрә уларҙың буш ваҡытын файҙалы шөғөл менән тултырҙым.

**Һеҙ усал атаймы?**

- Юҡ, талапсан атай.

**Йортоғоҙҙа аҡыл сыбығы булманымы?**

- Булманы. Әгәр балалар алдында һинең абруйың бөтһә, һуңынан әллә нимәләр эшләһәң дә, аҡыл сыбығы урынына ҡулыңа нимә генә алһаң да, һуң була. Тимәк, тәрбиәлә шәхси өлгө беренсе урында торорға тейеш. Әгәр ҙә атай кеше эскән килеш өйөнә ҡайтһа, һүгенһә, ҡатынына ҡул күтәрһә, балалар ундай атайҙан баш сөйә. Үҙең дә атай булыуҙан туҡтайһың ул ваҡытта.

Баландың тәртип боҙоуы һинең үҙеңә бирелгән яза ул. Шуға күрә уларға кәрәк саҡта ҡаты итеп әйтеү менән генә сикләндем.

**Хәҙерге заманда, етмәһә, ҡалала 5 бала үҫтереү ауырға тура килмәнеме?**

- Улар үҫкәндә кер йыуыу машинабыҙ ҙа булманы. Әсәләренең тырыш, уңған кеше. Балаларыбыҙ бер ваҡытта ла бысраҡ йә ямаулы кейем кейеп йөрөмәне. Тәүге осорҙа кешеләргә 5 балабыҙ барлығы хаҡында әйтһәк, аптыраулы һәм йәлләүле ҡараш менән ҡарай торғайнылар. Йәнәһе, быларҙың балалары асяланғас йөрөйҙәрҙер инде. Әммә беҙ һыр бирмәнек.

*Әгәр балалар алдында һинең абруйың бөтһә, һуңынан әллә нимәләр эшләһәң дә, аҡыл сыбығы урынына ҡулыңа нимә генә алһаң да, һуң була. Тимәк, тәрбиәлә шәхси өлгө беренсе урында торорға тейеш. Әгәр ҙә атай кеше эскән килеш өйөнә ҡайтһа, һүгенһә, ҡатынына ҡул күтәрһә, балалар ундай атайҙан баш сөйә. Үҙең дә атай булыуҙан туҡтайһың ул ваҡытта. Баландың тәртип боҙоуы һинең үҙеңә бирелгән яза ул. Шуға күрә уларға кәрәк саҡта ҡаты итеп әйтеү менән генә сикләндем.*

**Балаларығыҙ барыһы ла һеҙҙең автомәктәп аша тәрбиә мәктәбе үттеме?**

- Иң оло улым Илнур тәүҙә автотранспорт техникумында уҡып, артабан эске эштәр органдарында эшләне лә, майор дәрәжәһендә отставкаға сығып, беҙҙең автомәктәпкә килде. Юғары белемде Мәскәү дәүләт университетында алды. Икенсе улым Руслан балиғ булғандан алып минең менән. Ул да автотранспорт техникумын, Омск транспорт академияһын ситтән тороп уҡып тамамланы. Килен дә бухгалтерия эштәрендә беҙгә ярҙам итә. Русланға етәгеһе ҡыҙым Ләйсән БДПУ-ның социаль факультетын тамамланы ла, шулай уҡ беҙҙә эшләй. Өсөнсө улым Илгиз шулай уҡ автотранспорт техникумын, аҙаҡ Ырымбур аҙыҡ-түлек университетын бөтөрҙө. Әле үҙ һөнәре буйынса эшләй, ваҡыты булғанда курсанттар туплап, беҙҙең автомәктәптә инструктор булып йөрөй. Хәҙер уның Чесноковкала үҙ автомәктәбе бар. Кинйәкәү балабыҙ, Айгөл ҡыҙыбыҙ мәктәптә уҡып бөткәс тә техникумға инде, Өфө авиация университетын тамамланы. Хәҙерге ваҡытта үҙенең ике "Матурлыҡ салоны" бар. Ғөмүмән, балаларымдың барыһы ла тәүҙә техникумда уҡып, аҙаҡ юғары уҡыу йорттарын тамамланы.

**Юл хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләре ҡәтғи үтәлергә тейеш. Сөнки теге йәки был ҡағиҙәне боҙоуың үҙеңде йә башҡаларҙы һәләкәткә алып килеүе бар. Ҡайһы ваҡыт секундтар барыһын да хәл итә. Шул уҡ ваҡытта тормош ҡағиҙәләрен үтәмәгән кеше бер ниндәй яза алмайынса йәшәй ала. Ошо хаҡта уйланғанығыҙ бармы?**

- Бында нимә әйтер инем. Бына һин ян-яғыңа ҡараш ташлап, йәйәү китеп бараһың, һиңә был осраҡта ситтәрҙән ҡурҡыныс әллә ни янамай. Үҙең һымаҡ йәйәүле менән бәрелешһәң дә, бер ни булмай, башыңды һыйпайһың да, артабан юлыңды дауам итәһең. Ә автомобиль иһә юғары хәүеф сығанағы. Ул ауыр, тиҙлеге юғары, кәрәк саҡта тиҙ генә туҡтатып та булмай. Икенсенән, ҡағиҙәләр үҙгәреп, яңылары өҫтәлеп тора. Шул уҡ ваҡытта машинаны бик оҫта йөрөтһәләр ҙә, 10-15 йыллыҡ стажы булған водителдәрҙән яңынан имтихан ҡабул итһәң, уларҙың яртыһы бирә алмаясаҡ.

**Эсеп руль артына ултырыусылар ҙа бар. Ҡайһы бер кешеләр уларҙы ғүмергә автомобиль йөрөтөү хоҡуғынан мәхрүм итергә кәрәк тип тәҡдим итә. Был тәҡдимгә нисек ҡарайһығыҙ?**

- Руль артындағы иҫерек - ул енәйәтсе. Әле икенсе тапҡыр эскән көйө руль артына ултырып эләгеүсене ике йылға тиклем төрмәгә ултыртыу ҡарала. Ул закон өс йыл самаһы элек сыҡты. Әле кемдең автомобиле менән йөрөүенә ҡарамаҫтан, икенсе тапҡыр иҫерек килеш эләккәндең машинаһын тартып алыу, шулай уҡ өсөнсөгә эләгеүсенең водитель танытмаһынан ғүмерлеккә мәхрүм итеү буйынса закон проекттары ҡарала. Мин быны хуплайым, сөнки закондар ҡәтғиләнеү менән, киреһенсә, эсеп руль артына ултырыусылар һаны арта ғына бара.

Тағы ла иң нығ аптыратҡаны: руль артындағы 100 иҫеректең 50-һе ҡатын-ҡыҙ. 2019 йылда был йәһәттән ҡатын-ҡыҙҙың нисбәте 38 процент ине. Эсеп эләккән ҡатын-ҡыҙҙарҙың күбеһе машинала балалары менән йөрөй, шуныһы аяныс.

**Ир-ат водитель менән ҡатын-ҡыҙ водитель ҡайһы яғы менән айырыла? Ҡатын-ҡыҙҙар аварияны әҙерәк яһай тиҙәр, шул дөрөҫмө?**

- Дөрөҫ түгел. Сөнки водителдең енесе юҡ. Икенсенән, эсеп руль артына ултырыусыларҙың



**✓ *Хәҙерге ваҡытта эсеп эләккән водителдәрҙең 40 проценты 30-39 йәштәрҙә. Ундайҙарҙың руль артындағы стажы ла 3-4 йыл самаһы була. Ә 45-50 йәштәгеләр тәжрибәләренә таянып, аварияларҙы әҙерәк яһай.***



нисбәте тигеҙ булғас, башҡа айырымлыҡтары ла юҡтыр. Бәлки ҡатын-ҡыҙҙар яйыраҡ йөрөйҙәр.

**▸ Атайымдың бер туған ағаһы Мөбәрәк олатай ҡыҫҡа ғына бер фекер әйткәйне: "Ҡулдан машина алһағыҙ, урыҫтыҡын алырға тырышығыҙ, уларҙыҡы ҡараулы була", йәнәһе. Ошо фекергә ниндәй комментарий бирер инегеҙ?**

- Был дөрөҫ түгел! Машинаны ҡарау милләт менән түгел, йәш айырмаһы һәм аҡса булыу-булмау, йәғни социаль статус менән билдәләнә. Әйтәйек, бай кеше машинаһының бер ере ватылһа, сервисҡа индереп төҙәттерә, запчастарын яңынан ҡуйҙырта, бик тә бик булмаһа, яңынан машина һатып ала. Ә инде бындай финанс мөмкинлектәре булмаусылар машинаны төҙәтеүҙең башҡа юлдарын эҙләй. Мин элегерәк таныштарыма, туғандарыма ҡулдан машина һайлап алышырға ярҙам итешә инем. Унда иң тәүҙә машина һатыусының кем булыуына, йәшенә ҡарарға кәрәк. Мәҫәлән, бер генә хужаһы булған оло кешенең машинаһы тиҙерәк һатыла.

**▸ 5-6 йыл элек бер башҡорт егете һуңғы маркалы текә сит ил машинаһында йөрөп, аварияға эләкте. Машинаһы ремонтҡа яраҡһыҙ булып сыҡты. Мин уға: "Яҡшы машина алырға аҡса туплағансы, ҡулдан булһа ла ҡайтышыраҡ машина алып йөрөп тор", - тигәйнем, ул: "Юҡ, мин шул машинанан кәмде алырға теләйеш түгелмен, минең өсөн ул түбәнселек, лох булғым килмәй", - тип аптыратты. Быға нисек ҡарайһығыҙ?**

- Быға төрлөсә ҡарарға мөмкин. Бар шундайҙар, улар ашамай-эсмәй, аҡсаһын һәр яҡтан экономиялап, текә машина алырға тырыша. Шул уҡ ваҡытта сереп байыған икенсе берәү иң ябай машинала йөрөп ята. Уның бөгөндән иң текә машинала йөрөрлөк аҡсаһы ла бар. 90-сы йылдарҙа ундай текә машиналарҙа рэкет менән шөғөлләнгән бандиттар йөрөнө. Хәҙер уларҙы әллә ни байлығы булмағандар ҙа кредитҡа ала. Әммә ундай машинаға техник ҡуҙәтеү үткәреү, страховка түләү, ағыулыҡ менән тәьмин итеү ябай кешенең кеҫәһенә ныҡ һуға. Минә ҡалһа, машинаң текә булыуҙан бигерәк, ышаныслы, йыйлы булыуы мотлаҡ.

**▸ Страховка системаһын индереү водителдәр өсөн кискен мәсьәләне хәл итте. Элек авария осрағында текә машина хужаһы: "Бер аҙнанан миңә өр-яңы ошондай машина бирәһең", - тип аҫҡыстарын ҡалдырып китә инеләр. Ҡайһы берәүҙәр ошондай психологик көсөргәнеште күтәрә алмайынса, үҙ-үҙҙәренә ҡул да һалды…**

- Страховка был көсөргәнеште юҡҡа сығарҙы. Аварияларҙа төрлөсә була: ҡайһы берәүҙәр һаҡһыҙлыҡ арҡаһында, йә һаулығы насарайыуы сәбәпле авария яһай. Бер уҡ ваҡытта страховка кешенең һаулығына килтерелгән зыян өсөн дә түләнә.

**▸ Ҙурмы, бәләкәйме, һәр машинаның бер аварияһы була, тиҙәр, шул дөрөҫмө?**

- Дөрөҫ тә, дөрөҫ түгел дә. Ни өсөн тигәндә, аварияға осрамаған машиналар ҙа була. Барыһы ла кеше факторына бәйле. Йәш саҡта уазик машинаһы менән китеп барғанда тиҙ ярҙам машинаһы минә арттан килеп бәрелде. Мин светофорҙа ҡыҙыл утҡа туҡтағайным. Водителе 60 йәштән уҙған өлкән ағай, түшендә "Аварияһыҙ йөрөгән өсөн" тигән значогы ла бар. Үҙе 44 йыл буйы аварияһыҙ йөрөгән икән. Авария яһауын бик ауыр кисерҙе. Мин уға: "44 йыл йөрөһәң дә, 45-се йылыңда аварияға осраның. Тормошта була торған хәл. Авария булды, әммә бының менән тормошоң тамамланманы, шуға ҡыуан. Иң мөһиме, икебеҙгә лә бер нәмә ла булманы, тимер табыла", - тип йыуаттым. Шуға күрә аварияләр була торған хәл, ә бына мотлаҡ булғандарынан ҡотолоп та булмайҙыр.

**▸ Водитель ни тиклем тәжрибәле булһа, шул тиклем яйыраҡ йөрөй тиҙәр. Шул дөрөҫмө?**

- Дөрөҫ түгел. Автомәктәптә уҡып сыҡҡандан һуң тәүге 3-4 йылда водителдәр яйыраҡ йөрөргә тырыша, икенсенән, улар яңы ғына уҡығас, юл йөрөү ҡағиҙәләрен әле ныҡлап иҫләй, уларҙы теүәл үтәргә тырыша. Хәҙерге ваҡытта эсеп эләккән водителдәрҙең 40 проценты 30-39 йәштәрҙә. Ундайҙарҙың руль артындағы стажы ла 3-4 йыл самаһы була. Тимәк, улар үҙҙәрен ошо ваҡыттан һуң оҫта водитель итеп тоя башлай. Ә 45-50 йәштәгеләр юл йөрөү ҡағиҙәләрен белеп бармаһа ла, тәжрибәләренә таянып, аварияларҙы әҙерәк яһай. Юл йөрөү ҡағиҙәләре даими үҙгәреп тора. Ваҡыт табып, улар менән танышып барырға кәңәш итер инем.

**▸ Шундай ырым-ышаныу бар: юлда ҡаршыңа мал сыҡһа, Хоҙай водителдәрҙе иҫкәртә, йәнәһе, алда уны ҡурҡыныс көтә, яйыраҡ барырға ҡуша. Был хаҡта ни әйтерһегеҙ?**

- Хоҙай иҫкәртәме-юҡмылыр, уныһын әйтә алмайым, әммә юлыңа мал сығып яйлайһың икән, был һәйбәткә генә. Һаҡлағанды Хоҙай һаҡлармын тигән.

**▸ Руль артында нисә йыл йөрөйһөгөҙ һәм нисә тапҡыр аварияға осранығыҙ?**

- 2008 йылда өр-яңы "Тойота-королла" алғайным. Парковкала машинамды ҡабыҙып, кузовҡа ҡунған ҡарҙы һепереп торам. Шул саҡта 60 йәште уҙған бер ағай машинамдың өҫтөнә килде лә менде. Ул машина янындағы колеяға инеп китеп, шунан сығыр өсөн рулен кинәт борған булған. Минең ике аяҡ кабина эсенә инеп китте, бер аяғым һынды. Ошо аварияндан һуң машинамды ремонтлап, 8 ай йөрөгәс, тағы ла икенсе кешенең ғәйебе буйынса аварияға осрап, машинамды һатып ебәрҙем.

**▸ Юл йөрөү ҡағиҙәләренең ҡайһыларын дөрөҫ түгел тип иҫәпләйһегеҙ?**

- Улай иҫәпләмәйем, дөрөҫ ҡулланылмау осраҡтары бар тип әйтер инем. Ҡайһы урындарҙа юл йөрөү билдәләре дөрөҫ ҡуйылмай. Ҡайһы урындарҙа билдәләр артыҡ күп ҡуйыла. Ҡайһы ваҡыт ремонттан һуң йылдар буйына был эштәргә бәйле билдәләр алынмай тора һәм улар машиналар хәрәкәтен тоткарлай. Юл йөрөү ҡағиҙәләрен юл хәүефһеҙлеге хеҙмәткәрҙәре уйлап сығармай, улар өҫтөндә белгестәр эшләй.

**▸ Тиҙлекте сикләүҙең "+20" ҡағиҙәһе ни сәбәптән барлыҡҡа килде һәм ул дөрөҫмө?**

- Ул тәүҙә "+20" ине, шунан "+10"-ға күсте лә, аҙаҡ тағы ла "+20"-гә ҡайтарҙылар. Әгәр ҙә машинаңда заводтан сыҡҡандағы тәгәрмәс торһа, спидометр дөрөҫ күрһәтә, ә инде бер размерға ҙурыраҡ тәгәрмәскә алмаштырһаң, спидометр яңылыш күрһәтә башлай. Әгәр ҙә юл билдәһе 60 км.сәғәтте күрһәтә икән, һин 60 менән барырға тейешһең. Ә инде 80 менән барыһың икән, юл йөрөү ҡағиҙәһен боҙаһың тигән һүҙ. Был осраҡта "+20" ҡағиҙәһе яңылышлыҡ (погрешность) өсөн штраф юҡ, тигәнде аңлата. Әле бына сикләүҙе тағы ла "+10"-гә күсерергә уйлайҙар. Элек Салауат проспектында сикләү 80 км.сәғәт ине, хәҙер барыбер 80 менән йөрөйҙәр, тип, 60-ҡа ҡалдырҙылар.

**▸ Атайығыҙҙың хушлашҡанда әйткән һуңғы һүҙе "Законды боҙма" булған. Уның ошо һүҙе менән һайлаған һөнәрегеҙ араһында ниндәй бәйләнеш бар? Ни өсөн тигәндә, законды, ҡағиҙәне теүәл үтәү юл хәрәкәтендә мотлаҡ һәм кисекмәҫтән талап ителә торған шарт. Һеҙҙең закон менән мөнәсәбәтегеҙ нисек?**

- Эйе, мин законды боҙорға тырышмаған кеше. Шул уҡ ваҡытта кеше законды үҙе теләмәһә лә, яңылышлыҡ йә һаҡһыҙлыҡ менән боҙоуы бар. Бер мәл Руслан улым менән энер төшкәс эштән ҡайтырға булдыҡ та, машинаға ултырғас, күнелгә ниндәйҙер шом килде. Улым рулдә, машинаны артҡа сиктереп сығып китергә тейешбеҙ. "Атай, машинаның артын сығып ҡара әле", - тине Руслан. Сығып ҡараһам, ҡараулысының 5 йәшлек малайы артҡы бамперға аҡбур менән һүрәт төшөрөп ултыра. Беҙҙе Хоҙай иҫкәрткәндер, тием.

Автомәктәп - ул шундай мәктәп, юғары хәүеф сығанағы булған юлдарҙа, трассаларҙа аварияһыҙ, хәүеф-хафаһыҙ йөрөү өсөн иң тәүҙә үҙеңде тәрбиәләргә бурыслыһың. Үҙем дә, балаларым да, тиҫтәләгән йылдар һүҙымында меңәрләгән курсанттарым да шул мәктәп аша үттек. Юлда, трассаларҙа үҙен тоторға өйрәнгән кеше йәмиғәттә лә, коллективта ла үҙен торға өйрәнә. Шәхес тәрбиәләү мәктәбе ул автомәктәп!

**▸ Фәһемле әңгәмәгеҙ өсөн оло рәхмәт һеҙгә, Хәлим Ғайса улы! Хәйерле юлдар теләйбеҙ һеҙгә!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*ҺАБАҠТАР*

# РӘХМӘТЛЕ БУЛА БЕЛМӘЙБЕҘ...



**Беҙ балалар йортонда үҫкән һуғыш осоро етемдәре. Мин ауылда йәшәүемде, өйөмдө хәтерләмәйем. Берҙән-бер хәтирәм шул: тоноҡ тәҙрә быялаһында эленеп торған бәләкәй генә һауа бөртөгөн алам тип тырнап та, һуҡҡылап та, ялап та ҡарауым. Алып булманы ул бөртөктө. Һауа бөртөгөмө, һыу бөртөгө ине микән ул, тик хәҙер күҙ йәше бөртөгөләй иҫкә төшә. Кипмәй ҙә, ағып та төшмәй, юйылмай ҙа...**

Үҙ аңым менән донъяны ҡабул иткәндә балалар йортонда үҫә инем инде. Беҙҙе Бөрйәндән Өфөгә алып килделәр. Беҙҙең эргәгә алып килгән һәр баланы ҡыҙыҡһынып күҙәтә торғайным. Иң тәүҙә Роза исемле ҡыҙыҡайҙы килтереп ҡалдырып киттеләр. Ул тәҙрәнән урамға ҡарап: "Мама, мама!" - тип ҡысҡырып иланы. Балалар Розаны аптырап күҙәтте. Беҙҙең арала быға тиклем илаҡ балалар булмағайны шул.

Күпмелер ваҡыт үтте. Бер көндө "Бәләкәй баҡсала" уйнап йөрөгәндә Фаина исемле ҡыҙыҡайҙы алып килделәр. Роза менән мин уның янына йүгерҙек. Фаина эскәмйәгә ултырҙы. Беҙ йылмайышып ике яҡлап уның янына ултырҙыҡ. Фаина эскәмйәгә менеп баҫты. Беҙ ҙә менеп баҫтыҡ. Ул һикереп төшкәйне, беҙ ҙә һикереп төштөк. Ерән сәсле, түп-түңәрәк һипкелле битле Фаинаны "Илап ҡуймаһын!" тип ҡурсалап ҡына йөрөттөк. Ә һуңынан, мәктәп йылдарында, Санияны алып килделәр. Ул, бәлки, төндәрен илағандыр ҙа, әммә көндөҙ бойоғоп йөрөмәне. Сөнки ФЗУ-ла уҡып йөрөгән ағаһы йыш килә ине. Ағаһы, моғайын, Санияға "Ныҡ бул, бирешмә!" тип өйрәтәләр, тип уйланым. Аҙаҡ беҙгә Надя, Катя исемле ҡыҙҙарҙы алып килделәр. Уларҙың да илап ултырғанын күрмәнем. Беҙ, һуғыш осоро балалары, тормошто нисек бар, шул көйө тыныс ҡабул иттек. Беҙҙең арала һәр саҡ изгелекле мөнәсәбәт булыуы иҫемдә ҡалған.

Йылдар ашығып үттеләр, мәктәпте тамамлап, төрлө яҡтарға таралыштыҡ. Күпмелер йылдар үткәс, бер саҡ балалар йортоноң юбилейында осраштыҡ. Мине аптыратҡаны шул булды: бергә үҫкән, бергә уҡыған һабаҡташтарым араһында Сания менән мин генә башҡорт балаһы икәнбеҙ ҙә. Сания - Сибайҙан, ә мин - Бөрйәндән. Ҡалғандары йә сыуаш, йә мари, йә рус, йә татар. Балалар йортонда тәрбиәләнгәндә барыбыҙ ҙа башҡортса һөйләштек, башҡорт телендә уҡып белем алдыҡ, шуға ла кемдең ниндәй милләт балаһы икәнен дә айырмағанбыҙ. Ә осрашыуға килгәс, уларҙың береһе лә башҡортса һөйләшмәгәнен шәйләп ҡалдым. Башҡортса өндәшәм, әммә береһе лә миңә башҡортса яуап бирмәй. Һәм күңелем кителеп: "Йәмәғәт, башҡорт илендә йәшәйһегеҙ, башҡорт телен һәйбәт беләһегеҙ, ә нинә башҡортса һөйләшмәйһегеҙ?" - тип әйтмәй булдыра алманым. Минең һүҙҙәремә ҡаршы яуап таба алманылар. Ә минең башыма: "Юҡҡа ғына халыҡ "Бүре балаһын бүреккә һалһаң да урманға ҡарай" тип әйтмәгәндер",- тигән уй килде...

Ә шулай ҙа мин рус йә татар телендә һөйләшеүгә күскән һабаҡташтарым урынында булһам, "Беҙҙе үҫтергән, тәрбиәләгән, белем биргән башҡорт теленә һәм еренә рәхмәт!" тигән һүҙҙәрҙе булһа ла әйтер инем. Нинәлер улар ҡаушап ҡалды. Һуңынан уйлағандарҙыр, тигән өмөттәмен. Рәхмәтле булыу етешмәй шул кешеләргә.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ХУПЛАУСЫ БУЛҺА...



Иплəп кенә ейәнемдең ағасҡа менергә маташыуын күҙәтәм. Төрлөсә маташты ул. Тәүҙә бер аяғын күтәреп ҡараны. Килеп сыҡмағас, икенсеһен мендереп һалды. Бер нисә тапҡыр мәтәлләп тә барып төштө. Үрмәләй торғас, тәки моратына ирешә бит әй. Үҙе теләгән бейеклекте яулағас, уның ҡыуанғанын күреү үҙе бер киноһес ине.

Әлбиттә, еңел бирелмәне уға был еңеү. Аяғын да, ҡулын да ауырттырҙы. Әммә минең дәртләндереүемдә, хуплауымды күреп, сабый маҡсатынан тайпылманы.

Был ваҡиғанан үҙем өсөн ике һығымта эшләнем. Бәләкәй саҡтағы ныҡышмаллығы ташлап китмәһә, һәр кеше осраған һынау-ҡаршылыҡтарға бирешмәй, хыялына өлгәшер ине. Быныһы - беренсеһе. Икенсеһе: дәртләндереүсе, хуплаусы булһа, ауырлыҡты еңеү кешегә бер ни ҙә тормай икән...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

***✓ Ашығып хөкөм итәбеҙ. Ялғанды ысындан, хәҡиҡәтте хатанан айырырға өйрәнгәндә ҡабаланмаҫҡа икәнен белмәйһең бит һин! Мәкер ҡорған тоҙаҡҡа үҙебеҙ барып инәбеҙ, уның ҡағиҙәләренә буйһонабыҙ...***




-Оҡшаймы спектакль? - Сәхнә яғынан күҙ алмаған ҡыҙҙан Рәхим ҡәнәғәт тауыш менән шулай тип һораны. Камила яуап итеп йылмайырға тырышты. Спектакль нимә тураһында һуң? Сәхнәгә баҡҡан килеш ул сәхнәне күрмәй ине. Бите буйлап һырылып төшкән бөрсөк йәшен һыпырҙы ла яуап ҡайтарҙы.

- Тормош тап ошо сәхнә һымаҡ. Көлөр мәлдә илата, илайым тигәндә көлөргә ҡуша. Мин үҙем дә бөгөн сәхнәлә...

- Шәп спектакль! - Рәхим ҡыҙҙың һүҙен ҡеүәтләгәнен белдерҙе, ихлас баш ҡаҡты, хатта беләгенән ҡыҫып тотоп һөйөп ҡуйҙы.

Тәнәфестән һуң Ғәзинурҙар кире инмәне. Камила спектакль бөткәнсе буш урындан күҙен алманы.

Иртәгәһен Рәхим курсташы хөрмәтенә дуҫтарын ҡунаҡҡа саҡырҙы. Араларында Сәлмән исемле шағир телгә бөткән булып сыҡты. Хәбәрен ҡоя ғына, бер ыңғайҙан әллә күпме шиғырҙарын уҡып ташланы.

- Мин мөхәббәт темаһына яҙырға яратам, сөнки ул, йәғни, мөхәббәт, бөтә дәүерҙәрҙә лә бер иш яңғырай. Хис-тойғо, кисерештәр иҫкермәй. Тимәк, күпме яҙһаң да була. Унан кеше ялҡмай.

- Тик ҡайһы бер шиғырҙарың бер төрлөрәк яңғырай. Ҡабатланыу булмаһын өсөн нимә эшләргә?

- Яңы мөхәббәт эҙләргә!

- Мөхәббәт һүҙен үтә ябайлаштырып ебәрәһең түгелме? - тип һүҙгә ҡушылды Камила.

- Бәлки. Шулай ҙа шағир хистойғолар ҡойононда йәшәргә тейеш, һөйгәнең менән ҡауышыу, йәғни ғаилә ҡороу тигәнде әйтмәйем мин. Мөхәббәт һәм ғаилә - икеһе ике нәмә. Мөхәббәт яратҡан кешеңде идеаллаштырырға мәжбүр итә, ә көнкүреш быныӊ киреһен раҫларға тырыша, һәм ул еңә лә...

- Әгәр мөхәббәттәрен һаҡлай алмайҙар икән, үҙҙәре ғәйепле!

- Ҡайһы саҡ ғашиҡтарҙың ҡауышмауы хәйерле. Улар бер-береһенә булған яҡты хисте ғүмер буйы йөрәктәрендә йөрөтә. - Сәлмән Рәхимгә ҡараны. - Рәхим, хәтерләйһеңме, һин бер танышың тураһында һөйләгәйнең. Хатта яңыраҡ та телгә алдың бит әле!.. Был егеттең мәктәптә уҡығанда уҡ дуҫлашҡан ҡыҙы була. Институтты бөткәнсе дауам итә дуҫлыҡтары. Уларҙы бер-береһенән айырыр көс булмаҫ, тигәндәр. Ә бөтәһе лә үтә ябай, үтә ғәҙәти хәлителә. Икенсе, бөтөнләй уйламаған башҡа ҡыҙ уны дачаға алып китә... - Сәлмән мәғәнәле күҙ ҡыҫты. - Уларҙың хәлдәре беҙгә мәғлүм түгел, әммә бер-ике айҙан ошо ҡыҙ егетте үҙенә өйләндерттереп тә ҡуя. Ғаиләлә мөхәббәт бармы-юҡмы - икеле. Шуныһы - һаман бергәләр. Ә тәүге мөхәббәтенә, һөйгән ҡыҙына хәҙер арнап ялҡынлы шиғырҙар яҙһа, мин һис ғәжәпләнмәҫ инем. Мөхәббәт ижад өсөн кәрәк.

Камиланың тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Ул тамағын ҡырҙы.

- Кем һуң ул егет? Һеҙ берәй шағир тураһында һөйләйһегеҙме?

- Бер кем тураһында ла түгел. Сәлмән, һөйләмә юҡты, - Рәхим һүҙҙе ситкә борорға тырышты.

- Аңламайым, - тегеһе иңбашын йыйырҙы. - Үҙең һөйләгән ваҡиға ла баһа! Юҡ-юҡ, ул егет шағир түгел. Былай ғына миҫалға килтерҙем. Яңылышмаһам, ул егет ауыл хужалығы институтын бөтөрҙө. Әле йәшәгән кәләше шул институтта лаборантка булған. Егеттең артынан саба башлағас, әйткәндәр: "Кеше бәхетенә ҡул һонма, ул барыбер һиңә ҡарамаясаҡ". Ҡыҙ хатта бармаҡ янап бәхәсләшкән: "Теге ҡыҙға кәрәк һөйөү миңә кәрәкмәйме? Мин көрәшәм һәм еңәм!" - тигән, һүҙендә тора, егеттең һөйгәне янына: "Минең балам буласаҡ", - тип бара. Ә мәхлүк егет, йәғни заман мәжнүне, үҙенең һөйгәне янына бөтәһен дә һөйләр, аңлатыр, ғәфү үтенер өсөн ҡайтҡан була. Тел төбөмдән аңлайһығыҙҙыр, әфәнделәр-ханымдар - өлгөрмәй ул. Теге йылғыр ҡыҙ бөтәһен дә бутай. Шулайтып, егетте эйәртеп кире Өфөгә китә. Йәшәйҙәр бына нисә йыл. Ә һеҙ мөхәббәт тигән булаһығыҙ. Рәхим, йыйырма ҡашыңды, кем әле ул егеттең исеме?

Камила үҙе лә һиҙмәҫтән тороп баҫты. Күҙҙәрен ҙур асҡан килеш балконға табан атланы. Ҡапыл табындағылар шып-шым ҡалды. Рәхим ҡыҙҙың артынан ташланды:

- Камила!

- Ҡалдыр, зинһар, яңғыҙымды. - Тауыш ҡаты яңғыраны.

Башын эйгән Рәхим ҡунаҡтары яғына сығырға мәжбүр булды. Камила күккә төбәлде: "Йә Хоҙа! Нисә йылдар буйы дөрөҫлөктө белмәй йәшәгәнмен! Ғәзинур менән йылдарға һуҙылған саф дуҫлыҡ күҙ асып йомған арала селпәрәмә килде. Мөхәббәт тигәнебеҙ быяла тау ғына булған. Мәкер, хәйлә үлемһеҙ! Бәхетлеме икән хәҙер Гүзәл? Күҙ йәштәре аша уға инәлгән Гүзәл. Тормош сәхнә икәнен ҡалай һуң аңланым... Кем оҫта уйнай, шул еңә... - Камила сытырлатып күҙен йомдо. - Юҡ, һин мәкер менән алдырһаң, мин дөрөҫлөк менән еңермен!"

Ҡыҙҙың эргәһенә йүгерә-атлай Сәлмән килеп баҫты:

- Камила, ғәфү ит мин алйотто!

Камила уйсан ғына йылмайҙы, баш сайҡаны.

- Ә нимә өсөн ғәфү үтенергә? Һин миңә бары дөрөҫлөктө генә асыҡларға ярҙам иттең. Ҡайһы бер нәмәләргә башҡасараҡ ҡарарға кәрәк икәнен төшөндөрҙөң, һуҡырлыҡтан ҡотолғандай булдым.

- Уйламай һөйләгән ауырымай...

- Улай түгел. Ихлас әйтәм, күңелдән бер юшҡын юйылды. Эсте өйкәгән ҡайһы бер һорауҙарға яуап таптым. Сәғәте һуҡҡан булғандыр.

...Эх, йәшлек, йәшлек! Тиле саҡ. Ашығып хөкөм итәбеҙ. Ялғанды ысындан, хәҡиҡәтте хатанан айырырға өйрәнгәндә ҡабаланмаҫҡа икәнен белмәйһең бит һин! Мәкер ҡорған тоҙаҡҡа үҙебеҙ барып инәбеҙ, уның ҡағиҙәләренә буйһонабыҙ...

- Рәхим, һин бит дөрөҫлөктө белгәнһең.

- Мин генә түгел, ул хаҡта башҡалар ҙа белә ине...

- Ә мин уны һинең дуҫыңдан ишеттем, һәм хәҙер мин элекке Камила түгел. Ғәзинур менән яһаған хатаны беҙ үҙебеҙ төҙәтербеҙ. Хуш бул, Рәхим!

- Камила!

- Хуш-һау бул. Мине эҙләмә.

Камила Ғәзинурға шылтыратты.

- Был мин.

- Камила!

- Мин.

- Камила!..

Осрашҡас, ҡулға-ҡул тотоношоп, оҙаҡ һүҙһеҙ баҫып торҙолар. Бөтә уйлағандар, әйтергә теләгән һүҙҙәр онотолдо. Тын ҡалған килеш бер-береһенән күҙҙәрен ала алманылар. Был тынлыҡ һүҙгә ҡарағанда көслөрәк ине. "Сикәһенә сал йүгергән, күҙҙәре төпкә батҡан. Шулай ҙа ул элеккесә мин яратҡан Ғәзинур!" - тип уйланы Камила. "Мин һөйөп, мин ҡарап туя алмаған Камилам. Шул уҡ күҙҙәр. Бер аҙ уйсан, арығандыр ҙа. Ошо ҡараш мине көйҙөрҙө, ошо ҡараш үлтерҙе..."

Камила ымлап эскәмйәгә күрһәтте. Элекке саҡтағылай иңгәиң терәшеп ултырҙылар. Ҡарашып алғас, йылмайыштылар.

- Мин һине үҙем эҙләп таптым. Ете йылдан һуң, - тине Камила. Был һүҙҙәрҙе ишеткән Ғәзинур әллә нимә эшләп китте..

- Юҡ, Камила, - тине ул эске һыҙланыу менән. - Үткән йылдарҙа һин минән ҡасып йәшәнең, һин мине ғәфү итә алманың. Юғалтыусы ла, эҙләүсе лә мин булдым.

- Эҙләүсе... Тик эҙләүсе мине таба алманы... - Камила тултырып һөйгәненә ҡараны. - Әйт, ни өсөн килмәнең Үрнәккә?

- Үрнәк?

- Мин бит Гүзәлгә әйтеп киттем. "Үҙе һайлар, теләһә, артымдан килер, ул саҡта мин Ғәзинур менән ер сигенә лә китергә әҙер", тинем.

Ғәзинур ҡулдарын йоҙроҡлаған килеш маңлайына терәне.

- Һуң... "Мине эҙләмәһен. Мәңге таба алмаҫ, мәңге ғәфү итмәм", тимәнеңме ни? Ул Камила шулай тип әйтергә ҡушты, тине. Их, һин шылтыратҡанда нишләп кенә өйҙә булманым икән? Ҡайтып ингәндә Гүзәл беҙҙә ине. Атайыма бөтәһе лә билдәле. Нығ ярһыған, уны ла аңлап була... Шулай ҙа һине эҙләп йүгерҙем. Ҡайҙалығыңды белеүсе бер әҙәм булһасы! Уғаса булмай, ағайымдарҙы алып, атайым килеп етте. "Кемде әүрәткәнһең, шуның менән китәһең!" Атайға нисек дөрөҫөн һөйләйһең? Бата уҡыттылар. Шунан китергә тура килде... Тағы ла ҡайттым һинең арттан. Өйөңә индерменеләр. Хаттарыма яуап яҙғаның булманы.

"Миңә уларҙы тапшырманылар. Бәлки, "Ғәзинур минең өсөн үлде", тип әйтеүем быға сәбәп булғандыр? Тиҙерәк онотор, тигәндәрҙер..."

- Ғәзинур, Ғәзинур!.. Һөйөклөм, һинме был мин яратҡан, мин ғорурланған тәүәккәл Ғәзинур? Нишләнең һин? Ҡай саҡ һине танымай китәм. Юҡ, төҫөңдө түгел, булмышыңды... Мәктәптән алып күп йылдар үтте шул. Әллә шуға танымайыммы?

- Һинең яратыуың тәүәккәл дә, ҡыйыу ҙа иткәйне мине, һине юғалтыу менән тормош йүнәлешен дә юғалттым шикелле...

"Беҙҙең күңелдәрҙе берәү ҙә айыра алмаясаҡ. Мин үҙ мөхәббәтем өсөн көрәшәсәкмен һәм уны ятҡа ҡалдырмаясаҡмын! Беҙ инде берәүҙең дә мәкер ҡорбаны булмаясаҡбыҙ, һине ҡасандыр үҙ ҡулдарым менән ятҡа тотторол ебәргәйнем, бынан һуң бөтәһе лә үҙгәрәсәк, һине үҙем менән алып китәсәкмен. Бүтәндәргә генә түгел, үҙемә лә ошо йылдар эсендә бушҡа ғына йәшәмәгәнемде, бушҡа янмағанымды иҫбатлаясаҡмын. Кем генә тормошта хата яһамай! Мин бит һине шартдәғүә ҡуймайынса яраттым! Барлығыңды белеү, көрәшеүгә өмөт менән йәшәү... Яраттым! Үткән йылдар эсендә был хисем тамсы ла бүҫкәрмәне... Ә һин?"

- Ғәзинур, әйт, миңә булған тойғоларың һүнмәнеме?

- Элеккенән дә нығыраҡ яратам, Камила, - Ғәзинур уның яурынынан тотоп әйтте был һүҙҙе.

- Бергә булайыҡ, бәхетле ит мине!

Камила күҙҙәрен селт-селт йомоп йылмайҙы.

- Бергә?

- Ҡайһы бер эштәремде ослайым да... Унан үҙем барып алам һине. Көт аҙ ғына!

- Көтөрмөн. Быға тиклем көттөм бит.

* * *

Әсәләренә ҡайтып килгәндә Камила, һис уйламағанда, синыфташы Айгөл менән осрашты. Ҡапылғара Айгөлдө танымай торҙо хатта. Үҙен ҡосаҡлап алған йыуан ҡатынға аптырап текәлде лә китте.

- Камила, йәнекәй, әллә ысынлап та танымайһың инде?

- Айгөл! - Хәҙер Камила уны ҡосаҡлап алды. - Танымаҫһың да шул, мәктәпте бөткәндән һуң күрешкәнебеҙ юҡ та баһа. Беҙ һине спорт юлын һайлар тиһәк, һин көтмәгәндә хәрбигә кейәүгә сыҡтың да әллә ҡайҙарға киттең дә барҙың!

- Киттең дә олаҡтың, тимәксеһеңдер инде!.. - Айгөл рәхәтләнеп көлдө. - Аллаға шөкөр, ирҙән уңдым, өс бала үҫтерәбеҙ. Бөтәһе лә спорт ярата. Уларға бик өмөт бағлайым. Ә мин үҙ сиратымда һәйбәт әсәй булырға тырышам, - Айгөл етдиләнеп Камилаға төбәлде. - Мин һине күптән инде Ғәзинур менән ҡауышҡандыр, тип уйлай инем... Беҙ, синыфташтар, һеҙҙе һәр саҡ идеаль пар тип иҫәпләй торғайныҡ, хатта көнләшеп тә ҡараныҡ. Ниңә, булды инде... Ә хәҙер тап киреһе килеп сыҡты түгелме? Камила, онот һин уны, тап үҙ бәхетеңде. Ул һиңә лайыҡ түгел, аңлайһыңмы? Теге Ғәзинур мәктәп йылдарында тороп ҡалды бит...

- Юҡ, - тине Камила ҡәтғи тауыш менән. - Ул һаман да элеккесә. Хаталар дөрөҫ юлды табырға ярҙам итә. Аҡыл бирә...

- Һаман яратаһың, үҙгәрмәгәнһең... Ә бит ҡасандыр ул миңә лә нығ оҡшай ине. Элек һиңә асыу һаҡлаған булһам, хәҙер килеп шөкөр ҡылам. Үҙеңде уйла, Камила! Уның башҡа кеше менән ҡауышыуы - яңылышлыҡ түгел, ә яҙмыш.

- Яҙмыш... Юҡ, Ғәзинур - минең яҙмышым. Хәҙер улай тип әйтергә хаҡым бар. Шуға ла әле йәшәлгән ғүмерем бушҡа үтмәне, тип уйлайым. Хуш бул, Айгөл!

Түҙмәне, Ғәзинур менән тәү осрашҡан шишмә буйына китте. Был тирә хәҙер бала-саға тауышынан гөрләп тора ла баһа! Камила яҡыныраҡ килде. Өлкән синыф ҡыҙҙары йыйылған. Тап ошо йәштә ул... Тап ошо йәштә... Йә Хоҙа, теге ваҡыттан алып бер нәмә лә үҙгәрмәгән. Шишмә буйына ял итер өсөн дә, хозурланыр, һоҡланыр өсөн дә, татлы һыуын ауыҙ итер өсөн дә киләләр. Киләсәктә лә уға юл өҙөлмәйәсәк.

- Һаумыһығыҙ, апай!

Иҫәнләшкәндән һуң ҡыҙҙар шымып ҡалды. "Ятһыранылар. Уларға ҡамасауланым, ахырыһы..." Көтмәгәндә үҙен артыҡ тойған Камила йәһәтләп ситкә атланы. Юҡ, был инде - икенсе ваҡыт, икенсе заман. Бында Камила үткән эҙҙәр ҡалмаған, шишмәне үҙ иткән, уның янына килеп йөрөгәндәр хәҙер башҡалар...

**(Дауамы. Башы 27-29-сы һандарҙа).**

*ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ...*

# ЯБАЙ АУЫЛ МАЛАЙЫ

**Мәҡәләне шулай тип атағас, ирекһеҙҙән, йылмайып ҡуйҙым, сөнки күҙ алдына тал сыбыҡҡа атланып, бер ғәмһеҙ уйнап йөрөгән малай килеп баҫа. Бәлки, бөгөнгө геройымдың бала сағы ла, башҡа тиҫтерҙәренеке кеүек, шулай үткәндер, әммә оло тормош уға ҙур һынауҙарын әҙерләп торған.**



Бынан ярты быуат элек Әбйәлил районының Мәхмүт ауылында механизатор булып эшләгән Батыр менән фермала һыйыр һауған Фәрзәнә Насырйәновтар ғаиләһендә дүртенсе бала (унан һуң тағы өс туғаны тыуа) булып донъяға килә Бикбай. Мәктәптә белем алыу менән бер рәттән, ауыл балаһының елкәһенә төшкән көндәлек мәшәҡәттәрҙе һанап тормағанда, биографияһын ҡыҫҡаса бер нисә юлға һыйҙырырға була: ауылда башланғыс мәктәптә уҡый, артабан Әбделмәмбәт һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә, СПТУ-ла белем ала һәм, әлбиттә, Ватан алдындағы изге бурысын үтәп, хәрби хеҙмәттә була. Армия сафынан ҡайтып, Киров исемендәге колхозда механизатор булып эшләй башлай. Һөйгәне менән сәстәрен-сәскә бәйләп, ғаилә ҡороп ебәрә. Тиҙҙән инде улы менән ҡыҙы тыуа. Һөйгәнең менән ҡыуышта ла ожмах, тип, киләсәккә яңынан-яңы пландар ҡороп йәшәргә лә йәшәргә лә бит, әммә аяуһыҙ яҙмыш йәш ғаиләнең пландарын селпәрәмә килтерә - 29 йәшендә ул янған йөрәгенә ике балаһын баҫып, тол ҡала. Яңғыҙ бала үҫтереүҙең ауырлыҡтары яңғыҙ әсәләргә яҡшы таныштыр, әммә тол ирҙәр өсөн был икеләтә һынау, икеләтә ауыр. Әлбиттә, туғандар, яҡындар ярҙамынан ташламай, тик улар балаларға әсәйҙе бер ваҡытта ла алмаштыра алмай. Үҙе атай ҙа, әсәй ҙә булырға тура килә Бикбай Батыр улына. Ул ғына ла түгел, йәмәғәт эшмәкәрлегенә әүҙем ҡушылып китә: 1992-1995 йылдарҙа Башҡортостанда тәүгеләрҙән булып Әбйәлил районында "Аҡ тирәк" исемле Йәштәр ойошмаһы ойоштора. Колхоз-совхоз тарҡалғас, Себерҙә лә аҡса эшләп ҡайта. Вахта ысулы менән 9 йыл йөрөгәс, 2015 йылда Магнитогорск ҡалаһына иретеп йәбештереүсе булып урынлаша һәм бөгөнгәсә шунда эшләй.

Замандан артта ҡалмаҫҡа тырышып, заманса технологиялар менән дә ҡыҙыҡһына башлай һәм улы социаль селтәрҙәрҙә аккаунтын булдырып, нисек эшләргә өйрәткәс, тыуған ауылының төркөмөн һәм сайтын булдырып, ауылы менән таныштыра башлай. Үҙе сик буйы ғәскәрҙәренең диңгеҙ часында хеҙмәт иткәс һәм баҫҡынсыларҙы ил сигендә иң беренсе пограничниктар ҡаршы алыуы, әммә Бөйөк Еңеүгә арналған район парадында сик буйы ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итеүселәрҙең ҡатнашмауы тынғы бирмәй борсоғас, фекерҙәштәр табып, районда сик буйы ғәскәрҙәре ветерандарының ойошмаһын ойоштороп, уны республика ойошмаһына теркәтеп, "Сик буйы ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итеүселәр", "Диңгеҙселәр" төркөмдәрен аса.

Әйткәндәй, тыуған ауылының төркөмөн булдырып, ауыл өйҙәрен, кешеләрен барлап сыға һәм 207 өйҙөң ни бары 93-өндә генә парлы ғаиләләр йәшәүен, 83-өндә - яңғыҙаҡтар булыуын, башҡа йорттарҙың бөтөнләй буш тороуын асыҡлағас, "Танышайыҡ, ҡауышайыҡ, ғаилә ҡорайыҡ" төркөмөн булдырырға ҡарар итә. Һуңынан "Йылы усаҡ" димселек институтын асып ебәрә. Яңғыҙлыҡтың әсе һурпаһын үҙ иңендә татығанға ул яңғыҙҙарҙы таныштырып-ҡауыштырыуға ҙур көс һала. Башта ауылдаштарынан башлаһа, һуңынан ҡоласын киңерәк йәйеп, район, республика буйынса эш башлай: Әбйәлил, Күгәрсен, Баймаҡ, Бөрйән райондарында үҙенә теләктәштәр табып, бик ҙур таныштырыу саралары ойошторалар. 2019 йылда Өфөлә республика димселәренең беренсе конференцияһын үткәрә. Унда төрлө район-ҡалаларҙан 50 вәкил ҡатнаша. Башҡортостандың һәр районында, ауылында димсе кеүек бер вәкил булдырып, улар менән берҙәм эшләргә һәм мөмкин булғанса күберәк кешене ишле итергә тигән хыял менән яна ул. Ошо һәм башҡа идеялары менән былтыр республикала беренсе тапҡыр уҙған Ирҙәр ҡоронда ла бүлешә. "Ярҙам итербеҙ", тигән өмөтлө һүҙҙәр ишетеп ҡыуанып ҡайта, әммә вәғәҙәләрҙең күп осраҡта буш булыуын ваҡыт уҙғас ҡына аңлай: күпме тупһа тапамаһын, ысын күңелдән ярҙам ҡулы һуҙыусы булмай. Ләкин кешегә яҡшылыҡ ҡылыуы күңел талабына әйләнгән Бикбай, кемгәлер файҙа килтереүенә, шуның өсөн ихлас рәхмәт һүҙе ишетеүенә ҡыуанып, эшмәкәрлеген артабан дауам итә.

Бикбай Батыр улын бөгөн Бөтә Рәсәй "Үлемһеҙ полк"ының республика филиалын булдырып, ул ойошманың ирекмәне һәм эҙәрмәне булараҡ та беләләр. Был эшмәкәрлегенә Бөйөк Ватан һуғышында хәбәрһеҙ юғалған олатаһын эҙләүе сәбәпсе була. Һөҙөмтәлә уның ҡасан һәм ниндәй шарттарҙа вафат булыуы тураһында мәғлүмәт, ерләнгән урынынан фото ебәрәләр. Был хаҡта ишеткән таныштары үҙҙәренең дә һуғышта юғалған туғандарын табышып биреүҙе үтенә башлай. "Үлемһеҙ полк" ойошмаһына мөрәжәғәт итеп эҙләргә өйрәтә ундайҙарҙы Бикбай, улар өсөн ликбез үткәрә, компьютеры, интернеты булмаусылар йәки заман техникаһын бөтөнләй белмәүселәрҙең туғандарын үҙе эҙләй. Һөйрәгән атҡа өйәләр, тигәндәй, уның әүҙемлеген күреп, райондың Йәмәғәт палатаһына рәйес итеп һайлап ҡуялар.

...Изгелек ҡыл да һыуға һал - балыҡ күрер, балыҡ күрмәһә, халыҡ күрер, тип юҡҡа әйтмәгән халҡыбыҙ. Бөгөн күптәр интернет селтәрен ялтырауыҡлы үҙпиар өсөн ҡулланһа, төрлө социаль селтәрҙәрҙә "сторис"тарҙы көнөнә әллә нисәүҙе һалып, лайыҡтар йыйһа, шым ғына үҙ эшен күңел биреп, яратып һәм бушлай эшләүселәр ҙә юҡ түгел. Уларҙың күңелдәрендә ауыл ҡиммәттәре, ауыл тәрбиәһе йәшәй. Бөгөнгө геройыбыҙ кеүек ябай ауыл малайҙары, ябай ауыл ҡыҙҙары булып ҡала улар. Ә ябайлыҡта - бөйөклөк.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*СӘХИФӘНӘН*

# АСЫШ



**Мин бер асыш яһаным. Ҡапыл түгел. Йоҡоһоҙ төндәр, тынғыһыҙ көндәр аша килеп керҙе ул. Уйлап та килештерә алмаҫ инем, әгәр... шиғыр яҙмаһам. Эйе-эйе, тап шул көнө-төнө шиғырлы булып йөрөү халәтем этәргес булды.**

Был асышымдың нигеҙендә сағыштырыу ята. Урыҫтар әйтмешләй: "Все познается в сравнении". Иғтибар иткәнһегеҙҙер, мин хәҙер сәсмә әҫәрҙәр ҙә яҙам. Оҡшай. Ныҡ оҡшай. Ғөмүмән, мин прозаик булырға тейеш инем ул. Ысын. Күптән. Ҡәләмемде һуңлабыраҡ уятып, тормош мине шаяртты тип иҫәпләйем. Йә, ярай, уныһы бөтөнләй икенсе тема. Асыш тинемме? Иҫкәртеп ҡуям: был минең асыш. Тимәк, үҙем өсөн. Шулай булғас, һеҙҙең фекерегеҙ минеке менән тап килмәүе лә бик мөмкин. Тап килһә иһә - донъям түп-түңәрәк була ла ҡуя!

Асыш, тигәнем, былайыраҡ: шағирҙарға һәм прозаиктарға ике төрлө Илһам йөрөй. Йәки бер Илһам ике төрлө булып килә. Шағирҙарға килгән Илһам елбәҙәк, хыялый һәм ялҡауыраҡ. Ниңәме? Ә бына ниңә:

- Көнө буйы йоҡлап ятып, төн уртаһында килеп инә (күбеһенсә).

- Бер-ике һүҙ, фекер йә образ тоттора ла, юҡ була. Йоҡо осамы, мейе геүләп эшләй башлаймы - унда уның бер ҡайғыһы юҡ.

- Нисә көн яҙыла бер шиғыр, яҙыламы ул, ғөмүмән, юҡмы - килеп хәлде лә белмәй. Мин һине һайланым, килдем, тотторҙом, ҡалғаны һинән, йәнәһе лә.

Прозаға күсәйек. Ооо! Бындағы Илһам тәртип ярата. Ул - олпат. Төндә йөрөмәй ул. Ҡапылғараны ла яратмай (һәр хәлдә, миңә килгәне). Ул үҙ баһаһын белеп кенә, ҡабат-ҡабат һоратып ҡына килә. Килеүен килһә, талабы көслө инде. Көн һайын үҙенде өҫтәл артына етәкләп алып барып ултыртып, күңелен күрергә тейешһең. Унынса булмаһа, үпкәләп юғала торған холҡо ла бар. Ул тотторғанды теүәл генә итеп төшөрөп барыр кәрәк аҡ ҡағыҙға. Оҙаҡҡа һуҙмай. Ә шиғыр Илһамы, әйткәнемсә, биргәнен кире алмай.

Бына шул инде беренсе асышым. Ә һығымта былай:

Шиғыр Илһамы - өйөрмә, прозаныҡы - талғын ел. Шиғыр Илһамы - йәшенле ямғыр, прозаныҡы - ләйсән ямғыр. Шиғыр илһамы - оҙайлы тулғаҡ һәм ҡапыл бушаныу, прозаныҡы - ҡыҫҡа тулғаҡ һәм оҙайлы бушаныу.

Мин ике Илһам тинемме? Юҡтыр, ахырыһы. Берәүҙер. Бер йәйғорҙоң ете төҫө һымаҡ. Ҡайһы нурын, нисә нурын күреп ҡалаһың, шуны һурып алаһың. Халәтеңә ҡарап. Һәләтеңә ҡарап.

**Наилә ХӘМБӘЛИЕВА.**

*ЯҘЫУСЫ ЯҘМАЛАРЫ*



# АСМАН

Китап уҡып ултырған ҡыҙым һорай ҡуйҙы:

- Асман нимә ул, атай?

- Асманмы? Асман - ул болоттарҙан юғары бейеклек. Күк көмбәҙе.

Шағирҙар араһында ғына ҡулланылыш тапҡан әлеге һүҙҙең айышын үҙемсә шулай төшөндөргән булдым һәм ҡәнәғәт ҡалдым.

Иртә яҙҙың еүеш, томанлы көнө. Балалар менән беҙҙең тирәлә иң бейек һаналған Оло Сусаҡ тауына киттек. Ошо мәлдә унда тәмле бүрекбаш менән шифалы йыуа күп була. Йәнә лә, яҙғы тәбиғәткә сығып урауы үҙе бер кинәнес.

Бейек тауға уралып, ҡуйы-ялбыр болоттоман тора. Йәбешеп ятҡан томан аша тауҙың түбәһе лә күренмәй. Бер аҙ күтәрелгәс кенә, кинәт ҡояш йылмайып ебәрҙе. Болоттар күтәрелеп етә алмаған тау түбәһендә салт аяҙ икән! Үәт мөғжизә!

- Атай, ошо буламы инде асман?

Ҡыҙым үткәндәге һорауын онотмаған икән. Мин ҡапылғара ни тип яуап бирергә белмәнем. Бер аҙ уйланып торғандан һуң:

- Балалар, - тинем, - был асмандың тәүге баҫҡысы ғына. Ә уның үҙенә етеү өсөн беләһегеҙме күпме тырышлыҡ, күпме ныҡышмалылыҡ кәрәк? Һеҙҙең алда асман тип аталған үрҙең бәләкәй генәһе. Ана, ҡыйғас болоттар өҫтөндә - бейегерәге. Унан да юғарыраҡта, йыһан киңлектәрендәге йондоҙҙар араһында асмандың иң олоһо. Хәйер, ҙур үҫкәс үҙегеҙ аңларһығыҙ. Шул асмандарға ашырға яҙһын һеҙгә, балаларым!

# АҠСӘСКӘЛЕ АҠЛАН

Аҡсәскәле аҡлан. Матур, түңәрәк аҡлан. Ғашиҡтар аҡланы. "Ярата, яратмай, ярата..." - ҡыҙ бала яҙмыш юрай. Уға егет ҡушыла: "Ярата, яратмай, ярата..." Эскерһеҙ ике йән бер-беренә тартыла. "Ярата, яратмай, ярата..." Өҙөлгән селт-аҡ таждар берәм-берәм елгә оса. Аҡсәскә икеһенә лә берҙәй мөхәббәт, һөйөү вәғәҙә итә. Сәскәм кеүек бәхетегеҙ аҡ, күңелдәрегеҙ пак була күрһен, ти.

Йәмле мәлдәр етеп, аҡсәскә аҡланды ҡаплап алғанда, йыл һайын ошолай ҡабатлана. Тик аҡсәскәләр менән ғашиҡтар ғына алмашына тора. Ҡыуарған сәскәләр урынына яңылары ҡалҡып сыҡһа, ҡауышҡан ғашиҡтар урынына икенселәре килә. Аҡсәскәләр мөхәббәтле тормошта ырыҫ вәғәҙә итә, өмөт уята. Аҡсәскәләр бәхет өҫтәй, һөйөү хистәрен көсәйтә. Аҡсәскәләр киләсәккә ышанысты арттыра.

Аҡсәскәле аҡланда йөрәктәр ҡауыша. Тормош дауам итә. Тормош мәңгелек!

# КЕМГӘ ЫШАНЫРҒА?

Гүзәл май айы етеү менән туғай сағыуһары сәскә менән ҡапланды. Гүйә талғын елгә тулҡынланып ятҡан һары диңгеҙ!

- Быйыл һары сәскә күп, йылдың рәте булмаҫ, ахыры, - тип уфтанды бер белемсе.

Аҙна-ун көн үтеүгә шул уҡ туғайҙы күгәрсен күҙе баҫып алды. Хәҙер ул диңгеҙҙең зәп-зәңгәренә оҡшап ята.

- Күк сәскә күп быйыл, йыл уңышлы булмаҡсы, - тип ҡыуана белемселәрҙең икенсеһе. Кемгә ышанырға?

**Иҙрис НОҒОМАНОВ.**

✓ "Ылаҡ" уйынының финалына Баймаҡ һәм Ҡаҙағстан командаһы сыҡты. Финал уйын бик көсөргәнешле һәм сәмле барҙы. Бер команда ла еңеүҙе ҡулынан ысҡындырырға теләмәне. Шулай ҙа Ҡаҙағстан командаһы алдырҙы.



ИНТЕРНЕТТАН



# ДӨРӨҪ ТУҠЛАН!

■ Һиндостан диетологтары онкология сирҙәрен иҫкәртеү өсөн ун ҡағиҙә тәҡдим итә. Уларҙың фекере буйынса, иң мөһиме, дөрөҫ туҡланыу: сәләмәт туҡланыу иммунитетты нығыта һәм яман шеш барлыҡҡа килеү хәүефен түбәнәйтә. Балалар арҙырылмаған ярмалар менән йышыраҡ туҡланырға тейеш. Рационда емеш-еләк, йәшелсә һәм ярмалар күберәк булһын. Итте аҙыраҡ ашарға кәрәк. Ризыҡты быуҙа бешереү яҡшыраҡ. Аш һеңдереү процесын тиҙләтеүсе тәмләткестәр (имбир, һарымһаҡ, карри, розмарин) ҡулланығыҙ. Алкоголле эсемлектәрҙән баш тартығыҙ. Был туҡланыуға ҡағылған кәңәштәр. Бынан тыш, ғалимдар ауырлыҡты контролдә тоторға, спорт менән шөғөлләнергә, стресҡа ҡаршы көрәшергә һәм даими рәүештә табиптарға күренеп торорға саҡыра.

■ Бехтерев исемендәге Кеше мейеһе институтының неврология үҙәге хеҙмәткәрҙәре йылы көндәр менән хушлашыуҙы һәм һыуыҡтар төшөүҙән нисек ҡабул итергә өйрәтә. Үҙәктең етәксеһе, профессор Леонид Чутко иҫкәртеүе буйынса, көҙ миҙгеле - ул нервы-психик төшөнкөлөк осоро ла. Кешеләр был ваҡытта бушҡа ғына көйәләнеп китеүе ихтимал. "Әгәр ҙә һеҙгә йәмәғәт транспортында, магазинда юҡҡа ғына ҡысҡыралар, йәки тәртәп ебәрәләр икән, быға иғтибар итмәҫкә тырышығыҙ, - ти психологтар. - Һеҙҙе рәнйеткән ваҡиғаны тиҙерәк онотоу өсөн уйҙа ғына ҡулығыҙҙы йылы һыуға тығығыҙ". Бынан тыш, үҙенде ҡулда тотоу өсөн башҡа ысулдар ҙа бар, ти Леонид Чутко: "Өс F ҡағиҙәһе бар. Ул ризыҡ (food) - ваҡытында туҡланырға, үҙеңә оҡшаған ризыҡты йышыраҡ ашарға. Икенсеһе - хәрәкәт (feed) - физкультура менән шөғөлләнеү, бассейнға, спортзалға йөрөү. Өсөнсөһө - алыш (fight), йәғни, сағыу эмоциялар. Тормошта ниләгәләр өлгәшеү, нимәнелер еңеү өсөн маҡсат гел кәрәк".

■ Ҡыйынлыҡтарға ҡаршы көрәшә белеү, уларға бирешеп бармау гендарҙан килә, ти Нотр-Дам университеты (АҠШ) тикшереүселәре. Донъяны ҡабул итеү үҙенсәлеге һәм психофизик конституцияһының ниндәй булыуына ҡарап, кеше стрестарға йә бөтөнләй бирешмәй, йә, киреһенсә, ауыр үткәрә. Бына шуның өсөн дә эш урынында ла бер үк ваҡиғаны төрлө кеше төрлөсә ҡабул итә икән. Әгәр ҙә һәр урында ла артыҡ көсөргәнеш тояһығыҙ икән, тимәк, һеҙ беренсе төркөмгә ҡарайһығыҙ. Шуға ла бындай кешеләргә эш урынын йыш алыштырыу ярҙам итмәйәсәк, сөнки яңы эштә лә ошо уҡ хәл ҡабатланасаҡ.

■ А витамины - киң билдәле антиоксидант. Аҙыҡ менән был витаминды япраҡлы йәшелсәләрҙән, кишерҙән алабыҙ. Организм был витаминды бета-каротинга әүерелдерә, ул иһә сәләмәтлекте һаҡларға ярҙам итә. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бета-каротинға бай ризыҡ ашаусы тәмәкеселәр яман шеш менән һирәгерәк сирләй.

■ Британия һаулыҡ һаҡлау комитеты белгестәре бета-каротин нигеҙендә онкологик сирҙәргә ҡаршы көрәшәсәк өҫтәмә яһап ҡараған. Тәжрибәлә тәмәке тартыусы 15 мең кеше ҡатнашҡан. Улар даими рәүештә бета-каротин дозаһы алған. Һигеҙ йылдан һуңғы тәжрибә күрһәтеүенсә, түүҙә һөҙөмтәләр яҡшы булған. Әммә аҙаҡтан асыҡланыуынса, таблеткалағы синтезланған бета-каротин организмға тәбиғи витамин кеүек тәьҫир итмәй икән. Шуға ла белгестәр таблеткаларға артыҡ ышанмаҫҡа кәңәш итә.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# АТҺЫҘ КЕШЕ - ЗАТҺЫҘ КЕШЕ,

## йәғни "Башҡорт аты" фестивале ошо хәҡиҡәтте иҫкә төшөрҙө

(Башы 1-се биттә).

**Шулай итеп, июлдең һуңғы шәмбе-йәкшәмбеһендә Баймаҡ районындағы Граф күле эргәһендә "Башҡорт аты" республика фестивале уҙҙы. Был тарихи көндө тотош республика халҡы түҙемһеҙлек, ҙур ҡыҙыҡһыныу менән һәм күптән көткәйне. Сөнки бындай киңлектәге фестиваль Рәсәйҙең бер генә төбәгендә лә үткәне юҡ. Был рухлы сара Башҡортостан Республикаһы Башлығы Указына ярашлы ойошторолдо. Ошондай документ бар икән, тимәк, ул байрам бынан ары даими уҙғарыласаҡ, тип өмөт итәйек тә... оло ваҡиғала ҡатнашҡан ҡунаҡтарҙы барлайыҡ. Унда, әлбиттә, Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров үҙе килде. Мәртәбәле ҡунаҡтар араһында Ҡалмыҡстан Башлығы Бату Хасиков һәм РФ Дәүләт Думаһы депутаты, журналист, билдәле йәмәғәт эшмәкәре Тимофей Баженовтың булыуы "Башҡорт аты" фестиваленең баһаһын тағы ла юғарыраҡ күтәрҙе. Оло сараны ойоштороусылар - Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте, Мәҙәниәт, Ауыл хужалығы, Спорт министрлыҡтары, Баймаҡ районы хакимиәте, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы шулай уҡ Ҡаҙағстан, Тажикстан, Дағстан, Ҡалмыҡ, Ҡабарҙы-Балҡар, Саха (Яҡут), Татарстан республикаларынан, күрше Силәбе, Пермь, Ырымбур, Рязань өлкәләренән, Мәскәү ҡалаһынан килгән ҡунаҡтарҙы тәбрикләне һәм уларҙың Баймаҡ ерендәге ике көнөн онотолмаҫлыҡ хәтирәләр менән байытты.**

### Ат спорты ярыштары

Фестиваль программаһында төрлө ат спорты ярыштары, "Ылаҡ", "Ауҙарыш", "Бәйге", "Мәргән уҡсы" уйындары ойошторолдо, ҡымыҙ етештереүселәр, ат егеү кәрәк-ярағы эшләүселәр конкурсы үтте. Был ярыштар "Башҡорт аты" фестиваленең беренсе көнөндә башланды. Барыһы ла яратып һәм сәмләнеп ҡараған "Ылаҡ" уйыны буйынса ярышҡа беренсе булып баймаҡтар һәм әбйәлилдәр сыҡты. Республикала "Ылаҡ" уйынын беренсе булып тергеҙгән Баймаҡ командаһы был юлы ла еңеүҙе ҡулынан ысҡындырманы, әбйәлилдәрҙе 5:0 иҫәбе менән еңде. Ҡырғыҙстан һәм Ҡаҙағстан командаларының сәмле уйынын ҡарауы бигерәк ҡыҙыҡ булды. Егеттәрҙең һайтһайтлап, атта елдәй елеп таһыллыҡ күрһәтеүе барыһын да хайран ҡалдырҙы. Ҡаҙаҡтар ҡырғыҙҙарҙы 5:0 иҫәбе менән еңде. "Ылаҡ" уйынының финалына Баймаҡ һәм Ҡаҙағстан командаһы сыҡты. Финал уйын бик көсөргәнешле һәм сәмле барҙы. Бер команда ла еңеүҙе ҡулынан ысҡындырырға теләмәне. Шулай ҙа Ҡаҙағстан командаһы алдырҙы, ә баймаҡтар икенсе урынға сыҡты.

### Ҡайһы ат шәберәк?

"Ылаҡ" уйынында еңеү яулаған, таһыллыҡ өлгәһе күрһәткән ҡаҙаҡ егеттәре, әлбиттә, күптәрҙең иғтибарын йәлеп итте. Ә мине бер һорау ҡыҙыҡһындырҙы: улар башҡорт аттары турала ниндәй фекерҙә? Үҙҙәренең аттары тураһында ниҙәр әйтер? Был һорауҙы Ҡаҙағстан егете Колғанат Жубаниязовҡа йүнәлттем. Әйткәндәй, ул русса бөтөнләй һөйләшмәй. Үҙ-ара башҡортса һәм ҡаҙаҡса һөйләшеп, бер-беребеҙҙе бик яҡшы аңланыҡ. "Беҙҙә адай һәм джабе тоҡомло аттар таралған. Уларҙың тәүгеһе һыбай сабырға, ярыштарҙа ҡатнаштырырға шәп. Джабелар иһә ит һәм һөт-ҡымыҙ өсөн тотола. Улар менге ярыштарына бармай. Уның ҡарауы, ашауға талымһыҙ, бөтә шарттарға ла яраҡлаша алалар. Башҡорт тоҡомло аттарға бик тә һоҡланабыҙ. Сөнки улар бөтә шарттарға ла тиҙ яраҡлаша. Өҫтәүенә, бик етеҙҙәр һәм шәптәр. Башҡорт айғырҙары тураһында беҙҙең ҡаҙаҡ далаларында легендалар йөрөй. Һеҙҙең республика Башлығы Радий Хәбировтың нәҡ башҡорт атына бағышланған сара үткәреүе оло маҡтау һәм хуплауға лайыҡ. Сөнки һәр милләт ҡото һәм тарихы булған аттарының тоҡомон һаҡлауға һәм үҫтереүгә көс һалырға тейеш. Был йәһәттән башҡорттар маҡтауға лайыҡ. Әгәр бындай фестивалдәр Башҡортостанда киләсәктә лә үткәрелһә, шәп буласаҡ. Беҙ мотлаҡ киләсәкбеҙ", - тине Колғанат. "Шулай ҙа ҡайһы аттар шәберәк - башҡорт тоҡомломо, әллә ҡаҙаҡтарҙыҡымы?" - тип ныҡышыуыма Колғанат йылмайып: "Икеһе лә шәп. Әлбиттә, беҙ үҙебеҙҙекеләргә өйрәнгәнбеҙ. Шулай ҙа башҡорт һәм ҡаҙаҡ элек-электән бер-береһенә алыш-биреш итә. Боронғо замандарҙа бер-береһенең өйөр-өйөр аттарын да ҡыуып алып киткән, һылыу ҡыҙҙарын да урлаған. Был осраҡлы түгел бит", - тине йылмайып. Килешәһегеҙҙер, был яуап барыбер ҙә башҡорт аттарының шәберәк булыуына ишара булды бит...

### Уҡ-һаҙаҡһыҙ башҡорт булмай!

Фестивалдә уҡ атыу буйынса "Мәргән уҡсы" төбәк-ара фестивале лә ойошторолдо. Был юлы бәйгелә йөҙгә яҡын уҡсы ҡатнашырға теләк белдергәйне. Башҡортостандан тыш, Ҡалмыҡстандан, Пермь, Силәбе, Әстрхан, Омск өлкәләренән, Мәскәү, Екатеринбург ҡалаларынан да уҡсылар булды. Уҡсылар беҙгә онотолмаҫлыҡ тамаша бүләк итте. Ярыш булғас, уның еңеүселәре лә мотлаҡ була. Шулай итеп, корейса һәм төрөксә атыуы буйынса ир-егеттәр араһында "Йәйәүле турнир" номинацияһында беренсе урынды Хөрмәт Таһиров алды (Сибай). Корейса атыуҙа ҡатын-ҡыҙҙар араһында беренсе урынды Лиана Ихсанова (Учалы районы), төрөксә атыуҙа иһә Әлиә Ишморатова (Бөрйән районы) яулаһы. Һыбай уҡ атыу ярышында "Башҡортостан маршруты" номинацияһында Баймаҡ районынан Рәсих Йортбәковка тиңләшеүсе булманы. "Рейд" маршрутында Белореттан Нуриман Хәйруллин иң мәргән уҡсы тип табылды. "Башня" маршрутында Әбйәлил районы вәкиле Рушан Хәсәнов еңеүсе булды. "Ҡырғыҙса сәп" номинацияһында беренсе урынға Баймаҡ районынан Тимур Өмөтбаев һәм Әбйәлил районынан Гүзәлиә Дәүләтова лайыҡ булды. "Корейса сәп" номинацияһында Бөрйән районынан Салауат Юлбирҙин һәм Белореттан Айгөл Ғәлиуллина еңеүгә өлгәште.



Республика Башлығы А.Шөғөровҡа теп призды тапшырҙы.

✔ ***Республика етәксеһе "Башҡорт аты" тәүге республика фестивален артабан даими уҙғарыу, республикала Башҡорт атының фәнни-тикшеренеү институтын булдырыу инициативаһы тураһында ла белдерҙе.***



## Башҡортостан һәм Ҡалмыҡстан

"Башҡорт аты" республика фестивале майҙансығында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәм Ҡалмыҡстан Башлығы Бату Хасиков башҡорт тоҡомло аттарҙы һаҡлау һәм үстереү мәсьәләләре буйынса "Түңәрәк ҡор"ҙа ҡатнашты. "Беҙҙең республикала күп энтузиастар башҡорт тоҡомло аттарҙы һаҡлау маҡсатын ҡуя, был һорау буйынса борсолоуҙарын белдерә. Бөгөн беҙ башҡорт атын һаҡлау буйынса комплекслы программа булдырыу йөһәтенән тәүге мөһим аҙымдарыбыҙҙы яһайбыҙ, был шулай уҡ Башҡортостан һәм илебеҙҙең башҡа төбәктәренә хас булған йылҡысылыҡ йолаларына ла ҡағыла. Әлбиттә, беҙ бөгөн заманса йәмғиәттә аттың роле тураһында һөйләргә тейешбеҙ. Йылҡысылыҡ, элеккесә, иҡтисад, социаль өлкә, тарих һәм мәҙәниәттә ҙур әһәмиәткә эйә. Был беҙҙең быуын һәм ата-бабаларыбыҙ араһындағы күпер ул", - тине Радий Хәбиров. Республика етәксеһе был эште атҡарыуҙа фәнни ҡараш булдырыу, эксперттар һәм ғалимдарҙың күпләп ҡатнашыу мөһимлеген дә билдәләне. "Башҡорт аты" тәүге республика фестивален артабан даими уҙғарыу, республикала Башҡорт атының фәнни-тикшеренеү институтын булдырыу инициативаһы тураһында ла белдерҙе: "Уны Фәндәр академияһы йәки донъя кимәлендәге Евразия фәнни-белем береү үҙәге системаһына интеграцияларға мөмкин. Яңы учреждениеға тейешле финанс ярҙамы күрһәтергә әҙербеҙ. Был институттың башҡорт тоҡомло атты һаҡлау, уның үҫеү тенденцияһын өйрәнеү, йылҡысылыҡ тармағы эше, ҡымыҙ менән дауаланыу, ҡымыҙ етештереү менән шөғөлләнеүе кәҙаллана", - тине Радий Фәрит улы һәм буласаҡ Башҡорт атының фәнни-тикшеренеү институтын Шишмә районында Евразия кҫсмә цивилизациялар музейы майҙансығында урынлаштырырға тәҡдим итте.

Ҡалмыҡстан Башлығы Бату Хасиков та Радий Хәбировтың фекерен хупланы: "Башҡорт аты" фестиваленең халыҡ-ара статус алыуын әле үк күрәбеҙ. Шуға ла уның традицион булыуына ла шик юҡ", - тине ул һәм Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировҡа ҡалмыҡ аты сертификатын тапшырҙы. "Беҙҙә уртаҡ тарих, дөйөм мәҙәни ҡиммәттәр бар, - тине Бату Хасиков. - Ике төбәк араһындағы дуҫлыҡ артабан да ныҡый барһын". Радий Хәбиров үҙ сиратында ҡалмыҡ коллегаһына башҡорт аты сертификатын һәм йүгән бүләк итте.


Бөрйән сергетышы - I урында.



## Тигеҙ сафта

Тамашасылар шулай уҡ Рәсәйҙә тәүге тапҡыр үткән ҙур ат парадына шаһит булды. Был фестивалдең иң сағыу өлөшө булғандыр, моғайын. Парадта Башҡортостан райондарынан ғына түгел, Ҡаҙағстан, Тажикстан, Дағстан, Ҡалмыҡ, Ҡабарҙы-Балҡар, Саха (Яҡут), Татарстан Республикаларынан, Силәбе, Рязань, Пермь, Ырымбур өлкәләренән, Мәскәү ҡалаһынан ҡатнашыусылар булды. Тигеҙ сафтарҙа Рәсәй һәм Башҡортостан, "Башҡорт аты" фестивале, "Төньяҡ амурҙары", Шайморатов һәм Доставалов исемендәге батальондарҙың флагтарын күтәреп килгән атлылар парады барыһын да һоҡландырҙы. Малҡайҙы яҡын дуҫы ла, яуҙашы ла итеп күргән башҡорттарҙы атһыҙ күҙ алдына килтереп тә булмай. Бөгөн дә йылҡы ауыл хужалығында, спорт ярыштарында ҡулланыла, ҡымыҙ яһау, ит етештереү өсөн файҙаланыла. Ә фестивалдәге был үҙенсәлекле парад йәнә бер тапҡыр башҡорт атының бар асылын һәм булмышын, үткәнен, хәҙергеһен һәм киләсәген бөтә илгә танытты.

Ниһайәт, иң тулҡынландырғыс мәл - "Оҙон бәйге" ат сабышының һөҙөмтәләре билдәләнде. Етеҙ һыбайлыларға бүләктәрҙе Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тапшырҙы. Төп приз Баймаҡта ҡалды. 14 саҡрымлыҡ урауҙа район фермеры Алмас Шөғөров һәм уның Турысай ҡушаматлы аты еңеү яуланы. Ул төп бүләккә - кубокка һәм "Лада Гранта" автомобиле сертификатына эйә булды.

## Милли ризыҡҡа ни етә!

"Баймаҡ аты" фестивале сиктәрендә үткән эшлекле "Түңәрәк ҡор"ҙа йылҡысылыҡ һәм тоҡомсолоҡ хужалыҡтары, генетика, селекция һәм аттарҙы тоҡомло үрсетеү өлкәһендәге ғилми берләшмә вәкилдәре ҡатнашты. Улар Башҡортостанда йылҡысылыҡ тармағын селекция һәм технологик яҡтан тәьмин итеүҙең мөһим мәсьәләләре, был өлкәлә эшмәкәрлектең төп йүнәлештәре, проблемалары, шулай уҡ башҡорт аты тоҡомон камиллаштырыу юлдары тураһында фекер алышты. Ҡатнашыусылар шулай уҡ Башҡортостандың ауыл хужалығы етештереүселәре һәм фермерҙарының аҙыҡ-түлек һәм эшкәртеү сәнәғәте продукцияһы, башҡорт ҡымыҙының төрлө өлгөләре тәҡдим ителгән күргәҙмә менән танышты. Ошонда уҡ йылҡысылыҡ һәм башҡорт тоҡомло аттар үҫтереүгә ҙур өлөш индергән бер төркөм хеҙмәт алдынғылары Рәхмәт хаттары менән бүләкләнде. Улар араһында Баймаҡ районы эшҡыуарҙары, иң тәмле ҡымыҙ етештереүселәр - Денис Өмөтбаев, Фәнис Кәримов, Рафаэль Сырлыбаев һәм башҡалар булды. Радий Хәбиров фермерҙарға, аҙыҡ-түлек сәнәғәте предприятиеларына республикалағы дәүләт ярҙамы саралары менән әүҙемерәк файҙаланырға кәңәш бирҙе.

Әйткәндәй, фестиваль барышында республика ҡымыҙ бешеүселәр конкурсы ла үткәрелде. Был ярыш Башҡортостанда даими ойоштороло һәм ҡымыҙ яһауҙы һөнәрен популярлаштырыу, милли эсемлек етештереү технологияһы буйынса алдынғы тәжрибә менән уртаҡлашыу маҡсаттарын күҙ уңында тота. Абруйлы жюри хөкөмөнә республикабыҙҙың төрлө төбәктәрендә етештерелгән ҡымыҙ тәҡдим ителде. Конкурста Учалы районынан "Юлдаш" йылҡысылыҡ ауыл хужалығының ҡымыҙы иң яҡшыһы тип табылды. Икенсе урынды Әлшәй районынан Айрат Ғәниевтың фермер хужалығы яуланы. Баймаҡ районынан Илнур Биктимеровтың крәстиән-фермер хужалығы өсөнсө урынға лайыҡ булды. Йылайыр фермеры Марат Абдулов конкурстың иң тәжрибәле ҡатнашыусыһы тип билдәләнде.

## Оҫталар ҡулынан һөнөр

Этник тематикаға арналған, төрлө күргәҙмәләр урынлаштырылған, оҫталыҡ дәрестәре үткәрелгән ҙур майҙансыҡ эргәһенән дә халыҡ өҙөлмәне. Бында ҡатнашыусы художество кәсептәре оҫтаханалары, ат егеү кәрәк-ярағы эшләү менән шөғөлләнгән оҫталар, һөнәрселәр араһында конкурс уҙғарылды. Ижади ярыш "Иң яҡшы ҡайыштан сбруй яһау оҫтаһы", "Ат өҫтөнә ябыу өсөн сергетыш оҫтаһы", "Бәйге"лә иң яҡшыһы" номинацияларында уҙы. Конкурста ҡатнашыусыларҙың береһе - Баймаҡ районы Икенсе Этколдан Рәмил Әлмөхәмәтовтың ат еккеһе кәрәк-яраҡтары, кырандас, кашауай саналары баһалама комиссияһы тарафынан юғары баһаланды. "Ат өҫтөнә ябыу өсөн сергетыш оҫтаһы" конкурсында Бөрйән районы ағинәйҙәренең "Кәрәҙ" ҡорама клубы, ә "Иң яҡшы ҡайыштан сбруй яһау оҫтаһы" номинацияһында Учалы районынан Кәрим Мостафин һәм Фәсхетдиновтар ғаиләһе еңеү яуланы. "Һунарсылыҡ һәм хәрби кәрәк-яраҡтары" номинацияһында Өфө ҡалаһынан килгән "Мосафир" оҫтаханаһы иң шәбе булып сыҡты. Баймаҡ районы ағинәйҙәре лә иҫ китмәле ҡул эштәре, сергетыштар, башҡа милли биҙәүестәр менән барыһын да хайран ҡалдырҙы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Фестиваль мәҙәни яҡтан да тәрән йөкмәткеле программа менән байытылғайны. Тамашасылар күңелдәрҙә оҙаҡ сыңлаясаҡ дәртле моң-көйгә сорналды. Был йәһәттән Баймаҡ районы һәм республикабыҙ мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренә иң оло маҡтау һүҙҙәрен еткерге килә. Ике көн дауамында барған "Башҡорт аты" фестивале милләтебеҙ, төбәгебеҙ, илебеҙ тарихында үҙенең ныҡлы эҙен ҡалдырасаҡ әле. Тағы шуныһы ҡыуаныслы: сарала башҡорт аттарын һаҡлаясаҡ, данлаясаҡ ҡарарҙар, килешеүҙәр ҡабул ителде. Тимәк, "Башҡорт аты" фестивале үҙенең яҡты киләсәгенә юл ярҙы. Ә был милләтебеҙҙең дә, уның ҡото булған тоҡом аттарының да, милли мәҙәниәтебеҙҙең дә, рухыбыҙҙың да үҫеше хаҡында һөйләй.**

Гүзәл СӘЛИХОВА.

## УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

### Күҙәнәктәрең менән таныш

Аң һәм тәндең үҙ-ара мөнәсәбәте ярҙамында сәләмәтлекте яҡшыртыу объекты булған бер нисә йүнәлеш бар: аш эшкәртеүҙе яҡшыртыу; ҡан баҫымын түбәнәйтеү; холестерин күләмен кәметеү; ауыртыныуҙы еңеләйтеү; баш ауыртыуынан арыныу; стрестарҙан арыныу; ауырлыҡты кәметеү; фобияларҙан арыныу; һауығыуҙы тиҙләтеү; тәмәке тартыуҙы ташлау.

Һеҙгә дуҫығыҙ менән нисек һөйләшергә кәрәк икәнен аңлатыу мотлаҡ түгел. Тәнегеҙ һәм уның участкалары менән дә тап шулай һөйләшергә кәрәк. Уйлап ҡараһаң, улар, ысынлап та, һеҙҙең иң яҡын дуҫтарығыҙ. Әйткәндәй, аңдың һәм тәндең үҙ-ара мөнәсәбәтенән тәүге тәьҫорат алырға ярҙам иткән бер ысул бар. Ни өсөн беҙгә организмыбыҙҙың һәр күҙәнәгенә визит яһап, улар менән танышмаҫҡа? Уны "Фантастик сәйәхәт" тип атайыҡ.

Был процедураның яңы элементтары ҡатмарлы булып күренәсәк, ысынбарлыҡта иһә улар тән тәҙәләшөн сәйәхәтсенең көндәлеге рәүешендә яҙып бара. Был яҙмаларҙан мәғәнә табығыҙ, кәрәк икән, уларҙы иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

**Күҙәнәктәрегеҙ менән танышыу өсөн күнекмә**

- Яҡшылап ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, тәрән итеп өс тапҡыр тын алығыҙ һәм сәсегеҙҙең тамырҙарын күҙаллағыҙ.
- Үҙегеҙҙе бәләкәй генә итеп күҙ алдына килтерегеҙ һәм сәсегеҙ буйлап, баш һөйәге тиреһенә үтеп инәм икән тип күҙ алдына килтерегеҙ.
- Тире аҫтында сәс урманын ҡарағыҙ.
- Сәстәрегеҙгә температураның тирбәлеүенән һаҡлағаны, баш тирегеҙгә мөғжизәле эше өсөн рәхмәт әйтегеҙ һәм унан ошо рәхмәтте тотош тәнегеҙгә ебәреүен һорағыҙ.
- Баш һөйәгегеҙгә, мейегеҙҙе һаҡлаған өсөн, рәхмәт әйтегеҙ. Был рәхмәтте тәндәге барлыҡ һөйәктәргә тапшырыуын һорағыҙ.
- Тағы ла түбәнгәрәк төшөп, мейегеҙгә уның шундай ҡеүәтле компьютер булғаны өсөн рәхмәт әйтегеҙ.
- Түбәнгә төшөүегеҙҙе дауам итеп, күҙҙәрегеҙгә, танауығыҙға, ауыҙығыҙға һәм тештәрегеҙгә үҙ бурыстарын матур итеп башҡарғаны өсөн рәхмәт әйтегеҙ.
- Тамағығыҙға, һуңынан ашҡаҙаныгыҙға - телләнә ниндәй аҙыҡты ла эшкәртә алған һоҡланғыс химик лабораторияға рәхмәт әйтегеҙ. Йыуан һәм нәҙек эсәктәргә күсегеҙ.
- Тура эсәккә, бөйөрҙәргә, бәүел ҡыуығына рәхмәт әйтегеҙ.
- Түл йыйыусы енес ағзаларына рәхмәт әйтегеҙ.
- Ҡан тамырҙарына инеп, уның буйлап йөрөгөҙ, веналарға, артерияларға, аҡ һәм ҡыҙыл тәнсәләргә рәхмәт әйтегеҙ.
- Йөрәк тирәһендә туҡтағыҙ. Уға көнө-төнө насос станцияһы ролен башҡарғаны өсөн рәхмәт әйтегеҙ. Ҡан тамырҙарына, артабан үпкәгә күсегеҙ. Уларға рәхмәт әйтегеҙ.
- Ҡабат ҡан тамырҙарына инеп, сәйәхәттең башланған урынына - баш һөйәгенә, сәс тамырҙарына юлланығыҙ. Уйығыҙҙа ғына барлыҡ күҙәнәктәрегеҙгә изгелек оҙатығыҙ.
- Бер сәс буйлап үрләгеҙ, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм ысынбарлыҡҡа ҡайтығыҙ.

Алда торған маршрутты яҡшы итеп күҙаллаһағыҙ, яҙмаларҙы ситкә алып тороп, күнекмәне ҡабатлағыҙ. Кемдеңдер уны һеҙгә ҡысҡырып уҡып тороуы ла мөмкин.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



**8 АВГУСТА**
**ПОНЕДЕЛЬНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "Грозный". [16+]
2.00 Т/с "Королева бандитов-2". [12+]
4.05 Т/с "Женщины на грани". [16+]
4.58 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Серебряный бор". [12+]
11.00 Новости недели (на рус.яз).
11.45 Специальный репортаж. [12+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.15 "Орнамент". [6+]
14.30 "Бай". [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Т/с "Бирешмә". [12+]
15.45 "МузКәрәҙ". [6+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
17.30 История одного села. [12+]
17.45 "Орнамент". [6+]
18.00 Пофутболим? [12+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Күстәнәс. [12+]
19.30 Автограф. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәнгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 "Елкән". [6+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Спортивная история. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Х/ф "Привет, Джули!" [16+]
1.15 Бәхетнамә. [12+]
2.00 Спектакль "Кьоджинские перепалки". [12+]
4.15 Күстәнәс. [12+]
4.45 Честно говоря. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

**9 АВГУСТА**
**ВТОРНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.45 Ленинградская симфония на берегу Невы. К 80-летию исполнения в блокадном городе.
1.15 Д/ф "Седьмая симфония". [12+]
2.05 Т/с "Королева бандитов-2". [12+]
4.05 Т/с "Женщины на грани". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Серебряный бор". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.15 "Орнамент". [6+]
14.30 Хазина. [0+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Т/с "Бирешмә". [12+]
15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
17.30 "Дорога к храму". [0+]
18.00 "Криминальный спектр". [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Башкорт аты. Репортаж с первого республиканского фестиваля лошадей башкирской породы. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәнгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 Нык бул. [6+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 "Это моя профессия". [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Х/ф "Год в порту". [16+]
1.15 Бәхетнамә. [12+]
2.00 Спектакль "Моя звезда". [12+]
4.45 Әлләсе... [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

**10 АВГУСТА**
**СРЕДА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "Грозный". [16+]
1.00 Т/с "Королева бандитов-2". [12+]
3.00 Т/с "Женщины на грани". [16+]
4.36 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Бирешмә". [12+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.15 "Орнамент". [6+]
14.30 Тормош. [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Т/с "Бирешмә". [12+]
15.45 "Сулпылар". [6+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Бирешмә". [12+]
17.30 Спортивная история. [12+]
18.00 Дорожный патруль. [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
18.55 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо" (Москва). Кубок РБ.
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Историческая среда. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Х/ф "Сокровище Пиратской бухты". [12+]
1.15 Бәхетнамә. [12+]
2.00 Спектакль "Стреноженный табун". [12+]
3.30 Автограф. [12+]
4.00 Х/ф "Сокровище Пиратской бухты". [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]
5.00 Утро России.

**11 АВГУСТА**
**ЧЕТВЕРГ**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "Грозный". [16+]
1.00 Т/с "Королева бандитов-2". [12+]
3.00 Т/с "Женщины на грани". [16+]
4.36 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Бирешмә". [12+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 "Честно говоря". [12+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.15 "Орнамент". [6+]
14.30 "Это моя профессия". [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Т/с "Бирешмә". [12+]
15.45 "МузКәрәҙ". [6+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Бирешмә". [12+]
17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]
18.00 "Криминальный спектр". [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
18.55 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Локомотив" (Ярославль). Кубок РБ.
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Х/ф "Вне времени". [16+]
1.30 Бәхетнамә. [12+]
2.15 Спектакль "Похищение стариков". [12+]
4.00 Башкорттар. [12+]
4.30 Колесо времени. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

**12 АВГУСТА**
**ПЯТНИЦА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
21.20 Х/ф "Пальма". [6+]
23.25 Х/ф "Лёд". [12+]
1.45 Х/ф "Незабудки". [12+]
4.58 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Бирешмә". [12+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 "Йома". [0+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 Республика LIVE #дома. [12+]
12.30 Историческая среда. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Автограф. [12+]
14.00 БашГост. [6+]
14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 "Алтын тирмә". [12+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Бирешмә". [12+]
17.30 "Аль-Фатиха". [12+]
18.00 Дорожный патруль. [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 "Башкорт йыры". [12+]
19.45 Специальный репортаж. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәнгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 "Йома". [0+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 БашГост. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Х/ф "Преданный садовник". [16+]
1.45 Спектакль "Пещера". [12+]
3.30 "Бай". [12+]
4.00 Автограф. [12+]
4.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
5.15 История одного села. [12+]
5.30 "Млечный путь". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

**13 АВГУСТА**
**СУББОТА**
**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Доктор Мясников". [12+]
12.35 Т/с "Королева красоты". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Наказание без преступления". [12+]
1.15 Х/ф "Сломанные судьбы". [12+]
5.06 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз).
8.15 "Аль-Фатиха". [0+]
8.45 "Орнамент". [6+]
9.00 "Это моя профессия". [12+]
9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]
10.00 "Елкән". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "КультУра". [6+]
11.00 "МузКәрәҙ". [6+]
11.30 Нык бул. [6+]
12.00 Күстәнәс. [12+]
12.30 Бәхетнамә. [12+]
13.00 Үткән гүмер. [12+]
13.30 Башкорттар. [6+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
16.55 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Северсталь" (Череповец). Кубок РБ.
19.30 Новости (на баш. яз).
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәнгелдәк". [0+]
20.30 "Байык" представляет... [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 "100 имен Башкортостана". [12+]
22.30 Новости недели (на баш. яз).
23.15 Х/ф "Меняющие реальность". [16+]
1.15 Новости недели (на баш. яз).
2.00 Спектакль"Карагул". [12+]
4.00 Х/ф "Меняющие реальность". [16+]
5.45 "Млечный путь". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

**14 АВГУСТА**
**ВОСКРЕСЕНЬЕ**
**РОССИЯ 1**

5.30, 2.20 Х/ф "Свадьбы не будет". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.30 "Доктор Мясников". [12+]
12.35 Т/с "Королева красоты". [12+]
18.00 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Д/ф "Как убивали Югославию. Тень Дейтона". [12+]
4.10 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 Специальный репортаж. [12+]
9.00 "Бай". [12+]
9.30 Тормош. [12+]
10.00 "Книга сказок". [0+]
10.15 "Городок АЮЯ". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "Сулпылар". [0+]
11.00 М/с "Нурбостан". [0+]
11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]
11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.00 "Дорога к храму". [0+]
15.30 Историческая среда. [12+]
16.00 Башкорт аты. Репортаж с первого республиканского фестиваля лошадей башкирской породы. [12+]
16.45 Концерт Алины Давлетхановой. [12+]
18.15 Спектакль "Караул, тещу украли!". [12+]
19.45 Дела и люди. [12+]
20.15 Әлләсе... [12+]
21.00 Республика LIVE #дома. [12+]
21.30 Новости недели (на рус.яз).
22.15 Специальный репортаж. [12+]
22.30 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Х/ф "Область тьмы". [16+]
1.00 Спектакль "Касатка". [12+]
3.00 Историческая среда. [12+]
3.30 Х/ф "Область тьмы". [16+]
5.15 "Млечный путь". [12+]
6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]
6.45 Специальный репортаж. [12+]

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Август (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 8 (10) дүшәмбе | 4:10 | 5:40 | 13:30 | 18:36 | 21:02 | 22:32 |
| 9 (11) шишәмбе | 4:11 | 5:41 | 13:30 | 18:34 | 20:59 | 22:29 |
| 10 (12) шаршамбы | 4:13 | 5:43 | 13:30 | 18:32 | 20:57 | 22:27 |
| 11 (13) кесе йома | 4:15 | 5:45 | 13:30 | 18:30 | 20:55 | 22:25 |
| 12 (14) йома | 4:17 | 5:47 | 13:30 | 18:28 | 20:53 | 22:23 |
| 13 (15) шәмбе | 4:19 | 5:49 | 13:30 | 18:26 | 20:51 | 22:21 |
| 14 (16) йәкшәмбе | 4:21 | 5:51 | 13:30 | 18:26 | 20:49 | 22:19 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ Мәскәүҙең "АПИ-САН" йәмғиәте бал ҡорттары өсөн етештергән "Ковитсан®" препаратының сифаты ҡуйылған талаптарға тура килмәй. Шулай уҡ "Ноземат ®" препараты ла талаптарға ярашлы түгел.

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# АВГУСТА ТЫУҒАНДАР




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**30-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Тамыр. Ярғанат. Йыуаш. Ҡайыш. Ҡамҡа. Малынды. Ҡанат. Шайба. Дошман. Ерлек. Сир. Балет. Йоҡо. Нужа. Мөгөҙ. Әҙәм. Нимб. Ихата. Артек. Империя. Айбалта.

**Вертикаль буйынса:** Ҡәрендәш. Ҡандала. Теркин. Яҡшы. Хазина. Шмидт. Туғай. Старт. Аптека. Уғы. Мәрйен. Иваси. Рәт. Яра. Ҡыш. Бомба. Аҡса. Бүре. Ара. Тиҙәк.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БАЛ ҠОРТОНА - ХӘҮЕФ

• Башҡортостандың Россельхознадзор белгестәре бал ҡорто һәм йәнлектәргә хәүеф янаған бер нисә ветеринария препаратттарын һатыуҙан алды. Мәҫәлән, Мәскәүҙең "АПИ-САН" йәмғиәте бал ҡорттары өсөн етештергән "Ковитсан®" (серия 08020322) препаратының сифаты ҡуйылған талаптарға тура килмәй. Шулай уҡ "Ноземат ®" (серия 09030322) препараты ла талаптарға ярашлы түгел. Йорт хайуандары һәм ҡоштары өсөн Испанияла етештерелгән "Мультивит"та ла (серия Р-004) етешһеҙлектәр асыҡланған.

• 30 июндә Рәсәйҙә 100 һумлыҡ яңы аҡса әйләнешкә индерелде. Унын дизайны яңы, 200 һумлыҡ купюра кеүек көсәйтелгән һаҡлағыс комплексы бар. Бер яғында - Мәскәү Кремлененң Спас башняһы, икенсе яғында Совет Һалдатына ҡуйылған Ржев мемориалы төшөрөлгән. Банкнота зәйтүн-ҡыҙғылт һары төҫтә, махсус QR-коды ла бар, унын аша Рәсәй банкының сайтына инергә мөмкин. Үҙәк банкта белдереүҙәренсә, яңы аҡсалар әйләнешкә яйлап индерелә.

• 1 августан "Азимут" авиакомпанияһы Өфөнән Волгоградҡа субсидияланған осоштар программаһын тергеҙҙе. "Рейстар аҙнаһына бер тапҡыр, дүшәмбе, Sukhoi Superjet 100 самолетында башҡарыла. Юлға 2 сәғәт 5 минут ваҡыт китә", - тип хәбәр иттеләр "Өфө" халыҡ-ара аэропортының матбуғат хеҙмәтенән. 23 июлдән "Икар" авиакомпанияһы Өфөнән Түбәнге Новгородҡа субсидияланған осоштар программаһын тергеҙҙе.

• Flydubai авиакомпанияһы 15 августан Өфөнән Дубайға рейстарҙы арттыра, тип хәбәр иттеләр "Өфө" халыҡ-ара аэропортының матбуғат хеҙмәтенән. Осоштар Boeing 737-800 самолеттарында аҙнаһына өс тапҡыр: дүшәмбе, шаршамбы һәм шәмбе көндәрендә башҡарыла.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



# ЛАВР ЯПРАҒЫ

Арҡа ауыртыу 80 процент осраҡта остеохондрозға бәйле. Был сир менән күптән яфаланһағыҙ, дарыухананан алған майға ҡарағанда лавр япрағынан үҙегеҙ эшләгән дарыу күпкә һөҙөмтәлерәк булыр. Бына бер нисә рецепт:

**Лавр япрағы майы.** 1 ҡалаҡ ваҡланған лавр япрағына 1 стакан зәйтүн майын һалып, 15 көн йылы урында тотоғоҙ. Аҙаҡ уны ауыртҡан урынға һөртөгөҙ ҙә, йылы итеп уранып ятығыҙ.

**Төнәтмә.** 1 ҡалаҡ ваҡланған лавр япрағын 1,5 стакан ҡайнар һыуға һалып, термоста 4 сәғәт төнәтергә лә, һөҙөп, 12 сәғәт эсендә аҙлап эсеп бөтөргә. Дауаланыу курсы - 4 көн.

# ӘНИС ОРЛОҒО

Әнис орлоғо ҡан баҫымын төшөрә. Бынан тыш, эс ҡатыуын бөтөрә, ашҡаҙан, бәүел ҡыуығы ауыртыуын баҫа. Бының өсөн 1 ҡалаҡ әнис орлоғон 0,5-1 литр ҡайнар һыуға һалып, сәйнүк өҫтөн салфетка менән ябып, 40 минут төнәтергә. Уны 3 йотомлап көнө буйы эсеп бөтөрөргә. Ас ҡарынға һәм тулы ҡорһаҡҡа эсмәгеҙ. Дауаланыу курсы - бер аҙна. Артабан ай һайын 2-3 көн эсергә мөмкин.

Әнис орлоғо төнәтмәһе шулай уҡ йүткереүҙе, бронхитты, тамаҡ шешеүен бөтөрә, йоҡоһоҙлоҡтан дауалай.

ИҒТИБАР!

# "ТАМҒА" САҠЫРА

**"Тамға" башҡорт милли кейеме оҫталарының халыҡ-ара конкурсына ғаризалар ҡабул ителә башланы. Бәйге быйыл өсөнсө тапҡыр уҙғарыласаҡ. Ғаризалар 1 сентябргә тиклем ҡабул ителә.**

Конкурста ҡатнашыуға 16 йәштән алып оҫталар, костюмдар буйынса рәссамдар, дизайнерҙар, стилистар, кейем тегеү ательелары, йүнәлешле юғары уҡыу йорттары студенттары саҡырыла. Ул өс этапта уҙасаҡ: беренсе этапта ошо 2022 йылдың 1 сентябренә тиклем ғаризалар ҡабул ителә, икенсе этап - 15-енән 17 сентябргә тиклем һайлап алыу туры һәм конкурс эштәрен яҡлау. Өсөнсө этап - конкурсҡа йомғаҡ яһау, 14 декабрҙә еңеүселәрҙе һәм призёрҙарҙы бүләкләү.

Конкурс түбәндәге номинациялар буйынса үтәсәк:

1. "Башҡорттарҙың милли кейеме - реконструкция";
2. "Башҡорттарҙың заманса авторлыҡ образы";
3. "Балалар кейеме - реконструкциялау";
4. "Башҡорттарҙың милли ювелир биҙәүестәре";
5. "Башҡорттарҙың традицион костюмы аксессуарҙары".

Ғаризалар "Тамга 2022. Номинация _" билдәһе менән ошо электрон почта буйынса tamga_rb@bk.ru ҡабул ителә. Белешмәләр өсөн телефондар: 8 (961)046-23-56, 8 (347) 289-66-47

*"Ҡош юлы"на нигеҙ һалғанда уҡ уны башҡорт телен үҫтереүҙең бер сараһы итеп ҡарағандар. Бөгөн быны́ң дөрөҫ башланғыс булыуын күрәбеҙ. Шулай уҡ айыҡ тормош тәртипкә әүерелһен, тигән маҡсат ҡуйған ойоштороусылар.*



АФАРИН!

# ТУҒАН ТЕЛ МӨХИТЕНӘ,

## айыҡ йәшәү рәүешенә...



**Ошо көндәрҙә Ейәнсура районында үткән "Ҡош юлы" республика башҡорт бард фестивале 10 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Сара билдәле журналист Азамат Юлдашбаев башланғысы менән башҡорт йәштәре өсөн туған телдә аралашыр айыҡ мөхит, милли мәҙәниәткә һәм шиғриәткә ғашиҡтарҙы берләштерер майҙансыҡ булараҡ ойошторолғайны. Бөгөн ул балалар һәм өлкәндәр өсөн айырым конкурстар уҙғарылған, ҡатнашыусыларҙы бер урынға туплаған, башҡорт сәхнәһенә талантлы йырсыларҙы сығарған үҙаллы бер хәрәкәткә әүерелде. Юбилей сараһының йомғаҡтары тураһында "Ҡош юлы"н ойоштороусыларҙы етәкләүсе Шәфҡәт ҒӘБИТОВ менән әңгәмәләштек.**

**Фестивалдең юбилей йомғаҡтары ниндәй булды?**

- Быйылғы "Ҡош юлы"н, шөкөр, бик юғары кимәлдә ойоштора алдыҡ. Быға Башҡортостан Йәш яҡташтар берлеге ассоциацияһы ярҙамы менән Башҡортостан Башлығы грантын алыу булышлыҡ итте. Шуға, бик күп мәсьәләләрҙе еңел генә хәл итә алдыҡ. Фестивалдә ҡатнашыусыларға, лауреаттарға, төрлө уйын һәм спорт сараларында әүҙемдәргә, талантлы башҡарыусыларға, ойоштороушоусыларға рәхмәт йөҙөнән тапшырылған иҫтәлекле бүләктәр, рәхмәт хаттары һәм грамоталар кеүек мөһим әйберҙәрҙе лә быйыл бик мул әҙерләгәйнек, моғайын, ҡәнәғәт ҡалғандарҙыр.

Алдан хәбәр иткәнебеҙсә, йәштәр менән "Түңәрәк ҡор"ҙа фекер алышыу, төрлө спорт уйындары, ColorFest, "Ҡош юлы уҙышы" ла үткәрҙек. Барыһына ла өлгөрә алырҙармы, кеше йыйылырмы, тип бер аҙ борсолғайныҡ башта. Әммә йәштәребеҙ әүҙем, сәләмәт тормош яҡлы булыуҙарын тағы бер ҡат иҫбатланы. "Ҡош юлы уҙышы"на көтөлгән 5-6 команда урынына 15-ләгән команда тупланды. "Ҡош юлы. 10 йыл - 10 саҡрым" марафонында йүгереүселәр ҙә ихлас ҡатнашты, улар иҫтәлекле бүләктәр һәм миҙалдар менән билдәләнде.

Юбилей сараһының тағы ла бер үҙенсәлеге шунда булды: быйыл яңы конкурсанттар булманы. Фестиваль сиктәрендәге рәсми концерт тулыһынса ошо бер тиҫтә йыл эсендә "Ҡош юлы" еңеүсеһе йәки лауреаты булған талантлы йәштәрҙең сығышынан торҙо. Улар киске сәғәт етенән ун бергә тиклем йырланы, артабан теләге булған һәр кем сығыш яһаны һәм йыр-моң таңғы дүрткә тиклем Ҡыҙылташ яланын яңғыратып торҙо.

Фестивалдең ун йыллыҡ тарихына байҡау яһап, йомғаҡтарын һанағанда, уның башҡорт йәштәре өсөн әһәмиәте тураһында ла телгә алып китергә кәрәктер. "Ҡош юлы" йыр-моңға һәм шиғриәткә ғашиҡ талантлы йәштәребеҙгә йәмғиәттә үҙ урынын табырға, ижады менән башҡаларҙы ҡыуандырырға ярҙам итә. Ул осорған "ҡошсоҡтар" араһында бөгөн сәхнәләрҙә балҡып йөрөгән Миңзәлә Яхина, Тимур Ямалов, Илгиз Муллағәләмов (Гизмо) кеүек һәләтлеләр бар. Киләсәктә лә фестивалдең ошо маҡсатына тоғро ҡалырбыҙ, һәләтле йәштәребеҙ араһынан яңынан-яңы йондоҙҙарҙы асыҡлап тора алырбыҙ, тип ышанабыҙ. Гитарала уйнап йырлаусылар ғына түгел, фото төшөрөргә яратыусылар араһынан да эшен ун йыл элек нәҡ "Ҡош юлы"нан башлаған Эдуард Дилмөхәмәтов, Илнур Ҡужахмәтов кеүек бөгөн бик популяр фотографтар бар. Бынан тыш, һәр башҡорттоң күңел ҡылдарын сиртерлек моңдар, йыр һүҙҙәре ижад итеүсе һәм йәштәр араһында башҡорт мәҙәниәтенә, теленә ҡарата һөйөү, иғтибар тәрбиәләнә. Быйыл Силәбе өлкәһенән тыш, башҡа төбәктәрҙән дә милләттәштәребеҙ килде, хатта Удмурт республикаһынан ҡунаҡтар булды. Быны шулай, "Ҡош юлы" бергә туплай, таныштыра һәм аралаштыра, хатта кемдәрҙелер ҡауыштыра торған сара. Эйе, фестивалгә килеп танышҡан йәштәр араһында матур башҡорт ғаиләләре ҡороп, бынамын тигән итеп тормош көткәндәр ҙә бар. Улар хәҙер бөтә ғаиләһе менән килеп ял итә "Ҡош юлы"нда. Минең дә 2016 йылдан алып бер ҙә ҡалдырмай "Ҡош юлы"на килеүемдең сәбәбе шул: ошонда үҙебеҙҙең мөхиттә ял итмәһәм, йәйем йәй түгел. Бында минең дуҫтар, таныштар, туған телем яңғырап тора. Шуға үҙемдең бер ҙә музыкаға һәләтем булмаһа ла, ошонда күңелем тартыла.

**"Ҡош юлы" - башҡорт телендә һөйләшкән һәм айыҡ мөхит, тип беренсе йылдан уҡ иғлан ителгәйне. Ун йыл эсендә халыҡ быға өйрәндеме?**

- Эйе, тап шулай, "Ҡош юлы"на нигеҙ һалғанда уҡ уны башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереүҙең бер сараһы итеп ҡарағандар. Бөгөн быны́ң ни тиклем дөрөҫ башланғыс булыуын күрәбеҙ. Шулай уҡ үҫеп килгән быуын йәштәре өсөн айыҡ тормош алып барыу нормаға, ҡәҙимге бер тәртипкә әүерелһен, тигән маҡсат та ҡуйған тәүге ойоштороусылар. Шөкөр, "Ҡош юлы" хәрәкәтенә ҡушылып киткән йәштәр быны баштан уҡ аңлаған. Бөгөн фестивалдең ҡатнашыусылары барыһы ла ошо ябай ғына ҡағиҙәне йәшәү рәүеше итеп алған. Хатта элегерәк һыра-маҙар менән шаярған ҡайһы берәүҙәр был насар ғәҙәттәренән баш тартып, яҡшы өлгөгә эйәргән. Әммә фестиваль ойошторолған төбәктәрҙә йәшәгән урындағы халыҡ араһынан барыбер "йәшел йылан" менән мауығыусылар килеп сыҡҡылай.

Һуңғы биш йылда республиканың төрлө райондарында уҙғарылғанға күрә, фестивалдең төп асылын онотоп баралар кеүек. Шуға барыһын да яңынан күнектереү өсөн киләсәктә тик Ейәнсура районында ғына үткәрәсәкбеҙ, урындағы халыҡ та уның асылын дөрөҫ аңлаһын һәм беҙҙең шарттарға күнһен, әйҙә. Концерт ҡарарға ғына тип бер нисә сәғәткә килеп, шул арала һыра сығарып ултырып эсергә иткән кешеләр менән саҡырылған шәхси һаҡ ойошмаһы хеҙмәткәрҙәре, полиция вәкилдәре эшләне. Күҙәтеүҙәрҙән шуны әйтергә кәрәк, йәштәргә бер әйтһәң, тыйыла беләләр былай. Ә бына өлкәндәр менән һөйләшеүе ауырыраҡ. Тимәк, киләсәктә был йәһәттән байтаҡ эшләйһе һәм үҙебеҙҙең дөрөҫлөктө иҫбатлайһы бар.

**Әйткәндәй, киләсәккә ниндәй пландар менән яна "Ҡош юлы"н ойоштороусылар?**

- Бик күп яңы идеялар, пландар бар. Ун йыллыҡҡа үҙебеҙсә йомғаҡтар яһаныҡ, хәҙер яйлап ҡына фестивалде яңы кимәлгә күтәреү буйынса эшләргә, тигән изге ниәт бар. "Ҡош юлы" - ул йәштәр генә түгел, балалар ҙа. Беҙҙең "Тамыр" телеканалы менән берлектә "Ҡош юлы. Балалар" тигән проектыбыҙ уңышлы эшләп килә, тимәк, тотош бер нисә быуын башҡорт бардтары тәрбиәләнә. Был йәһәттән "Ҡош юлы" йырсылары менән республика мәктәптәре буйлап йөрөп концерттар ҡуйырға һәм һәләтле балаларға оҫталыҡ дәрестәре үткәрергә, уларҙы был хәрәкәткә ылыҡтырырға, тигән хыялыбыҙ бар. Ҡасан да булһа уны тормошҡа ашыра алырбыҙ, моғайын. Фестивалдең үҙенә килгәндә, уны дүрт көн үткәргәндә яҡшыраҡ булыр ине һымаҡ. Сөнки саралар шәмбе көнөнә тәғәйенләнә һәм бик тығыҙ килеп сыға, кемдер бөтә теләгән ярыштарҙа ҡатнашырға өлгөрмәй ҡала. Шулай уҡ түңәрәк ҡорҙарҙы оҫталыҡ дәрестәре итеп үҙгәртергә һәм профессионалдарҙы саҡырып, гитарала уйнарға өйрәтергә, башҡортса йыр һүҙҙәре ижад итеү нескәлектәренә төшөндөрөргә ине. Үҙ ҡаҙаныбыҙҙа ғына ҡайнамаҫ һәм башҡорт бардтары сәмләнеп ижад итеүҙе дауам итһен өсөн туғандаш халыҡтарҙың гитарала уйнап йырлаусыларын да саҡырырға теләк бар. Мәҫәлән, ҡаҙаҡтар музыка йәһәтенән бик көслө, улар бында килеп, бынамын тигән итеп сығыш яһаһа, беҙҙекеләрҙең сәменә теймәҫ тимә. "Ҡош юлы" кеүек фестивалдәрҙең үҫеше һәр саҡ тәжрибә уртаҡлашыуҙар, талантлы кешеләрҙең бер-береһе менән даими аралашып тороуына, яңы идеяларҙы ҡурҡмайынса бойомға ашырырға әҙер кешеләр тупланыуына бәйле бит.

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ХАЛЫҠ АУЫҘЫНА...

## мисәт баҫып булмай

Илле яулығың булһа ла, ил ауыҙын тыға алмаҫһың.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер шәкерт бик борсолоп Остазы эргәһенә килә һәм: "Хөрмәтле Остазым, бергә уҡыған шәкерттәр миңәлер минә ҡырын ҡарай һәм был минең тормошомдо түҙеп торғоһоҙ итә. Ошо мөнәсәбәтте нисек үҙгәртергә була, әллә Һеҙ миңә артабан да түҙергә ҡушаһығыҙмы?" - тип һорай. "Был мәсьәләне еңел генә хәл итәбеҙ, - ти Остаз. - Дәрес ваҡытында һин минең эргәмә кил һәм ҡолағыма шыбырлаған бул. Мин дә һиңә яуап итеп шыбырлаған булырмын..."**

**Шулай итәләр ҙә. Был күренеш шунда уҡ бар шәкерттәрҙең дә ҡыҙыҡһыныу үҙәгенә әйләнә. Күпмелер ваҡыттан һуң улар Остазға мөрәжәғәт итә: "О, беҙҙең Остазыбыҙ! Яратҡан шәкертегеҙ менән нимә хаҡында шыбырлашыуығыҙҙы беҙгә лә әйтмәҫһегеҙме?" Остаз шәкерте менән шыбырлашыуҙың йөкмәткеһен әйтеп бирә:**

**- Һин үҙеңдең таҫрайған күҙҙәреңде йәшерә алаһыңмы? - тип һораным.**

**- Эйе, - тине ул.**

**- Һин күпме аҡса эшләнең? - тип һораным.**

**- Ун һум, - тине ул.**

**- Күпмеһен юғалттың? - тип һораным.**

**- Бишге, - тине ул.**

**- 32-һе лә өйҙәме?- тип һораным.**

**- 29-ы ғына өйҙә, - тине ул.**

**Остаздың был хәбәренән бер ни ҙә аңламаған шәкерттәр тамам аптырап ҡала. Шунан улар аңлатыуҙы һорап, Остаздың яратҡан шәкертенә мөрәжәғәт итә.**

**- Барыһы ла ябай ғына, - ти шәкерт.- Остаз һеҙҙең ваҡ-төйәк менән булғанығыҙҙы белә, шуға ла һеҙгә һабаҡ бирергә теләне. Һеҙ Уның минең менән шыбырлашыуҙы миңә булған иғтибар билдәһе тип ҡабул иттегеҙ һәм миңә мөнәсәбәтегеҙҙе үҙгәрттегеҙ.**

**- Ләкин һеҙҙең был серле диалог ниҙе аңлата һуң?- тип ныҡыша шәкерттәр.**

**- Мин ун һум аҡса эшләгәйнем, уның биш һумын улымды уҡытыуға тотондом, - ти шәкерт.**

**- Ә 32 һаны, моғайын да, ниндәйҙер мөһим иҫәпте белдерәлер?**

**- Минең 32 тешем бар ине, 29-ы ғына тороп ҡалды...**

**- Улай булғас, һин беҙгә иң тәүге һорауҙың мәғәнәһен аңлат, - ти тамам аптырауға ҡалған шәкерттәр.**

**- Таҫрайған күҙҙәр - улар һеҙҙең күҙҙәр. Улар ҡомһоҙлоҡтан таҫрайған. Мин һеҙҙә ҡыҙыҡһыныу уятып, күҙҙәрегеҙҙең таҫрайыуын бөтөрҙөм. Ҡыҙыҡһыныусанлыҡ ҡына ваҡ-төйәк менән булышыусыларҙы үҙгәртә ала.**

**- Был хәлдән беҙ ниндәй һабаҡ алырға тейеш һуң? - ти шәкерттәр тәрән борсолоу менән.**

**- Һабаҡ шундай: ҡомһоҙлоҡ, матди донъяла ла, рухи донъяла ла бәләкәй генә ҡәнәғәтләнеү бирә. Әммә ул һеҙгә артабан камиллашырға, юғары аңды үҫтерергә ҡамасаулай. Ҡомһоҙлоҡтан ҡотолдороу өсөн һеҙҙең уй-фекерҙәрҙең ваҡ-төйәк эргәһендә буталыуын күрһәтергә кәрәк ине..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 22031

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
5 август 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3007
Заказ - 973

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.